*✓ Рәсәй тарафынан буйһондоролған бер генә халыҡ та, башҡорттар һымаҡ, үҙ тарихын, хоҡуҡтарын, ер һәм һыуын, милли булмышын яҡлап, иҫ китмәле ҡан һәм күс түкмәне.*
***(М.К. Любавский).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8 - 14 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№41 (459)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ике кеше-**

бер кешенең тәңреһе



3

**Уңыштарының нигеҙе -**



4 атаһы юлын ҡыуыуындалыр...

**Әйҙәгеҙ әле, йәмәғәт...**

туризмды үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ!



8-9

**Ҡымыҙ - әсә һөтөнә тиң,**

тигәнде борондан белгәндәр



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Суверенитет һүҙе онотолдо, ләкин уның тарихи һабаҡтары иҫебеҙҙә. Артабанғы юлыбыҙҙы ни рәүешле фаразлай алыр инегеҙ?

***Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы профессор, йәмәғәт эшмәкәре:*** 1990 йылдың 11 октябрендә Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация ҡабул итеү башҡорт халҡының ғына түгел, ә бөтә Башҡортостандың күп милләтле халҡының тырышлығы, үҙаллылыҡҡа булған ныҡлы ынтылышы менән туранан-тура бәйле. Декларация ҡабул иткәндән һуң сәйәси һәм иҡтисади үҙаллылыҡ халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреүгә, төрлө социаль мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеүгә киң юл асты. Иҡтисади үҙаллылыҡ республиканың социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик юлдарын асыҡлауға, Башҡортостандың һәр йәһәттән ныҡ үҫешкән, тотороҡло субъектҡа әйләнеүенә булышлыҡ итте. Республика үҙаллылығы шул уҡ ваҡытта баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү осоронда халыҡты күп кире күренештәрҙән ҡурсалап тороуға булышлыҡ итте. Башҡортостан Республикаһының йәшәүе һәм үҫеүе, шулай итеп, уның күп милләтле халыҡтары ихтыяжы һәм мәнфәғәте менән бәйле икәне бәхәсһеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Үҙәктең ҡайһы бер идара итеүсе даирәләре ошо ысынбарлыҡты аңларға теләмәй, милли республикаларҙы бөтөрөү уйы тураһында хыяллана. Ләкин Үҙәктең милли сәйәсәте илде сыуалышҡа, тарҡатыуға дусар итәсәк. Федераль үҙәк, әгәр ул хоҡуҡи демократик дәүләт төҙөргә теләй икән, федерализм принциптарын яҡлаған тәрән, фәнни нигеҙҙә эшләнгән милли сәйәсәт доктринаһын булдырырға тейеш. Әлегә иһә Федераль үҙәк, алды-артты ҡарамай, милли республикаларҙың хоҡуҡтарын, уларҙың вәкәләттәрен ҡыҫҡартыу менән мәшғүл. Мәсьәлә шулай тора: йә беҙ етди профессиональ һәм фәнни ҡараштарға нигеҙләнеп, милли республикаларҙың төрлө мәнфәғәттәрен иҫәпкә алған һөҙөмтәле федератив демократия ҡороу юлына баҫабыҙ, йә унитар дәүләт төҙөү һуҡмағын һайлап, унитар, бюрократик-бойороҡ биреү идаралығы системаһына кире әйләнеп ҡайтабыҙ. Дәүләт төҙөлөшөнөң был йүнәлештә китеүе ифрат хәүефле: Рәсәй милли республикаларҙы юҡ итһә, ул СССР һымаҡ уҡ тарҡалыуға дусар буласаҡ. Рәсәйҙә федераль ҡоролошто нығытыу һәм үҫтереү халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын таныусы, барлыҡ милләттәрҙең дә үҫешенә гарантия биреүсе берҙән-бер һыналған юл булыуын онотторға ярамай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## *Республика көнө менән!*




### БАШҠОРТОСТАН

*Башҡортостан - Урал күкрәгенең*
*Меңәр йыллыҡ ҡорос ҡалҡаны,*
*Сыныҡтырған уны башҡортомдоң*
*Ирек өсөн түккән ал ҡаны.*

*Башҡортостан ере, тауҙары ла,*
*Ер аҫты ла бөтмәҫ хазина,*
*Шуға уны яттар баҫып алмаҡ,*
*Бүлгеләмәк булып ҡаҙына.*

*Башҡортостан терәк булды, булыр*
*Ирек даулап берҙәм ҡалҡҡанға.*
*Бирә ныҡлыҡ халҡым берҙәмлеге*
*Урал ҡотон һаҡлар ҡалҡҡанға.*

*Башҡортостан - минең йәнтөйәгем,*
*Башҡортостан - минең ырыҫым!*
*Башҡортостан йәмен, ҡотон һаҡлау*
*Һинең, минең изге бурысым!*

**Рауил НИҒМӘТУЛЛИН.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЫЛ ҺЫНАУҒА...

## студенттарҙы ла дусар итмәкселәр

**Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырып, мәктәпте тамамлаған һәм үҙе теләгән юғары уҡыу йортона уҡырға ингән студенттарға еңел һуларға иртәрәк булып сыкты. Әлеге Берҙәм дәүләт имтихандары процедураһын уларға ҡабаттан үтергә тура килмәгәйне. РФ Мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко БДИ-ны студенттар өсөн дә индерергә йыйына.**

- Бакалаврҙар өсөн, бәлки, БДИ тибындағы имтихан булдырыу тураһында уйларға кәрәктер? Был вуз әҙерләгән һәр белгестең кимәленә берҙәм, ирекле һәм объектив баһа булыр ине. Шул уҡ ваҡытта был вузда уҡытыу сифатын да билдәләйәсәк, - тигәйне Фурсенко августа уҡ.

Ошо көндәрҙә матбуғат сараларында был проект буйынса Рәсәй Хөкүмәтендә әүҙем фекер алышыуҙар башланыуы хаҡында хәбәр ителде. Яңылыкты үҙендә һынаясаҡ тәүге юғары уҡыу йорто - "Юғары иҡтисад мәктәбе" фәнни-тикшеренеү университеты буласаҡ. Артабан имтихан бөтә ил вуздары буйлап таратыласаҡ. Юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар өсөн БДИ Иҡтисад үҫеше министрлығы әҙерләгән "2020 йылға тиклем инновация үҫеше стратегияһы"на индерелгән.

Уҡыуын магистратурала дауам итергә теләүселәр өсөн яҡшы яҡтан танылып өлгөргән һәм күпселек илдәрҙә танылыу алған GRE subject test миҫалында имтихан индереләсәк. Нимә һуң ул GRE? Gradute Record Examination subject test - магистратурала уҡырға теләүсе бакалавриат бөткәндәр өсөн Америка имтиханы. Ул биохимия, күҙәнәк һәм молекуляр биология, химия, информатика, инглиз әҙәбиәте, математика, физика һәм биология буйынса тапшырыла.

Мәғариф һәм фән министрлығындағы сығанаҡтар раҫлауынса, бакалаврҙар өсөн БДИ тибындағы имтихандарҙы ҡайһы бер вуздарҙа киләһе йылдан уҡ индереү ҡарала. Әгәр имтихандар ысынлап та индерелә икән, уның ойошмаһына кем контроллек итәсәк? Мәктәп БДИ-һы менән килеп сыҡкан яңылдар ҙа етерлек бит. Төрлө факультеттар студенттары өсөн контроль-үлсәгес ысулдарҙы нисек төҙөргә?

- Рәсәй вуздарындағы белем сифатына бәйле ҡот оскос хәлдәрҙе иҫәпкә алып, контроллек итеү ысулдарын ысынлап та камиллаштырырға кәрәк, - ти Рәсәй Мәғариф академияһы ағзамөхбире Александр Абрамов. - Ләкин вуз имтихандары ла мутлыктарҙан азат булмаясаҡ. Унан, вуздарҙа специальностар бик күп һәм һәр береһенең үҙенең уҡыу программаһы бар, шуға күрә бөтә студенттарҙы ла "бер тараҡтан" үткәреп булмаясаҡ. Беҙҙә бит дәүләт имтихандары ла бар - Мәғариф һәм фән министрлығы шул системаны камиллаштырыу тураһында уйланһа, яҡшыраҡ булыр ине.

**Фәйрүзә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Суверенитет һүҙе онотолдо, ләкин уның тарихи һабаҡтары иҫебеҙҙә. Артабанғы юлыбыҙҙы ни рәүешле фаразлай алыр инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Әмир ШАМАЕВ, медицина һәм иҡтисад фәндәре докторы, академик, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған врачы:*** Суверенитет һүҙен, эйе, онотторҙолар, ләкин бит халыҡтарҙың, милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын бер кем дә сикләй алмаясаҡ. Башҡортостан Республикаһы барыбер үҙаллы дәүләтселек булып ҡалыуын дауам итә, сөнки бының өсөн беҙҙең иҡтисади ҡеүәтебеҙ ҙә, еребеҙ һәм тәбиғи байлыҡтарыбыҙ ҙа етерлек. Башҡортостандың мөстәҡиллеге фәҡәт уға исем биргән төп халыҡ - башҡорттар өсөн генә кәрәкмәй, ул беҙҙә йәшәгән бөтә милләт халыҡтарының яҡшы, етеш тормошо өсөн дә мөһим шарт икәнлеген онотмаҫҡа ине. Юғиһә, суверенитет өсөн көрәш тәүҙән уҡ башҡорт халҡының "әләшенә төшкән көмөшө" һымағыраҡ ҡаралды, әйтерһең дә, уға бөтәһенә ҡарағанда ла күберәк кәрәк. Башҡалар иһә ҡул ҡаушырып, ә ҡайһы берәүҙәр хатта усты уҫка ышҡып, эштең ни менән бөтөрөн ситтән күҙәтте. Тап ана шул берҙәмлектең булмауы беҙҙе бөгөнгө хәлгә килтереүсе сәбәптәрҙең береһелер ҙә, бәлки. Әлбиттә, Үҙәк тә үҙенекен эшләй бирә. Башҡортостан менән Татарстандан башҡа республикалар баш-аяҡтары менән тип әйтерлек мөлкәттәрен Үҙәккә күсереп, һатып бөтөрҙө бит инде. Ошондай шарттарҙа республикабыҙҙың үҙаллылығы өсөн нимәләр эшләргә маташыусы Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролтайы ғына ҡалды бөгөн. Ҡоролтай - ул тап ана шул суверенитет биргән емештәрҙең береһе бит инде. Миненсә, беҙгә уның эшмәкәрлеген көсәйтеү фарыз. Мин Ҡоролтайҙың һәр бер йыйынында әйтә киләм: башҡа республикаларҙа, әйтәйек, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Яҡут-Саха республикаларында ошондай уҡ ойошмаларҙың вәкәләтлеге Хөкүмәт кимәленән дә юғарыраҡ ҡуйып ҡарала. Беҙҙә лә ул Республикабыҙ Президенты эргәһендә эшмәкәрлек итеүсе бер учреждение булырға тейеш. Юғиһә, хәҙер Үҙәк тарафынан республиканы республика иткән үҙенсәлектәрҙе һанламау, милли бренд статусындағы ҡиммәттәребеҙҙе юҡҡа сығарыу һәм республикаларҙы башҡа өлкәләр һәм крайҙар менән бер рәткә ҡуйып, төҫһөҙ һәм битараф бер генә һүҙ - региондар тип атау ғәҙәткә инеп китте.

***Мәхмүт ХУЖИН, журналист:*** Эске һәм тышҡы сәйәси йоғонтоһо арҡаһында теге йәки был күп милләтле илдәрҙә (империяларҙа) тоҡанып киткән милли-азатлыҡ хәрәкәттәре һәр саҡ мөстәҡиллек яулап алыу менән тамамланған. Миҫал рәүешендә Беренсе донъя һуғышынан һуң юҡҡа сыҡҡан Ғосманлы төрөктәр, Австро-Венгрия һәм Германия империяларын атарға мөмкин. Рәсәй империяһын да, логика буйынса, ошондай яҙмыш көтөргә тейеш ине, ләкин большевиктарҙың милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таныу (күҙ буяу өсөн, әлбиттә) арҡаһында ул һаҡланып ҡалған. Суверенитет яулау ваҡиғалары 1918 йылда саҡырылған Учредительный йыйылыш хәл итмәгән мәсьәләләрҙе сисергә тырышыу кеүек ҡабул ителә. Ләкин Рәсәй быуаттар дауамында халыҡтары бер-береһе менән буталып үҫешкән империя, уның классик империялар кеүек тарҡалыуы, күренеүенсә, мөмкин булмаған хәл.

Конституция буйынса Рәсәй Федерацияһы - федератив демократик хоҡуки дәүләт. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, федератив тигән ҡанун ҡағыҙҙа ғына. Республикалар президенттарының тәғәйенләнеп ҡуйылыуы был юридик норманың тупаҫ боҙолоуын бәхәсләшмәслек итеп дәлилләй. Ғөмүмән, һалым, мәғариф, башҡа иҡтисади-социаль мәсьәләләр буйынса федераль үҙәктең ихтыяры хөкөм һөрөүе суверенитеттан бер ни ҙә ҡалмауы тураһында һөйләй. Ә бит демократик илдәрҙә вәкәләттәр "юғарынан түбәнгә" төшөрөлмәй, киреһенсә, "түбәндән юғарыға" тапшырыла. Күп осраҡта АҠШ демократияһына һылтанырға яратҡан тар даирәләр Ҡушма Штаттарҙа тап шундай принцип эш иткәнен беҙҙән йәшерә. Хәҙер Мәскәү көслө, үҙенең теләһә ҡайһы ихтыярын тығыҙ тиҫтәгә яҡын төбәккә көслөп тағы ала. Әлбиттә, Мәскәүҙең быңдай ғәйрәте уның ысынлап та көслөлөгө менән түгел, ә милли республикаларҙың тарҡаулығы, тимәк, көсһөҙлөгө менән аңлатыла. Власты бер үҙәктә туплауҙың тағы ла 80-се йылдар аҙағындағы хәлдәрҙең ҡабатланыуына килтерәсәген аңлау өсөн әллә ни аҡыл кәрәкмәй...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сөмөн һәм гәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйбыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. **Ә октябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "2011-2012 уҡыу йылында айырыуса һәләтле балаларға Башҡортостан Республикаһы Президенты стипендияһын тәғәйенләү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, айлыҡ стипендиялар дөйөм белем биреү учреждениеларының һәм махсус мәктәптәрҙең уҡыуҙа, ижади эшмәкәрлектә һәм спортта юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән айырыуса һәләтле уҡыусыларына тәғәйенләнә.

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов АҠШтың Екатеринбургтағы Генераль консулы Майкл Рейнерт менән осрашты. Дипломат менән һөйләшеү барышында Рөстәм Хәмитов Башҡортостандың Рәсәй Федерацияһының эре субъекты булыуын, халыҡ иҫәбе буйынса күрше төбәктәр араһында илдә етенсе урында тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул шулай уҡ республикала инвесторҙарҙы, шул иҫәптән сит илдәгеләрен дә йәлеп итеү буйынса эш алып барылыуын билдәләне. Киләһе йылда республикала Европа илдәре бизнесы ҡатнашлығында бер нисә халыҡ-ара форум үткәреү планлаштырыла, тип билдәләнде.

✔Республиканың урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарында Башҡортостан Президенты стипендиаттарын тәбрикләү тантаналары үтә. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, иң яҡшыларға республика Президенты стипендияларын биреү йолаһы 1994 йылдан йәшәп килә. Төбәк Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2011-2012 уҡыу йылында Президент стипендиаты кеүек юғары статусҡа йәмғеһе 140 вуз студенты, 125 урта һөнәри белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы, 55 аспирант һәм 15 докторант лайыҡ булған.Ошонон менән бер рәттән, Башҡорт дәүләт университетында Мостай Кәрим исемендәге исемле стипендиялар тапшырыу тантанаһы ла көтөлә.

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "2011 - 2012 уҡыу йылында айырыуса һәләтле уҡыусылар өсөн Башҡортостан Республикаһы Президенты стипендияларын тәғәйенләү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы.Уға ярашлы, дөйөм белем биреү учреждениеларының һәм махсус мәктәптәрҙең уҡыуҙа, ижади эшмәкәрлектә һәм спортта юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән айырыуса һәләтле уҡыусыларына айлыҡ стипендиялар билдәләнәсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИКЕ КЕШЕ-

## бер кешенең тәңреһе

**Халҡыбыҙҙа берҙәмлек хаҡында мәҡәл-әйтемдәр бик күп. Уларҙың киң таралған бер нисәүһе: "Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар", "Бер бүрәнә өй булмай", "Яңғыҙ ҡарлуғас яҙ килтермәй", "Берҙәмлектә - көс", "Күмәкләгән - яу ҡайтарған", "Ил төкөрһә, күл була", "Тамсы тама-тама ташты тишә", "Ваҡ балыҡ көтөүе менән йөрөй", "Береккән көтөүҙе бүре алмай" һ.б. Берҙәмлек, татыулыҡ тураһындағы ошондай әйтемдәр араһынан "Ике кеше - бер кешенең тәңреһе" тигәне берҙәмлек хаҡындағы фекер-идеянан тыш, тағы ла икенсерәк планда, киңерәк итеп уй йөрөтөргә лә мөмкинлек бирә кеүек. "Бер баштан ике баш яҡшы", "Берҙән ике яҡшы" тигән әйтемдәр ҙә бар барлыҡҡа, әммә улар тәүгеһенең мәғәнәһен тулыһынса асып бөтмәй.**



Шағир һәм прозаик, журналист Урал Мостафиндың гәзиттең 37-се һанында баҫылған "Өйөр ҡорбаны" хикәйәһен уҡыусылар унда күтәрелгән проблемаға битараф ҡала алмағандыр ул, тип уйлайым. Ғөмүмән, әҙәбиәт ғилеме белгестәре авторҙың ошо һәм гәзиттең 38-се һанында баҫылған "Бурҙар" хикәйәләренә ҡарата тәғәйен фекерҙәрен әйтер, әсәрҙәр үҙ баһаһын алыр, тип өмөттәнәм. Автор, минеңсә, башҡорт уҡыусыһын әлегә тиклем беҙ үтеп инмәгән тормош күренештәре һәм ҡатламдары аша үҙенең күңел сөңгөлдәренә алып инеп, әҙәбиәттә яңы фекер әйтә кеүек. Яҙыусының үҙенсәлекле психологик алымы беҙ әҙәбиәттә күптән күреп өйрәнгән тәбиғәт күренештәренә бәйле геройҙарҙың уй-кисерештәренән, автор фәлсәфәһенән ныҡ айырыла. Ғөмүмән, "психоаналитика ысулы" Урал Мостафиндың проза әсәрҙәренә генә түгел, шулай уҡ шиғырҙарына, фәлсәфәүи уйланыуҙарға ҡоролған публицистик мәҡәләләренә хас. Был - айырым һөйләшеүҙе талап иткән мәсьәлә.

"Өйөр ҡорбаны" - тәрән психологик һәм философик әҫәр. Әҫәр геройы - бер ойошмала етәксе булып эшләүсе Мират үҙенең ғаилә тормошона бәйле борсолоулы уйҙарға бирелеп, ҡала урамынан китеп барғанында бер төркөм үсмерҙәрҙең ҡапыл: "Дядя, дай закурить?" - тип өндәшеүенән албырғап ҡала һәм, нишләргә лә белмәйенсә, йүгерергә тотона, йәғни унайһыҙ хәлдән йүгереп сығырға тырыша. Быны күргән үсмерҙәрҙә өйөр тойғоһо уяна һәм улар өйөрҙөң ярһыулығына бирелеп, Мираттың артынан ҡыуа төшә. Ҡасыусы автоматик рәүештә ҡурҡыуға төшә. Автор был осраҡта үҙенә хәүеф янаған сығанаҡтан ҡасып ҡотолорға теләүсе менән уны баҫтырыусыларҙы тәбиғи инстинкт (йыртҡыс - ҡорбан) кимәленә төшөрә һәм шул рәүешле хикәйәләүен дауам итә. Мират өйөрҙөң ҡорбаны булыуҙан ҡотолоу өсөн кеше күберәк йөрөгән яҡҡа - баҙарға ҡарай йүгерә һәм унда күптәнге танышы Фәритте осрата һәм ул табып биргән фотоаппарат ярҙамында үҙенең ҡурҡыу тойғоһо ярҙамында барлыҡҡа килгән өйөрҙө тарҡата, юҡҡа сығара. Әсәрҙең йөкмәткеһе ҡыҫҡаса ошоға ҡайтып ҡала. Хикәйәлә хәрәкәт әллә ни күп түгел, геройҙың ҡасырға тотонған урындан башлап баҙарға тиклем генә, әммә күңел кисереше хәрәкәтенә килгәндә, Мират ошо ҡыҫҡа ғына арауыҡта тотош бер ғүмер кисергәндәй...

Бер яҡтан уйлағанда, инде апаруҡ йәштәге оло кешенең үҙенең балалары йәшендәге үсмерҙәрҙән ҡасып барыуы башта мәрәкә кеүек тойола, шуға әҫәр ҡапылғарай ышандырмай ҙа кеүек. Әммә, төпкәрәк төшөп уйланһаң һәм үҙеңде Мират урынына ҡуйып ҡараһаң, башҡа төрләрәк тә уйларға мәжбүрһең:

- Мират бит бында үсмерҙәрҙән түгел, үҙенең һаҡһыҙлығы арҡаһында үҙе үк барлыҡҡа килтергән өйөрҙән ҡасып ҡотолорға теләп, ошондай хәлгә ҡала;

- Өйөрҙөң тыуған урыны урам түгел, ә Мираттың күңеле, унда ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килеү менән үк өйөр ҙә хасил була;

- Өйөрҙөң барлыҡҡа килеү маҡсаты ҡорбанды ҡыуып етеү булһа, уның формалашыу нигеҙендә ҡурҡыу тойғоһо ла ята;

- Мират өйөрҙән ҡасып ҡотолорға итһә лә, асылда, үҙ-үҙенән ҡасырға теләй,

"Өйөр ҡорбаны" хикәйәһенән өйөр анатомияһы хаҡындағы әҫәр тип тә атарға мөмкин булыр ине. Өйөрҙөң яңғыҙаҡтарҙан өҫтөнлөгө шунда: уның бар ағзалары ла бер маҡсатта бер йөҙрөккә төйнәлә, уға ҡурҡыу тойғоһо хас түгел, яһалған аҙым, ҡылған ҡылыҡ өсөн яуап биреүсе лә юҡ. Шул уҡ ваҡытта өйөр араһынан яуап биреүселәрҙе эҙләй башлауың була (хикәйәлә Мират үсмерҙәрҙе фотоға төшөрә башлай), ул нисек ойошҡан булһа, шулай уҡ юҡҡа сыға.

"Ике кеше - бер кешенең тәңреһе" әйтемен бар тулылығында аңларға теләүем ошо хикәйәне иҫкә төшөрҙө. Әйтем берҙәмлек хаҡында, ә берҙәмлектең иң ныҡ ойошҡан тәбиғи формаһын өйөр тәшкил итә. Кешелектең иң берҙәм ойошҡан формаһы - милләт, тәбиғәттеке - өйөр. Милләт бер ерҙә йәшәүсе бер ҡанлы кешеләрҙең уртаҡ маҡсатын бойомға ашырыу (әйтәйек, милләтте һаҡлау, үҫтереү өсөн дәүләт системаһын барлыҡҡа килтереү) юҫығында барлыҡҡа килһә, өйөр стихиялы рәүештә ойоша. Һуңғы йылдарҙа милләттәрҙе һәм уларҙың дәүләттәрен ҡаҡшатырға теләүсе көстәр уларҙың эсендә "өйөрҙәр" барлыҡҡа килтереп, бер-берегенә һөслөү ысулы менән күп кенә нәмәгә лә ирешә. Бындай бысраҡ сәйәсәттән, асылда, мосолман илдәре зыян күрә. Ҡытай менән Ҡырғыҙстан сигендә үҙенең стратегик планын тормошҡа ашырыу маҡсатында Американың махсус хеҙмәттәре ҡырғыҙ милләте эсендә ике "өйөрҙө" барлыҡҡа килтереп, уларҙың дәүләтенә ҙур зыян яһаны. Һөҙөмтәлә хәҙерге ваҡытта бер миллионға яҡын ҡырғыҙ үҙ дәүләтен ташлап китергә мәжбүр булды. Милләт ниндәй генә хәлгә ҡуйылмаһын, ундағы төп йәшәү принцибы - "Ике кеше - бер кешенең тәңреһе" берҙәмлек ҡағиҙәһе үтәлмәһә, ошондай хәлгә тарыйҙыр. Бындағы "ике кеше" һүҙбәйләнешенең шартлы икәнлеге лә аңлашыла. Ике кеше, йәғни берәү түгел, ә күмәк мәғәнәһе. Күмәк икән, тимәк, бында ара, зат, ырыу, ҡәүем күҙ уңында тотола. Хәҙер инде ошо бүленеште "Ике кеше - бер кешенең тәңреһе" тигән әйтемгә бәйләп аңлатһаҡ: "Һәр кем үҙенең ырыуы, ҡәүеме йәшәү рәүешен, йола-традицияларын ҡабул итергә һәм уның ҡанундары буйынса йәшәргә бурыслы", - тигән һығымтаға барып сығабыҙ. Һәр милләт ағзаһының үҙ милләт йәшәйеше ҡанундарын тайпылышһыҙ үтәүе өсөн ошонан да фәһемлерәк әйтемдең булыуы мөмкинме икән? "Тәңре" атамаһы бында һәр кем тайпылышһыҙ үтәргә тейеш булған ҡанундың, йәшәйеш рәүешенең әһәмиәтен күтәреү өсөн символик рәүештә алынғанға оҡшай. Шул уҡ ваҡытта һин ике кешенең: атайың менән әсәйеңдең йәки башҡа туғандарыңдың, милләттәштәреңдең әйткәнен һанға һуҡмайынса, үҙеңсә йәшәргә тырышаһың икән, уларҙан айырылаһың-бүленәһең икән, айыу-бүрегә ем булаһың йәғни башҡалар тарафынан йотолаһың. Милләттең, кешелектең һәләкәткә барыуының нигеҙендә тап ошо сәбәп ята ла инде. Был әйтем айырым бер милләттең генә түгел, дөйөм кешелек йәшәйеше өсөн дә иң кәрәкле иҫкәртмә-ҡанун булырлыҡ милли идеяға торош.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү хаҡында"ғы Законға ҡул ҡуйҙы. Ул шәхси торлаҡ төҙөү өсөн өс һәм унан күберәк бәлиғ булмаған бала тәрбиәләгән граждандарға бер тапҡыр бушлай ер участкаһы биреүҙе күҙ уңында тота. Инвалид бала тәрбиәләүселәр ҙә ошондай уҡ хоҡуҡҡа эйә. Участкаһын рөхсәт ителгән (иң бәләкәй һәм иң ҙур) күләме 0,08-ҙән 0,2 гектарға тиклем тәшкил итә. Йыл башына бирелгән мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда өс һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 34 меңдән ашыу ғаилә йәшәй. Республикала шулай уҡ 14 мең самаһы инвалид бала иҫәпләнә.

✔Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән 2012 - 2016 йылдарға хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу һәм хеҙмәтте һаҡлауҙың айырым маҡсатлы республика программаһы раҫланды. Билдәле булыуынса, йыл һайын республика ойошмаларында 100-ҙән ашыу кеше һәләк була. Мәҫәлән, 2010 йылда производствола 79 хеҙмәткәр һәләк булған һәм 186-һы имгәнгән. Бәхетһеҙлек осраҡтарының күбеһенә эште дөрөҫ ойоштормауы, эш биреүселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең норматив талаптар хаҡында белмәүе сәбәпсе.

✔Рәсәйҙә 1 октябрҙән көҙгө хәрби саҡырылыш башланды. Башҡортостан Хәрби комиссариаты белгестәре билдәләүенсә, республиканан биш меңгә яҡын егет алынасаҡ, был яҙғы саҡырылыш менән сағыштырғанда өс меңгә аҙ. Медицина комиссияһы үткән егеттәрҙең 66 проценты хәрби хеҙмәткә яраҡлы, 18 проценттан күберәге юғары белемгә эйә.

✔Баймаҡ ҡалаһында Башҡортостан Хөкүмәте Президиумының һаулыҡ һаҡлау өлкәһен үҫтереү мәсьәләләренә арналған күсмә ултырышы булды. Ултырышта сығыш яһап, республика Президенты Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау өлкәһен яңыртыу буйынса 2011 - 2012 йылдарҙа тормошҡа ашырылыусы программа менән таныштырҙы. Документҡа ярашлы, был маҡсатҡа 15,5 миллиард һум аҡса бүленәсәк, уның төп өлөшөн федераль ҡаҙна тәьмин итергә тейеш. Республикаға әлеге сығымдарҙың 3 миллиард һумы күсерелгән дә инде. Шул иҫәптән 576 миллион һумды Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында медицина тармағын көсәйтеүгә тотоноу күҙаллана.

✓ *Училище директорҙары әйтеүенсә, хәҙер бынан бер нисә йыл элек әһәмиәтен юғалта төшкән һөнәрҙәргә, әйтәйек, тракторсы, механизаторға уҡырға теләүселәр арта.*



АФАРИН!

**Баш ҡалала ауыл хужалығы йәрминкәләре дауам итә. Үткән шәмбе Спорт һарайы янындағы майҙанда башланғыс һөнәри белем биреү учреждениелары тарафынан етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһы һәм халыҡ ҡулланыу тауарҙары Республика йәрминкәһе үтте.**



# СТУДЕНТТАР ҘА...

## йәрминкә үткәрҙе

Һәр йыл һайын республиканың төрлө ҡала һәм райондарында урынлашҡан һөнәри училище һәм лицейҙарының баш ҡалала бер урынға йыйылып, йәрминкә уҙғарыуы хәҙер матур бер йолаға әүерелгән. Быйыл унда 90-дан ашыу уҡыу йорто ҡатнашты. Райондарҙа урынлашҡан башланғыс һөнәри белем биреү училищеларының күбеһе ауыл хужалығы йүнәлешендә эшләгәнлектән, улар Өфө халҡына осһоҙ хаҡҡа үҙҙәре үҫтергән йәшелсә, емеш-еләк, ит, һөт продукцияһы тәҡдим итте. Был йүнәлештә белем биреүсе училищелар араһында Өфө районының 83-сө һөнәрселек училищеһы умартасылыҡ буйынса тотош республика өсөн белгестәр әҙерләй, шуға ла был уҡыу йорто етештергән балдың тәме баш ҡалала йәшәүселәргә яҡшы таныш. Бынан бер нисә йыл элек кенә был училище Бөтөн Рәсәй өстөнлөклө милли проекттар конкурсында еңеп, үҙенең матди базаһын нығытыуға өлгәшкәйне. Хәҙер ошо техника уларға бюджеттан тыш эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә һәм өҫтәмә килем алырға мөмкинлек бирә. Училище директоры Илшат Әминев әйтеүенсә, был аҡса студенттарҙың йәшәү шарттарын яҡшыртыуға, йыһаздар, спорт инвентарҙары һатып алыуға, мәҙәни сараларға йөрөүгә тотонола.

Тегенселәр, ашнаҡсылар, мебель эшләү оҫталары, ташсылар әҙерләүсе Сибай ҡалаһының 24-се һөнәри лицейы ағастан, металдан эшләнгән йорт йыһаздары, баҡса өсөн беседкалар, өҫтәлдәр, биҙәкле һандыҡтар менән һатыу итте. Лицейҙың уҡытыу-тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары Лилиә Сәлимгәрәева эшсе һөнәрҙәрҙең йәштәр араһында яңынан популярлыҡ яулай барыуын да билдәләне. Ысынлап та, бөгөн башланғыс һөнәри белем биреү училищелары һәм лицейҙары хеҙмәт баҙарында талап ителгән кәрәкле һөнәрҙәргә уҡытыуға һәм йәш белгестәрҙең артабан һөнәре буйынса эшкә урынлашыуына айырыуса иғтибар бүлә. Заман талабына ярашлы, яңынан-яңы һөнәрҙәр барлыҡҡа килеп тора. Училище директорҙары әйтеүенсә, хәҙер бынан бер нисә йыл элек әһәмиәтен юғалта төшкән һөнәрҙәргә, әйтәйек, тракторсы, механизаторға уҡырға теләүселәр арта. Был һуңғы йылдарҙа Хөкүмәт тарафынан ауыл хужалығына булған иғтибарға һәм Урал аръяғы райондарында фермер хужалыҡтарының арта барыуына бәйле. Баймаҡ ҡалаһының 105-се һөнәрселек училищеһы директоры Афзал Исхаҡов хатта вуз бөтөп эшкә урынлаша алмай йөрөгән йәш белгестәрҙең дә яңынан эшсе һөнәрҙәргә уҡырға килеүе тураһында белдерҙе.

Йәрминкә сиктәрендә "Бауырһаҡ конкурсы" ла ойошторолдо. 50-гә яҡын уҡыу йорто үҙенең рецебы буйынса бауырһаҡ бешереп, һатып алыусылар араһынан һайлап ҡуйылған жюри ағзалары хөкөмөнә сығарҙы. Конкурстың еңеүселәренә социаль партнерҙар тарафынан әҙерләнгән бүләктәр тапшырылды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Урта һәм юғары белем биреүсе уҡыу йорттары барлыҡ абитуриенттарҙы үҙҙәренә йәлеп итеп торған заманда йәшәйбеҙ, шуға ла башланғыс һөнәри белем биреү системаһының бер аҙ ҡаҡшап киткән ваҡыттары ла булды. Был үҙ сиратында хеҙмәт баҙарында талап ителгән артығыраҡ белгестәр һанының күбәйеүенә, эшсе һөнәр эйәләренең етешмәүенә килтерҙе. Былар барыһы ла һөнәри училище һәм лицейҙарының белем биреү системаһында бик кәрәкле сылбыр икәнлеген дәлилләй. Тап был уҡыу йорттарында лайыҡлы йәшәү өсөн аҡса табырға мөмкинлек биреүсе һөнәрҙәр алырға мөмкин икәнлеген ошондай йәрминкәләр ҙә күрһәтә.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

- йәштәрҙең тоҙло-боросло итеп "аралашыу сараһы" нан ҡолаҡ япраҡтары "һулый". Уларҙа телмәр культураһы тәрбиәләү һүҙ менән эш итеүсе һәр кемдең бурысы. Был изге эште башҡарыу барышында беҙ яңғыҙ түгел. Уҡытыусылар, тәрбиәселәр, мәҙәниәт, сәнғәт һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре власть органдарының даими хәстәрлеген, ярҙамын тоя.

Шуныһы айырыуса ҡыуаныслы: Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев тарафынан йыл һайын БР дәүләт телдәре үҫеше һәм уны пропагандалау эшенә лайыҡлы өлөш индергәндәргә махсус премия тапшырыу тантанаһы уҙғарыу матур йолаға әүерелде. Баш ҡалабыҙ мэрияһы быйыл да ошо традицияға тоғро ҡалып, үҙенең Ҙур залы фойеһында бер төркөм мәғариф учреждениелары, мәҙәниәт, сәнғәт һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең бер төркөм вәкилдәренә сираттағы йыллыҡ премияны тапшырҙы. Премияға лайыҡ булғандар араһында Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы Әлфирә Әхмәтова, 84-се татар гимназияһы уҡытыусыһы Мәүзилә Үтәева, БДУ-ның "Таусень" рус фольклор ансамбле, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се Республика балалар йорто педагогы, билдәле ҡумыҙсы Миңлегәфүр Зәйнетдинов һәм редакциябыҙ журналисы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәүзиә Мөхәмәтшина ла бар. Тел һағында тороусы, ошондай матур бүләккә лайыҡ булыусыларҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Фәнзилә БАЙЫМОВА.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ АЛДЫНАН...

## уңыштар барланды

**Был мөһим байрам уйын-көлкө, сағыу тамашалар, күңел асыуҙар ғына түгел, үҙенә күрә башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһау ҙа булып тора. Тап шуны күҙ уңында тотоп, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев журналистар менән осрашып, үткәндәрҙе барланы.**

Һигеҙ ай һөҙөмтәләре буйынса әлегә дүрт өлкә - нефть продукттары, резина-техник изделиелар, аҙыҡ-түлек етештереү, транспорт саралары эшләү буйынса күрһәткестәр минуста барһа ла, сәнәғәт етештереүенең барлыҡ өлкәләрендә лә үҫеш күҙәтелә һәм сәнәғәт производствоһы индексы 108,6 процент тәшкил итә, тине үҙ сығышында ҡала башлығы. Әлеге көндә Өфөлә дөйөм суммаһы 90 миллиард һум тәшкил иткән 71 инвестиция проекты тормошҡа ашырыла. Улар 18 мең кешегә эш урындары булдырасаҡ. 2012 йылда инвестициялар артып, көрсөккә тиклемге кимәлгә етеүе көтөлә. Әле "Инвестор атласы" булдырылып, ул ҡала сайтына урынлаштырылған. Ул инвесторҙарҙы йәлеп итеүгә ярҙам буласаҡ. Бөгөнгә баш ҡалаға Мәскәү, Екатеринбург инвесторҙары инеп, нигеҙҙә, улар сауҙа өлкәһендә эш итә. Әммә оҙайлы ваҡытты күҙаллаған проекттар күп түгел.

Торлаҡ мәсьәләһенә килгәндә, һигеҙ айҙа 400 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны сафҡа индерелгән. 2012 йыл башына был күрһәткестең 750 мең квадрат метрға етеүе күҙаллана. Был уртаса алғанда бер кешегә 21,5 квадрат метрҙы тәшкил итеп, 2005 йыл менән сағыштырғанда 7 квадрат метрға күберәк. Бөгөн шулай уҡ балалар баҡсаһы проблемаһы көнүҙәк булып ҡала һәм уны хәл итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла. 2011-2012 йылдарҙа баш ҡала 30 балалар баҡсаһын сафҡа индереүҙе үҙмаҡсат итеп ҡуйған.

Транспорт мәсьәләһенә килгәндә, быйыл мегаполистың троллейбус паркы - 19, автобус паркы 20 "НефАЗ" автобусы менән тулыландырылған. Трамвай депоһы ла 10 процентҡа яңыртылған. Юл төҙөүҙә лә һыңғай күренештәр бар: дөйөм алғанда 410 мең квадрат метр юл төҙөкләндерелгән. Ул ғына ла түгел, улар инвалидтар, йәш әсәләр коляска менән йөрөргә уңайлы булһын өсөн махсус стандарттарҙы иҫәпкә алып эшләнгән. Шулай уҡ йорт алдарын төҙөкләндереүгә 795 миллион һум аҡса бүленгән һәм был эш йәнле бара. Торлаҡ-коммуналь хужалығы 39 йортто ремонтлаған, 65 лифт алыштырылған.

Йыл башынан алып демография күрһәткестәре лә ҡыуандыра - 9805 бала тыуып, тәбиғи үҫеш 1147 кеше тәшкил итә. Эшһеҙлек проблема итеп күтәрелһә лә, бөгөн бер эшһеҙгә ике вакантлы урын тура килә, әммә берәү ҙә урам һепереүсе булып барғыһы килмәй...

Байрам сараларына килгәндә инде, улар Өфөнөң мәҙәниәт учреждениеларында, концерт майҙандарында, мәҙәниәт һәм ял парктарында үтәсәк. Өфөлә генә түгел, баш ҡала райондарында ла был көндәрҙә мәҙәни саралар гөрләйәсәк. Байрамдың рәсми өлөшө 10 октябрҙә 14.30 сәғәттә Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуҙан башланасаҡ, шул уҡ көндө Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында тантаналы ултырыш уҙасаҡ. 11 октябрҙә Рус драма театры алдындағы майҙанда киске сәғәт һигеҙҙә байрам концерты ойошторыласаҡ. Шул уҡ көндә спорт һөйөүселәр өсөн Ҡариҙел йылғаһы буйында иртәнге сәғәт 11-ҙә йүгерергә яратыусылар араһында еңел атлетика кросы уҙасаҡ. Тантаналар 22.30 сәғәттә Ленин майҙаны һәм УМПО мәҙәниәт һарайы алдында күкте төрлө төҫтәргә биҙәүсе фейерверк менән тамамланасаҡ.

Шәрифә САЛАУАТОВА.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Эс таҙалау

80 гр. кастор майы, 80 гр. кефир, булһа, таҙа ғына 80 гр. коньяк, ул булмаһа, 1 сәй ҡалағы лимон һуты. Бергә болғап эсәһең, эсте таҙалай, күп йөрөтә тышҡа. Иртәгеһенә йәшелсә ашы, салат ашарға. Уныһы тағы ла күп сығара (йылына бер эшләргә).

## Йөрәк йыш типкәндә

Бер аш ҡалағы кипкән, ваҡланған мелиссаны бер стакан ҡайнар һыуға һалырға һәм 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы көйө көнөнә өс мәртәбә ашар алдынан яртышар стакан эсергә. Был доза артыҡ тойолһа, көнөнә 2 тапҡыр ғына эсергә кәрәк. Төнәтмәне бер нисә ай эсергә була.

## Бутҡанан баш тартма

Ун көн буйы гел бутҡа ғына ашап торһаң, бик күп ауырыуҙарҙан ҡотолорға була.

❖ Ҡарабойҙай бутҡаһы ҡанды яҡшырта,

❖ тарыныҡы ҡан баҫымын төшөрә,

❖ һолоноҡо организмды магнийға туйындыра, иммунитетты көсәйтә.

Һоло һәм бойҙай - цинк сығанаҡтары ла,

❖ арпа бутҡаһы эсәклектең ҡыҫҡарыуын яҡшырта, эсте йомшарта, организмдан шлактарҙы сығара, май алмашыныуын яйға һала.

## Быуындар һыҙлаһа

Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-2 -шәр балғалаҡ сельдерей һутын эсергә кәрәк. Йәки 1 аш ҡалағы сельдерейҙы 1 стакан ҡайнар һыуға һалып тороп, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 2-шәр аш ҡалағы эсергә.

## Тымау тейһә

Бәләкәй генә быяла банкаға яртылаш ҡайын бөрөһө тултырырға ла, банка тулғансы үҫемлек майы ҡойоп, 7-9 көнгә ҡараңғы урынға ултыртырға. Шул төнәтмәне 1-2 тамсы танауға тамыҙырға. Өйөгөҙҙә бындай төнәтмә гел булһын, эшләүе лә, ҡулланыуы ла еңел.




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,
## ҡатындары тәрбиәле булһа

Әсә булыу - бөйөк бер ниғмәт-муллыҡ үә тиңдәше булмаған бер хөрмәт икәнлегенә шик юҡтыр. Бындай хөрмәткә әсәлек вазифаһын үә ҡатынлыҡ бурысын еренә еткергән заттар ғына лайыҡлы була.

Ҡатындарҙың ғалимлығы, инженерлыҡ итеүҙәре йәки ебәктәргә төрөнөп ҡунаҡҡа йөрөп ваҡыт үлтереүҙәре, динебеҙ өйрәткәнсә, хупланмай торған ғәмәлдәрҙер. Ҡатындарға Аллаһы Тәғәлә тарафынан бүләк ителгән балаларҙы тейешенсә тәрбиәләү үә үҙҙәренә хас булған бурыстарҙы кәмселекһеҙ үтәү йөкмәтелгәндер. Бала тәрбиәләү өсөн кәрәк булған ҡайһы бер ғилемдәрҙе, йәғни баланың сәләмәтлеген һаҡлау, әхлаҡ һәм рух тураһындағы ғилемде, шәриғәт ҡағиҙәләрен белеү - ҡатындарға тейеш булған бер вазифалыр. Баланы ваҡытында имеҙеү, ваҡытында йоҡлатыу, кәрәк ваҡытта йыуындырыу, кейемдәрен пак тотоу, таҙа итеп ҡарау, гүзәл холоҡтарға ғәҙәтләндереү, аяғына баҫып йөрөгәндә һәм һөйләшә башлағанда айырым диҡҡәт итеү кәрәк булыр.

Бала тәрбиәләү ҡара күңел үә ҡатылыҡ менән түгел, бәлки, йомшаҡлыҡ, сабырлыҡ, шәфҡәтлелек, аңлылыҡ менән атҡарылыр. Быны иһә баланы теҙгенһеҙ хайуан кеүек, үҙ иркенә ҡуйыу тип аңламағыҙ. Үҙе өсөн зыянлы менән файҙалы нәмәне айыра белмәгән был йәш йән эйәһен ҡарауһыҙ тотоу - оло хаталыҡтыр. Бәлки, уны ҡатылыҡ менән йомшаҡлыҡ уртаһында булған ғәҙеллек юлы менән тәрбиәләргә кәрәк булыр. Ата-әсәгә итәғәт итеүҙе, йәғни күндәм булыуҙы, динде хөрмәт итеүҙе, туған үә башҡа ҡәрҙәш-ҡәбиләне, ҡәүем үә милләтте һөйөүҙе, һәр бер оло үә кесегә кәрәгенсә мөғәмәләлә булыуҙы балаларҙың ҡанына һөт менән берлектә һеңдереү тейеш. Бының кеүек бурыстарҙан атайҙар ҙа ситтә ҡалмаһа ла, беренсе дәрәжәлә булған яуаплылыҡ ҡатындар өҫтөндә булаҫаҡтыр. "Бер ҡатындың аҡылын үлсәргә теләгән ваҡытта, уның ҡулы аҫтында булған балаларына ҡарағыҙ!" - тигәндәр.

Һәр һораған нәмәһен биреү үә, киреһенсә, баланың һүҙенә һис бер ҡолаҡ һалмау, ифрат артыҡ һөйөү, үҙен шаштырып маҡтау, һәр хәрәкәт үә мөғәмәләһен хуплап тороу, ҡиммәтле үә зиннәтле кейемдәр кейергә ғәҙәтләндереү үә һәр ваҡытта тәмле әйберҙәр ашатыу - баланың холҡон боҙоуҙа иң йоғонтоло сәбәптәрҙер. Ялҡаулыкты насар итеп күрһәтеү, тырышлыҡты һәм әүҙемлекте камиллыҡ тип инандырыу, үҙенән оло булғандарҙы хөрмәт итеүҙе, кеселәргә мәрхәмәтле булыуҙы өйрәтеү, күңелдән көнләшеү, дошманлыҡ, тәкәбберлек, ғәйбәт үә ялған һөйләү кеүек боҙоҡлоҡ сүптәрен сығарып, улар урынына Аллаһы Тәғәләне һөйөү, тотанаҡлыҡ, мал тота белеү, ғәҙеллек орлоҡтары сәсеү - баланың гүзәл холоҡло булыуына сәбәпсе булыр. Әсә кеше теле менән балаһына ни ҡәҙәр гүзәл нәмәләр өйрәтһә лә, эш-фиғеле насар булһа, яман холоҡ өйрәтеүсе һаналыр. Сөнки йәш балалар ата-әсәһенән күргәнгә эйәрер.

Ғаиләлә тәрбиә булғанда, мәғлүмәтле әсәләр, динле үә инсафлы ҡатындар тарафынан диҡҡәт менән еренә еткерелгән милләттең балалары - гүзәл холоҡло, шат, ғәйрәтле, дөрөҫ фекерле, сәләмәт кәүҙәле, оло тәбиғәтле, һәр төрлө хәйерле эштәргә һәләтле булып етешерҙәр. Маңлайҙарына: "Беҙ - киләсәк көндәң аталары, был милләттең яҡлаусылары үә хеҙмәтселәре, Аллаһы Тәғәлә беҙгә ярҙамсы булыр", - тип яҙылған яҙыуҙарҙы һәр кем уҡый алыр. Бындай әсәләр үә ҡатындар тәрбиәһенән мәхрүм ҡалған милләттең балалары күп ваҡытта һәр төрлө юҡҡа сығыуҙарға һәләтле булыр.

*ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...*

# ҺҮТЕЛГӘН АРБАНЫ...
## йыя беләбеҙме һуң?

Башҡорт телен мәктәптә уҡытыуҙың ниндәй маҡсаттары бар? Ғәмәлдәге дәреслектәргә һәм программаларға ҡарап, был һорауға аныҡ ҡына яуап алып булмаҫ.

Тел дәрестәре, алдағы мәҡәләләрҙә әйткәнсә, халыҡҡа хеҙмәт итә алырлыҡ, уның ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек әһәмиәткә эйә. Шуға күрә, тел дәрестәренең төп маҡсатын халыҡҡа, туған телебеҙгә һөйөү орлоҡтарын сәсеү, тип билдәләйбеҙ.

Беҙҙең халыҡты яҡшы белгән икенсе милләт кешеләре, башҡорттарға толерантлыҡ хас, тип йыш әйтә. Шулайҙыр. Ситтәргә яҡшыраҡ күренә. Тик шулай ҙа бүтәндәр һәйбәт тип һанаған ошо һыҙатыбыҙ күп осраҡта үҙ мәнфәғәтебеҙгә зыян килтерә. Был хәл бигерәк тә тел өлкәһендә асыҡ күренә. Татар телле егеткә кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡыҙы, мәҫәлән, туйҙың икенсе көнөнән иренең теленә күсә. Ә башҡорт ауылына килен булып төшкән татар ҡыҙы ғүмеренең ахырынаса ата-әсәһенең теленә тоғролоҡ һаҡлай. Айырым иҫкәрмәләр булыуы мөмкин, тик дөйөм күләмдә хәл тап алда әйткәнсә. Сәбәп бында берәү генә. Беҙ балаларыбыҙҙы туған телебеҙ менән ғорурланырға өйрәтмәйбеҙ, телгә тоғролоҡ сифаттарын етерлек кимәлдә тәрбиәләмәйбеҙ. Ошонан сығып, башҡорт теле дәрестәренең икенсе төп маҡсаты билдәләнә - ул телгә тоғролоҡ тәрбиәләү. Бындай сифаттар ун, егерме, хатта йөҙ тапҡыр әйтеү менән генә формалашмай. Телде яратыу, уның патриоты булыу кеүек күркәм һыҙаттарҙы маҡсатлы ойошторолған көндәлек эш һөҙөмтәһендә генә тәрбиәләп була. Һәм ул эш телебеҙҙең үҙенсәлектәрен, һүҙ байлығын, модаль һәм интонацион мөмкинлектәрен, мәғәнәүи төҫмөрләнештәрен күрһәтеү нигеҙендә атҡарылғанда ғына уңышлы була ала.

Шулай итеп, тел дәрестәренең өсөнсө маҡсатын да асыҡланыҡ: телдең һүҙ байлығын өйрәнеү һәм үҙләштереү, телмәрҙе байытыу, телдең фонетик, грамматик үҙенсәлектәренә һәм мөмкинлектәренә аңлы ҡараш тәрбиәләү, йәғни телдең структураһын һысынбарлыҡ менән бәйләп өйрәнеү. Ошо маҡсатты ныҒыраҡ асыҡлар өсөн бер нисә миҫал килтереп китәйек. Фонетиканы өйрәнгәндә, *ҙ, ҫ* өндәренең донъя телдәре араһында башҡорт теленән башҡа инглиз һәм ғәрәп телдәрендә генә, ә *һ* өнөнөң ҡырҡлаған төрки теленән тик башҡорт телендә генә булыуын әйтеп китеү балаларҙа телебеҙ менән ғорурланыу тойғоларын уятмаҫ инеме ни? Теленән биҙеүселәр иң тәүҙә ошо өс өндө әйтеүҙән туктамаймы һуң? Беҙҙең телебеҙҙе фәнни өйрәнеүгә нигеҙ һалған, уға ғәйәт ҙур өлөш индергән урыҫ ғалимы Н.К. Дмитриев бынан 75-80 йылдар элек кенә: "Башҡорттар ҙ өнөн яратып һаҡлай (ғалим дорожат тигән һүҙҙе ҡулланған)", - тип һоҡланып яҙып ҡалдырған. Татарстан биләмәләрендә ҡалған Минзәлә, Аҙнаҡай (иғтибар итегеҙ: Атнакай түгел), Аҡтаныш башҡорттары телендә, бер ҡасан да башҡорт телендә уҡымауҙарына ҡарамаҫтан, ҙ өнө әле лә осрап ҡуя.

Тағы бер миҫал. "Ул һеҙгә киләме?" һорауына "Эйе" тигән мәғәнәлә бер нисә яуап алып була: килә, килеп йөрөй, килгеләй, килеп китә ... Яуап формаларының барыһы ла һоралған эштең бер нисә тапҡыр булғанын белдерә. Тик уларҙың һәр ҡайһыһының ошо эшкә, эште башҡарыусыға ҡарата өҫтәмә мәғәнәләре лә бар. Тәүге икеһе нейтраль һыңғай мәғәнә өҫтәһә, килгеләй формаһы - эштең һирәк, ә килеп китә - был эштең кәрәгенән аҙ булыуын белдерә һәм, баҫымды һуңғы ижеккә төшөрөп әйткәндә, эште башҡарыусыға ла ризаһыҙлыҡ интонацияһы һалына. Тел уҡытыуҙың ошо маҡсатына ярашлы тел күренешенен, формаһының ниндәй атама менән йөрөүен белеү түгел, ә мәғәнәһен асыҡлау мөһимерәк.

Маҡсаттарҙың дүртенсе төрө - башҡорт теленең бүтән телдәр араһындағы урынын, уларға оҡшаш, уларҙан айырмалы яҡтарын, үҙенсәлектәрен билдәләү. Һүҙ бында тәү сиратта урыҫ теле менән сағыштырыуға бәйле. Юғиһә, беҙҙең мәктәптәрҙә әйтелмәгән һәм яҙылмаған шундай ҡағиҙә йәшәп килә. Йәнәһе, башҡорт теле дәресендә урыҫ теле ҡатнашмаһын, һәм урыҫ теле дәресендә башҡорт теленә урын булмаһын. Бындай позицияны беҙ дөрөҫ тип иҫәпләмәйбеҙ. Киреһенсә, бер телде икенсе тел менән сағыштырыу һәр ике телде ныҒыраҡ үҙләштерергә ярҙам ғына итә. Ә сағыштырыу өсөн телдең һәр өлкәһендә материал етерлек. Дөрөҫ, фонетикала ла, морфология менән синтаксиста ла оҡшашлыҡтан бигерәк айырмалар күберәк. Ләкин шуларҙы табыу, асыҡлау, сағыштырыу һәр ике телдең структур үҙенсәлектәрен ныҒыраҡ иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә. Мәҫәлән, урыҫ теленең склонение һәм башҡорт телендәге килеш менән үҙгәреү системаларын сағыштырайыҡ. Урыҫ телендә склонениенан да ҡатмарлы бүтән грамматик категория, моғайын, юҡтыр. Уны үҙләштереү өсөн шуға ла бик күп ваҡыт билдәләнгән. Ә башҡорт телендә килеш менән үҙгәреү, киреһенсә, иң еңел тел күренештәренән иҫәпләнә. Бөтә һүҙ төркөмдәренең дә берлектә лә, күплектә лә үҙгәреү формалары бер төрлө. Тағы ла, килеш һорауҙарының яғауҙары менән һүҙҙәрҙең килеш формаларындағы ялғауҙар тулыһынса тап килә: нимәнең - теймәнен. Бында махсус өйрәнеүҙе талап итмәгән фонетик варианттарҙың булыуы күренеште ҡатмарлаштырмай. Шулай булғас, башҡорт телендә килеш темаһын тулыһынса иҫтә ҡалдырыр өсөн килеш исемдәрен һәм һорауҙарын ятлау ҙа етә. Ә ғәмәлдә нисек һуң? Ошо теманы өйрәнеү өсөн генә лә әллә нисәмә параграф бүлеп ҡуйылған.

Башҡорт теле дәрестәренең тағы ла бер мөһим маҡсаты - ул балаларҙы тел менән файҙаланырға өйрәтеү. Йәғни, бөгөнгө термин менән әйтһәк, яҙма һәм һөйләү телмәрен үҫтереү. Йәш милләттәштәребеҙҙең һөйләү кеүәһенең бик түбән булыуын иҫбатлап тороу кәрәкмәйҙер. "Юлдаш" каналына шылтыратып, хәбәрҙәрен еткерергә маташыусыларҙың телмәрҙәре тел менән файҙалана белеү кимәленең ҡайһы тәңгәлдә икәнен асыҡ күрһәтә.

Үрҙә әйтелгәндәргә балаларҙың ижади һәләтлектәрен үҫтереү маҡсаты бик яҡын тора. Уға ярашлы уҡыусы бала ижад итергә лә өйрәнергә тейеш. Дәрестәрҙең һәр береһендә лә ижади эшкә урын һәм мөмкинлек табып була. Беренсе ҡарамаҡҡа ижад итеү темаһына яҡын да килмәгән материалды ла ижад сығанағы итеп файҙаланып була. Тел теорияһының теләһә ниндәй материалы буйынса ла әкиәт, һөйләшеү, баһалама биреү һәм башҡа шундай эштәр башҡарырға мөмкин. Мәҫәлән, "Исем менән сифаттың һөйләшеүе", "Һүҙ төркөмдәре тураһында әкиәт".

Ниһәйәт, тағы ла бер маҡсатты билдәләмәү мөмкин түгел. Ул тел тәҙәләшө буйынса мәғлүмәт биреү. Тик беҙ тәҡдим итәсәк материал ғәмәлдәге программаға дөйөм күләме менән тап килһә лә, бирелеше яғынан әлеге кеүек өҙөк-йыртыҡ, тырым-тырағай түгел. Мәҫәлән, әле һөйләм киҫәктәрен өйрәнеүгә 20-нән артыҡ сәғәт ҡаралған. Тик һәр бер һөйләм киҫәге айырым дәрестәрҙә өйрәнелә һәм берберенеһе менән сағыштырылмай, шул сәбәпле уҡыусыларҙа һөйләм структураһы тураһында теүәл күҙалланыш формалаша алмай. Һәм, шунса ваҡыт буйына өйрәнеүгә ҡарамаҫтан, мәктәпте тамамлаусы уҡыусы һөйләмгә синтаксик анализ да яһай белмәй. Шундай миҫал менән сағыштырып ҡарайыҡ. Ишек алдында әле генә төҙөк булған арба һүтелгән дә, уның өлөштәре төрлөһө төрлө урынға ташланған: дүрт урында - дүрт тәгәрмәс, ике урында - ике күсәр, арыраҡ тәртәләр, тәртәләрҙең тәжеләре, арбаның көймәһе, кендек сөйә ята, ти. Арба тәҙәләшөн өйрәтеүсе ентекләп һәр бер өлөштө тәфсирләп һүрәтләй, формаһын, материалын атай. Тик ошо өлөштәрҙең бер-береһенә ниндәй тәртиптә беркетелеп, тағылып, арба өсөн ниндәй функция башҡарғанын ғына һөйләмәй һәм күрһәтмәй. Тел теорияһын бөгөнгөсә уҡытыу ҙа шуның кеүек. Һәр бер өлөш айырым өйрәнелә, ә тотош күренешкә өҫтән, дөйөмләштереп ҡарау ғәмәлгә инмәгән. Һөҙөмтәлә уҡыусы өлөштө лә белеп бөтөрмәй (белер ине лә, тик улар бик күп), дөйөм төшөнсәһе лә формалаша алмай ҡала. Тел дәресендә балаларҙың тел һиҙеү һәләтлектәрен, лингвистик аңын да үҫтерергә тейешбеҙҙер ҙаһә. Программаға шул тиклем күләмдәге материал, моғайын, ошо маҡсаттан индерелгәндер. Ғәжәп хәл! Нисәмә-нисә йылдар буйы, туған тел дәрестәре тип атап, тел теорияһын тылҡыйбыҙ, тик (миҫал өсөн килтерәм) "Һан менән сифаттың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәлә" тигән кеүегерәк фекер йөрөтөүҙе талап иткән ябай ғына эште дөрөҫ үтәй алырлыҡ уҡыусы әҙерләй алмайбыҙ. Һәр хәлдә, минең вуҙға уҡырға инергә килгән абитуриенттар менән һөйләшеү үткәргәндә ошоға һәм уға оҡшаш һорауҙарға аныҡ, теүәл яуап алғаныбыҙ булманы.

Шулай итеп, башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыуҙың төп маҡсаттарын билдәләнек. Маҡсаттарҙың һәр береһе, беҙҙең ҡарамаҡҡа, телде һаҡлау һәм халыҡ дауамын тәрбиәләү зарурлығына яуап биргәндәй. Ғәмәлдәге программаға ла беҙ бөгөн һанаған маҡсаттарҙың бер өлөшө индерелгән индерелеүен. Тик уларҙы тормошҡа ашырыу юлдары, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, грамматика күҙелдереге мөмкинлек биргән сиктәр араһынан ғына үткән.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

**(Дауамы. Башы 39,40-сы һандарҙа).**

ХӘТЕРКИТАП

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан партия Өлкә комитетының 1969-1987 йылдарҙағы беренсе секретары, Социалистик Хеҙмәт Геройы, биш тапҡыр Ленин ордены һәм ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, КПСС Үҙәк комитеты, СССР Юғары Советы Президиумы ағзаһы Миҙхәт Закир улы Шакировтың тыуыуына 95 йыл тула. Эйе, уның тураһында мемуарҙар ҙа, китаптар ҙа яҙылмаған. Ә бит тап ошо кеше 18 йыл буйы республика менән идара иткән йылдарҙа сәнәғәттә, торлаҡ төҙөүҙә, ауыл хужалығын үҫтереүҙә ҙур уңыштар яулана. Бөгөнгө йәштәр уның тураһында хәбәрҙар булмаһа ла, замандаштары уны оло ихтирам менән иҫкә ала. Һүҙ -уларға.**

# УНДАЙ ЕТӘКСЕ МЕНӘН ЭШЛӘҮ...

## ҡалай ҙур бәхет булған икән!



**Әхнәф ДИЛМӨХӘМӘТОВ, партия Өлкә комитетының 1987-1990 йылдарҙағы идеология буйынса секретары, йәмәғәт эшмәкәре:** Миҙхәт Шакиров аҡыллы, итәғәтле, егәрле, талапсан, юғары профессиональ кимәлдәге етәксе булараҡ дан кеше ине. Уның менән эшләүе еңел булманы. Сөнки илке-һалҡы эшләгән кешеләрҙе, ялҡауҙарҙы яратманы. Ул әйткән икән - эшләргә кәрәк. Үҙе лә халыҡ өсөн күп нәмә эшләне. Был сәнәғәткә, ауыл хужалығына ғына ҡағылмай. Театр буйынса ла, фән буйынса ла, халҡыбыҙ йолаларын тергеҙеү буйынса ла уның эштәре бихисап булды. Миҙхәт Закир улы менән аралашҡанда мин һәр саҡ юғары, патриотик рух тоя торғайным. Ватансыллыҡ тойғоһо көслө ине унда. Уға тиклем партияның Өлкә комитеты бүлек мөдирҙәре йә район комитеттары секретарҙары араһында башҡорттар булмаһа, Миҙхәт Закир улы йәлап башҡорт кадрҙарын етәксе урындарға күтәрә башланы. Бер үк ваҡытта ул ҙур интернационалист булды. Милләтенә ҡарамай, бар етәкселәргә лә талабы һәм ҡарашы бер төрлө булды. Урлашманы, дачалар һалманы, фатирҙар йыйманы, заводтарҙы үҙләштермәне. Эргәһендә юхаланып, ялағайланып йөрөүселәр булманы, ундайҙарҙы яратманы ла, ундайҙарға юл да ҡуйманы ул. Миҙхәт Закир улы - иң гүзәл етәксе, бөйөк уҡытыусы булды. Әле "Шакиров глазами современников" тигән китап яҙабыҙ, 50-ләгән кешенең иҫтәлеге урын аласаҡ унда.

**Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА, педагогика фәндәре кандидаты, 1985-1988 йылдарҙағы БАССР мәғариф министры:** Миҙхәт Закир улы ныҡ тәртип яратҡан кеше булды. Партияның Өлкә комитеты эшен ул ныҡлы тәртипкә һалғайны: бөтөн ултырыштар, пленумдар, кәңәшмәләр һәм башҡа эштәр һис тайпылмайынса үҙенең билдәләнгән ваҡытында үткәрелер ине. Һәр ҡарар алдан ныҡ эшкәртелер, тейешле етәкселәрҙең ризалығы алыныр, шунан инде ҡарарҙың үтәлеше ныҡлы контролгә алыныр ине. "Дөйөм һәм профессиональ белем биреүсе мәктәптәрҙә реформалауҙың төп йүнәлештәре тураһында" ҡарар ҡабул ителгәс, уны үтәү йөмғиәт тормошоноң бөтөн кимәлдәрендә лә грандиоз эштәр аткарыуҙы күҙ уңында тота ине. Былдай киң масштаблы эште Мәғариф министрлығы партия Өлкә комитетының ҡеүәтле етәкселеге, ярҙамы һәм контроле арҡаһында башҡарҙы. М. Шакиров реформаның бер йүнәлешен дә күҙ уңынан ысҡындырманы. Бар эштең торошон белешеп торҙо, ярҙам итергә әҙер булды. Министрлыҡ аппараты хеҙмәткәрҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы ла Миҙхәт Закир улы үҙ контролендә тотто. Мин эшләгән осорҙа ғына 13 хеҙмәткәр торлаҡлы булды. Атайҙарса хәстәрлек күргән, аҡыллы, киң белемле, ҙур тәжрибәле, ысын мәғәнәһендә бөйөк етәксе ҡулы аҫтында эшләү тик яҡшы тәьҫораттар ғына ҡалдырған.

**Радил МӨХӘМӘТДИНОВ, партияның Салауат район комитетының 1965-1982 йылдарҙағы беренсе секретары, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, профессор:** Миҙхәт Закир улын партия эшмәкәре булыуынан бигерәк ҙур хужалыҡ етәксеһе булды, тип ҡылыҡһырлау урынлыраҡ булыр. Ни өсөн тигәндә, билдәле "Бохара - Урал" газ үткәргесе төҙөлөшөнә етәкселек итеп, ифрат ҙур тәжрибә туплап килде ул власҡа. Республикала бик күп хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнде, хәҙер ҙә беҙ, нигеҙҙә, ул һалдырған юлдарҙан йөрөйбөҙ, ул асҡан мәҙәниәт йорттарында күңел асабыҙ, мәктәптәрендә белем алабыҙ. Ул заманда беҙҙән ит, һөт, иген, торлаҡ, юлдар төҙөүҙе һоранылар, шуға мин ул ваҡыттағы башлыҡтарҙы партияның ҙур вәкәләттәре бирелгән хужалыҡ етәкселәре тип һанайым, уларҙың власы бөгөнгө президент власынан күпкә ҙурыраҡ ине.

Миҙхәт Закир улы, оҫта ойоштороусы булараҡ, районларға, кәрәк икән министрҙарҙы ла алып, кәм тигәндә ике көнгә сығыр ине. Беренсе көн барлыҡ хужалыҡтарға шәхсән үҙе барып, хеҙмәткәрҙәр, етәкселәр менән осрашып, үҙ күҙҙәре менән күреп, проблемаларҙы шәхсән ишетеп, халыҡ менән аралашып, икенсе көнөнә райондың барлыҡ партактивын йыйып кәңәшмә үткәрер ине. Кәңәшмә алдынан докладты ҡарар һәм: "Бында бит тәнҡит әҙерәк, үҙ-үҙеңә талапсан булырға кәрәк, тәнҡит өҫтә", - ти торғайны. Быны коррупция булмаһын, имеш-мимештәргә урын ҡалмаһын өсөн эшләтә һәм бөтөн зал алдында отчет бирҙертә, шул уҡ ваҡытта зал алдында оятҡа ҡалдырмаҫ өсөн алдан киҫәтә ине.

Хәҙер етәкселәр һаҡ менән, юлдарҙы ябып, милиция кордоны аша ғына йөрөйҙәр. Ә Миҙхәт Закир улы таң менән тороп, ярты Өфөнө тиерлек йәйәүләп үтеп, иртәнге зарядка яһаны. Уға һаҡ та, бер нәмә лә кәрәкмәне. Ябайлыҡта - бөйөклөк тигәндәй, ҙур урында эшләһә лә, ябай, көслө шәхес булды ул.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

Аһ-Аһ!

# ҠОРБАН БАЙРАМЫҘ...

## ҡалмаҫбыҙ ҙа ҡалыуға

Аяҙ көндә йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте был шомло хәбәр. Аҡылға һыймаҫлыҡ бит был! Бер ниндәй шау-шыуһыҙ, бары тик суд ярҙамында ғына әһәмиәтен кәметмәкселәрме мосолман байрамдарының? Берҙән-бер кеше үҙен Рәсәй мосолмандарына ҡаршы ҡуйҙы һәм еңеп сыҡты. Нимә булды был? Беҙҙән көлөүме, әллә йәшерен яуҙың сираттағыһымы?

Ә уйлап ҡараһаң, бик башлы кеше булып сыҡты был әҙәм. Тапты бит беҙҙең законды бер "тишек ерен". Был табышын бик оҫта файҙаланды ла. Минең уйымса, был - эш тип, ил тип үлә яҙған бәндә лә түгелдер, ә бары тик ошо трюк ярҙамында иғтибарҙы үҙенә йәлеп итергә генә тырышыусы бер әҙәмдер. Шуға ҡарамаҫтан, ул беҙҙең законлар сығарыусы сәйәсмәндәргә һабаҡ та бирҙе. Ошо килеп сыҡҡан низағты закон сығарыусылар алдан күрергә тейеш ине, бының өсөн күп аҡыл кәрәкмәй - Конституцияға күҙ һалыу ҙа етә. Иң әсендергәне шул: Милләт-ара татыулыҡ йылында башҡарыла был "йәшерен яу".

Беҙ байрамдарһыҙ ҡалмаҫбыҙ, әлбиттә, ләкин ошо низағ ҡына күпме баш ауырыуҙары алып киләсәк әле беҙ мосолмандарға. Был бит ике кеше араһындағы ҡапма-ҡаршы ултырып, биш минут эсендә генә хәл ителә торған ваҡ мәсьәлә түгел, уны Конституцияла нығытып ҡуйыу кәрәк. Шуға ҡарамаҫтан, алдағы Ҡорбан байрамын бик ныҡлы әҙерләнеп, матур итеп үткәрергә яҙһын, хөрмәтле мосолмандар!

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы.**

ӘЙТӘГҮР!

# ХӘҮЕФЛӘНДЕРӘ ЛӘ...

## Уйлау һәләтенән яҙҙырмаҫмы?

**Бөгөн өйҙән сыҡмай ғына донъяның һуңғы яңылыҡтарын белергә, телефон өсөн түләргә, әйбер һатып алырға була. Был хеҙмәттәрҙең барыһын да беҙгә интернет тәҡдим итә. Тик интернеттың мөмкинлектәре быны менән генә сикләнмәй әле. Хәҙер йәштәр, хәйер, ололар араһында ла, социаль селтәрҙәр ҙур популярлыҡ менән файҙаланыла. Был юлы беҙ, интернет һеҙҙең тормошоғоҙҙа ниндәй урын биләй, һеҙ уны ниндәй маҡсатта ҡулланаһығыҙ, тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек.**

**Әлмира МӨХӘМӘТЙӘНОВА, студент:** Интернетһыҙ тормошомдо күҙ алдына ла килтерә алмайым. Мин уға йәшәүҙе еңеләштереүсе бер сара итеп ҡарайым, мәҫәлән, сессияға әҙерләнгәндә китапханаға барып тормайынса ғына интернеттан мәғлүмәт алырға була. Аралашыу өсөн дә бик уңайлы, иң мөһиме, арзан сара. Мин үҙем "Башҡорт чаты"нда ултырырға ятатам. Унда тик башҡортса ғына аралашаһың, сит телдәрҙә ҡатнаштыра башлаһаң, шунда уҡ ҡыуып сығаралар. Тап ошо чатта яҙышып, яңы башҡорт һүҙҙәрен ишетәм, телмәремдә ҡулланам. Хәҙер дуҫтарым күбәйҙе, беҙ интернет аша ғына түгел, ә былай ҙа осрашып, күрешеп торабыҙ. Улар араһында рухлы, теле, иле өсөн көйөп йәшәгән йәштәр күп, тимәк, социаль селтәрҙәр фекерҙәштәрҙе бер урынға туплай ала. Берҙәм булғанда, беҙ көслө лә буласаҡбыҙ. Интернеттың бер ҡорға туплай алыуын мин бигерәк тә юғары баһалайым.

**Нәкиә ИСҠУЖИНА, БДУ доценты:** Интернет - ул кешелектең бөйөк ҡаҙанышы. Мәғлүмәт алыу, кешеләр менән аралашыу булһынмы, быларҙың барыһын да интернет аша башҡарыуы еңелерәк. Кешеләрҙе бөтөн донъя менән бәйләп торған үҙәк бит ул, уны уйлап тапҡан кешегә һәйкәл ҡуйырлыҡ. Мәҫәлән, мин иң популяр селтәрҙәрҙең береһе - "Класташтар"ҙа ултырам. Элек бергә уҡыған класташтарҙы, төркөмдәштәрҙе табып аралашыу, уларҙың тормошон күҙәтеп барыу бик мауыҡтырғыс. Аралашыу яҙышыу аша барғанлыҡтан, яҙыу мәҙәниәте үҫешә, фекереңде яҙып аңлатырға өйрәнәһең, үҙеңә генә хас яҙыу стиле барлыҡҡа килә. Шулай ҙа йәнле аралашыуҙы оноторға ярамай. Гел генә компьютерға текәлеп ултырыу сәләмәтлеккә лә зыян килтерә. Китаптарға килгәндә, интернеттан ниндәйҙер әҫәр эҙләп, ваҡыт әрәм итмәйем. Китапты ҡулға тотоп уҡыу кинәнесен бер нәмә алыштыра алмай.

**Азат ҒӘЛИУЛЛИН, студент:** Беҙ бала саҡта әкиәттәр "Борон-борон заманда" тип башланһа, хәҙерге заман әкиәттәре "Интернет булмаған заманда", тигән һүҙҙәр менән башлана алыр ине, моғайын. Иң ҡыҙығы, хәҙер республиканың иң төпкөлөндә урынлашҡан ауылдарға ла барып еткән был замана мөғжизәһе. Минең өсөн интернет иң тәүҙә аралашыу сараһы. Бөтөн донъяға билдәле булған социаль селтәрҙәрҙә мин дә ултырам. Беҙҙең йәштәр араһында "Бәйләнештә" селтәре популяр, шәхсән үҙем ундағы башҡорт төркөмдәрен хуш күрәм. Хәҙер теле, иле өсөн янып-көйөүсе йәштәр күп, ә ошондай төркөмдәр уларҙы бер урынға туплау мөмкинлегенә эйә. Башҡортса саралар үткәрелһә, был тураһында хәбәр социаль селтәрҙәр аша тиҙерәк тарала. Интернет студенттар өсөн мәғлүмәт алыу сараһы ла булып тора. Шулай ҙа төптәнерәк уйлап ҡараһаң, интернет селтәрен ау менән сағыштырырға була һәм, ҡыҙғанысҡа күрә, был ауға йәштәрҙең генә түгел, балаларҙың да күпләп эләгеүе хәүефләндерә. Был киләсәктә уйлай белмәгән, үҙаллы ҡарар ҡабул итеү һәләте бөтөнләй үҫешмәгән быуын үҫеүенә килтермәҫме икән?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәр араһында ғына түгел, ололар араһында ла интернетһыҙ йәшәп булмай, тигән фекер ныҡ-ға бара шикелле. Белем камиллаштырыу, яңы мәғлүмәттәр туплау йәһәтенән интернет файҙалы булһа ла, социаль селтәрҙәрҙең күҙмә-күҙ ҡарап аралашыуҙы алыштыра барыуы аптырата. Әлбиттә, интернет - ҡеүәтле ҡорал, тик был ҡоралдың халыҡты уйлау һәләтенән яҙҙырып, идара итеүе еңел булған бер өйөргә әүерелдереүе лә бар бит әле.**

**Лилиә ЯМАЛОВА яҙып алды.**

✓ *Башҡортостандың үҙендә әлегә туризмды үҫтереүҙе күҙаллаған концепцияның, был юҫыҡта ниндәйҙер аныҡ проекттың булмауын иҫәпкә алғанда, беҙҙең федераль кимәлгә барып эләгеүебеҙ үҙе үк мөғжизәгә тиң тип баһалана.*



**Кешене һәр ваҡыт офоҡ артында ниндәй ерҙәр, бығаса күрмәгән ниндәй илдәр барлығы ҡыҙыҡһындырған һәм ул ошо ҡыҙыҡһыныуын баҫыр өсөн күп саҡрымдар үтеп, яңы илдәр асып, күп мәғлүмәт туплаған. Кешелек йәмғиәте формалашҡан ғына ваҡытта ашарға табыу, хәүефһеҙлекте тәьмин итеү маҡсатында төрлө ерҙәр буйлап сәйәхәт мәжбүри сара булһа, бөгөнгө күҙлектән сығып ҡарағанда, туризм күберәк күңел асыу, ял итеү, һаулыҡты нығытыу ниәттәрен үҙ эсенә ала. Һуңғы ваҡытта туризм айырыуса үҫеш кисерә һәм халыҡ-ара кимәлдә киң танылыу яулай. Туризмдың йылдам үҫешенә төрлө илдәр һәм ҡитғалар араһындағы сәйәси, иҡтисади, фәнни һәм мәҙәни бәйләнештәрҙең тәрәнәйеүе лә булышлыҡ итә. Төрлө илдәрҙең үҙенсәлекле тәбиғәтен, урындағы халыҡтың үҙенә генә хас мәҙәниәтен, тарихи ҡомартҡыларын һәм йолаларын күреү теләге лә миллионлаған кешенән турист яһай. Беҙҙең республикала туризм торошо ниндәй хәлдә? Ошо хаҡта "Башҡортостан туриндустрия союзы" коммерция булмаған ойошмаһы рәйесе Кинйә Сәгит улы КУСКИЛДИН бәйән итә.**

# ӘЙҘӘГЕҘ ӘЛЕ, туризмды

## Туризм - Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡына түгел

Тәү сиратта туристың кем булыуын асыҡлайыҡ. Бер тәүлектән алып сикһеҙ ваҡытҡа тиклем өйөнән ситтә йоҡлаусы кеше турист булараҡ билдәләнә. Ә тәүлек эсендә әйләнеп ҡайтһа, ул экскурсант исемен йөрөтә. Туризмға бөгөн күп иғтибар бирелә. Мәсәлән, ҡайһы бер илдәр тулыһынса тиерлек (90 процент) туризм иҫәбенә йәшәй. Беҙҙә иһә хәлдәр башҡасараҡ. Рәсәй йылына 40 миллионға яҡын турист ҡабул итә ала, ләкин бөгөнгө көнгә был потенциалдың бары тик 2-3 миллионы ғына ҡулланыла. Уларҙың да күбеһе Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҙур ҡалаларҙы, "Алтын ҡулса" маршрутын үҙ эсенә ала. Ә Башҡортостан иһә туристик тармаҡтан йылына 3 миллиард тирәһе килем ала, тип әйтергә була, тик уның 1 миллиард 900 миллион һумы санаторий һәм курорттар иҫәбендә, әммә улар үҙҙәрен туристик индустрияға индерергә теләмәй, тик һауыҡтырыу учреждениеһы исеме аҫтында йәшәүҙе хуп күрә. Ләкин сит тарафтан санаторийға һауығырға, ял итергә, төбәкте күрергә килеүсе кеше бер тәүлектән артыҡ ваҡытын өйөнән ситтә уҙғара икән, шулай булғас, уны турист иҫәбенә индерергә була. Статистика буйынса ла иҫәп шулай алып барыла.

Беҙҙең республикала, ғөмүмән, туризм өлкәһен үҫтереү мөмкинлектәре ҙур. 13 меңдән ашыу йылға, 800-ҙән ашыу күл, спелеологтар өсөн ҡыҙыҡлы 300-ләгән мәмерйәне генә алып ҡараһаҡ та, республиканың потенциалы бик юғары икәнлеген аңларға була. Шулай уҡ транспорт артерияһына ҡағылһаҡ та Башҡортостан бик уңайлы ерҙә урынлашҡан, сөнки Себергә лә, Урта Азияға ла автомобиль юлы республиканы киҫеп үтә, һыу транспорты артерияһы ла, һауа юлдары ла бик ҡулай. Шулай уҡ бөтә донъяға танылған Абҙаҡ тауы, Яңғантау, Ирәмәл, Шихандарҙың да нәҡ беҙҙә булыуы төбәккә күп кешене йәлеп итергә мөмкин, сөнки бындай уникаль тауҙар системаһы Рәсәйҙең башҡа бер төбәгендә лә юҡ. Сүллектең юҡлығы ла, флора һәм фауна системаһының үҙенсәлекле булыуы ла төбәктә туризмды үҫтереүҙә тик ыңғай роль уйнай.

Башҡортостан, ниһайәт, туризмды ял итеү, күңел асыу, һауыҡтырыу өлкәһе генә итеп ҡарауҙан үтеп, иҡтисади яҡтан баһалап эш итеү кимәленә етте. Уның өҫтәмә эш урындары булдырыусы, халыҡҡа килем килтереүсе, төбәктең бюджетын тултырыусы өлкә булыуын аңланыҡ, буғай, сөнки бөгөн республикала ошо юҫыҡта етди эштәр алып барыла. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡ һәм туризмды берләштергән бер комитеттың булдырылыуы яҡын киләсәктә үҙенең тос емештәрен бирәсәк. Республикала туристик объекттар реестры төҙөлә, шулай уҡ классификациялау һәм стандартлаштырыу тигән төшөнсәләр өйрәнелә башланы. Бының һөҙөмтәһендә Башҡортостанға килергә теләгән һәр турист төбәктә уны ниндәй хеҙмәтләндереү көтөүен, туристик маршруттар һанын һәм уларҙың хәүефһеҙлеген, сәйәхәттә буласаҡ программалар йөкмәткеһен алдан белеп килеү мөмкинлеге аласаҡ. Әлегә Рәсәй кимәлендә лә бындай классификацияның юҡлығын иҫәпкә алһаҡ, оло эш атҡарылырға тора. Республикала барлығы өс классификация буласаҡ, тип күҙаллана: беренсеһенә - ҡунаҡхана, туристик базалар, икенсеһенә - тауҙан саңғы менән шыуыу урындары һәм өсөнсөгә һыу инеү урындары (пляж) индереләсәк һәм улар халыҡ-ара классификация һәм стандарттар талаптарына тап килтереләсәк.

***Беҙҙең республикала, ғөмүмән, туризм өлкәһен үҫтереү мөмкинлектәре ҙур. 13 меңдән ашыу йылға, 800-ҙән ашыу күл, спелеологтар өсөн ҡыҙыҡлы 300-ләгән мәмерйәне генә алып ҡараһаҡ та, республиканың потенциалы бик юғары икәнлеген аңларға була. Шулай уҡ транспорт артерияһына ҡағылһаҡ та Башҡортостан бик уңайлы ерҙә урынлашҡан, сөнки Себергә лә, Урта Азияға ла автомобиль юлы республиканы киҫеп үтә, һыу транспорты артерияһы ла, һауа юлдары ла бик ҡулай. Шулай уҡ бөтә донъяға танылған Абҙаҡ тауы, Яңғантау, Ирәмәл, Шихандарҙың да нәҡ беҙҙә булыуы төбәккә күп кешене йәлеп итергә мөмкин, сөнки бындай уникаль тауҙар системаһы Рәсәйҙең башҡа бер төбәгендә лә юҡ. Сүллектең юҡлығы ла, флора һәм фауна системаһының үҙенсәлекле булыуы ла төбәктә туризмды үҫтереүҙә тик ыңғай роль уйнай. Башҡортостан, ниһайәт, туризмды ял итеү, күңел асыу, һауыҡтырыу өлкәһе генә итеп ҡарауҙан үтеп, иҡтисади яҡтан баһалап эш итеү кимәленә етте.***

## Башҡортостан - туризм буйынса өҫтөнлөклө төбәктәр исемлегендә

Үткән йәй Мәскәүҙә Рәсәй туризмы буйынса концепция раҫланып, Рәсәйҙә ете туристик субъект билдәләнде. Тик Бөтә донъя тәбиғәтте һаҡлау ойошмаһы нәҡ Уралды бөтә донъя экосистемаһына йоғонто яһаусы субъекттарҙың береһе тип һанаһа ла, Урал буйы төбәктәре был концепцияға индерелмәне. Ошо хатаны төҙәтеү өсөн Пермь, Свердловск, Силәбе, Ҡурған өлкәләре ингән Урал ассоциацияһы бренды аҫтында концепцияға инеүҙе юллау ыңғай һөҙөмтә бирмәне, сөнки Мәскәү өсөн Урал тик сәнәғәтте генә көүҙәләндерә, ә ошо төбәктәрҙә туризмды ла үҫтереп була икәнлеген уйлаусы юҡ. Ошонан һуң беҙ Башҡортостандың үҙен айырым төбәк итеп концепцияға индереү йүнәлешендә эш башланыҡ һәм, ниһайәт, быйыл июнь айында Рәсәйҙең туризм буйынса Эксперт советы ултырышы ҡарары менән беҙҙең республика был концепцияға индерелде. Башҡортостандың үҙендә әлегә туризмды үҫтереүҙе күҙаллаған концепцияның, был юҫыҡта ниндәйҙер аныҡ проекттың булмауын иҫәпкә алғанда, беҙҙең федераль кимәлгә барып эләгеүебеҙ үҙе үк мөғжизәгә тиң тип баһалана.

Концепциянан тыш, быйыл Мәскәүҙә "2011-2018 йылдарҙа Рәсәйҙә туризмды үҫтереү" маҡсатлы программаһы раҫланды һәм уға ярашлы, ошо йылдар эсендә туризмды үҫтереү өсөн Рәсәй бюджетынан 96 миллиард һум аҡса бүленәсәк. Инвестор ошо программа буйынса аҡса алырға теләһә, бер-нисә шартты үтәргә тейеш: беренсенән, федераль бюджеттан бүленгән аҡса коммуникацияға (юл төҙөү, электр энергияһы, газ, канализация үткәреү) ғына тотонолорға мөмкин, ә башҡа сығымдарҙы (туристик объект төҙөү өсөн ерҙе ҡуртымға алыу, һатып алыу һәм башҡа кәрәк-яраҡтар) инвестор үҙ кесәһенән сығарырға тейеш. Нәҡ юлдарҙың насар йәки бөтөнләй булмауы, коммуникация үткәреүгә күп сығымдар һәм ваҡыт талап ителеүен күҙ уңында тотҡанда, был программа туризмды үҫтереүҙә ҙур ярҙам буласаҡ. Икенсенән, проектты тормошҡа ашырыу өсөн дәүләт, мәҫәлән, бер миллион һум аҡса бүлә икән, инвесторға иһә өс миллион аҡса һалыу талабы ҡуйыла. Һәр хәлдә, был программа ла, концепция ла туризмды үҫтереүгә ныҡлы ярҙам булыр, тип ышанам.

## Социаль туризмды үҫтереү мотлаҡ

Туризмдың күп төрҙәре араһында социаль туризмға айырым туҡталыу мөһим, сөнки ул йәмғиәттең айырыуса яҡлауға мохтаж контингентын үҙ эсенә ала, йәғни хаҡлы ялда булғандарҙың, социаль яҡтан яҡлауға мохтаж кешеләрҙең, ғәриптәрҙең, ҡараусыһыҙ ҡалған балаларҙың ял итеүен, сәйәхәтен, шулай уҡ һаулығын нығытыуҙы күҙ уңында тота. Был тармаҡ әлегәсә күләгә аҫтында ҡала килде, ләкин хәлде үҙгәртергә ваҡыт етте һәм быны барыһы ла яҡшы аңлай. Киләһе йылға, мәҫәлән, беҙҙең республика бюджетына социаль туризмды үҫтереүгә 100 миллион һум аҡса һалынған. Шулай уҡ социаль туризм буйынса программа эш башларға тора. Программа нисек эшләй? Быны пенсионер миҫалында ҡарайыҡ. Ял итеүгә путевка, мәҫәлән, 18 мең тора, ти. Урындағы социаль яҡлау идаралыҡтарында сираты килеп еткән пенсионерға дәүләт 11 мең һум күләмендә субсидия бирә, ә ҡалған 30 процентын пенсионер үҙе түләй. Ошо программаға ярашлы, быйыл октябрь-ноябрь айҙарында өс мең тирәһе пенсионер - Башҡортостанда, 200 тирәһе пенсионер сит илдә ял итеү мөмкинлеге аласаҡ. Икенсе йылға был һан ике-өс тапҡырға артырға тейеш. Шулай уҡ социаль яҡлауға мохтаж башҡа контингент та иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалмаясаҡ һәм ял итеү, һаулығын нығытыу мөмкинлеге аласаҡ. Социаль путевкалар алыр өсөн муниципаль берәмектәрҙең социаль яҡлау һәм хеҙмәт бүлектәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## Дини туризм

Кешелә һәр ваҡыт уны уратып алған ығы-зығынан бер аҙға булһа ла ситләшеү, мәңге бөтмәҫ проблемаларҙан арыныу ихтыяжы йәшәй. Шулай уҡ һәр кемдә ниндәйҙер көслө шәхес менән һоҡланыу тойғоһо бар. Бының өсөн кемдер тарихта тәрән эҙ ҡалдырған батыр, ҡаһарман, геройҙы күҙ алдына баҫтыра, икенсе берәү үҙ замандашына һоҡлана, ә өсөнсөләр иһә сихри көскә эйә булыусы әүлиәләрҙе юғары бейеклеккә күтәрә. Башҡортостанда әүлиәләр ерләнгән урындар бихисап. Миҫал өсөн Учалы районындағы Әүлиә тауын, Баймаҡ районындағы Мөжәүир хәҙрәт ҡәберлеген, Нарыҫтауҙағы әүлиәләрҙе алып ҡараһаҡ та, беҙҙең төбәк әүлиәләр төбәге икәнлеге асыҡ күренә. Кеше улар янына иман эҙләп, таҙалыҡ юллап бара, тимәк, бындай кешелә насар уй, кире эмоция, ҡара ниәттәр юҡ. Шуға күрә бындай туризмдың үҫеүе мөһим һәм кәрәк, тик бөгөнгө көндә был өлкә хаҡында мәғлүмәттең етерлек кимәлдә булмауы, дини ту-

✓ *Аҫаба халыҡтың бөгөн үк үҙ еренә хужа булып ҡалырға тейешлеген аңлауы мөһим, сөнки нәҡ бөгөн ошо оло эште башҡарып ҡуймаһаҡ, ситтән килгәндәр быны тиҙ арала үҙ ҡулына аласаҡ.*



# Йәмәғәт...

## үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ!

ризмды үҫтереүселәрҙең дә әлегә күренмәүе был тармаҡтың үҫешен тотҡарлай. Шулай уҡ республикала дини туризмды үҫтереү буйынса айырым эш алып барған ниндәйҙер үҙәктең булмауы ла эште алға ебәреүгә ҡамасаулай, тип әйтергә була. Ә ошо изге урындарҙың тарихын ентекләп өйрәнеп, урынлашыу урындарын аныҡ билдәләп, төрлө реклама буклеттары сығарып, сайт эшләп, дөрөҫ рекламалай белгәндә һәм әүлиәләр ҡәберлегенә килгән йөҙәрләгән, меңәрләгән кеше өсөн кәрәкле мөхит булдырғанда, был өлкәлә ҙур эштәр атҡарыу өсөн эшҡыуарҙарға бик һәйбәт мөмкинлек бар. Тик эште иртәгәгә ҡалдырырға ярамай, был йүнәлеште нәҡ бөгөн кемдер үҙ ҡулына алырға тейеш, сөнки әүлиә ҡәберенә барып, иман алып, күңелен тынысландырып ҡайтырға теләүселәр һәр ваҡыт булған, бар һәм буласаҡ. Был йәһәттән беҙгә дини туризмы бик ныҡ үҫешкән, әүлиәләр ҡәберҙәре Президент программаһы менән яҡланған һәм һаҡланған ҡаҙаҡтарҙан өлгө алыу, тәжрибәләрен уртаҡлашыу кәрәк.

### Беҙгә нимә ҡамасаулай?

Төбәктә туризмды үҫтереү өсөн ыңғай яҡтарҙың күп булыуы менән бер рәттән, был өлкәнең үҫешен тотҡарлаған сәбәптәр ҙә бар. Уларҙың иң мөһимдәрен ҡарап үтәйек. Тәү сиратта, Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәй туризмы үҫешен тотҡарлаған сәбәп - аныҡ статистика булмауы. Йәғни бөгөн илгә килгән туристар иҫәбе нисек алып барыла? Төрлө ҡунаҡхана, туристик базаларҙа нисә кеше теркәлеү үтһә, беҙгә шунса турист килгән, тигән ҡараштан сығып алып барыла статистика. Ләкин иҫәпкә алынмаған туристар һаны ла бихисап бит. Мәҫәлән, йәй миҙгелендә Башҡортостандың төрлө райондары тәбиғәте ҡосағында "ҡырағай" ял итеүселәр һаны йөҙәр меңдән артып китә. Шулай уҡ ҡышын тау саңғыһы менән шөғөлләнеүселәрҙең барыһы ла база-ҡунаҡханаларҙа теркәү үтмәй, сөнки күптәр базаға яҡын ауылдарҙа ҡуртымға өй алыуҙы хуп күрә. Тимәк, быға саҡлы алып барылған статистика дөрөҫлөккә тап килмәй һәм ниндәйҙер кимәлдә туризмды үҫтереүгә ҡамасаулай, тип әйтергә була.

Икенсенән, һәр йәмғиәттә халыҡты ойоштороп, берләштереп алып йөрөүсе бер шәхес булырға тейеш. Бөгөнгө көндә иһә ауыл-ҡасабаларҙа үҙ халҡының, тыуған еренең мәнфәғәтен алға ҡуйып эш итеүсе бындай шәхестәр бик һирәк. Миҫал өсөн, ауыл ситендә үҫкән урманды алайыҡ. Уның йыллыҡ ҡуртым хаҡы 120 мең икән, ти. Әлбиттә, ауыл кешеһенең бер үҙенә генә был сумманы күтәреү ауыр, ләкин бергә ойошоп, уны ауылдың һәр хужалығына бүлгәндә, сумма әллә ни ҙур килеп сыҡмай. Үҙенең тыуған еренә, балаларының киләсәгенә битараф булмаған кеше кеҫәһенән был мең ярым аҡсаны сығарып һаласағына шигем юҡ. Аҡсанан тыш, кәрәкле документтарҙы туплау ҙа күп көс һәм ваҡыт талап итә. Шуға күрә бындай эштә энтузиаст, лидер булырға тейеш. Тик улар юҡ.

Өсөнсөнән, кешеләрҙә тәүәккәллек етмәй. Мәҫәлән, ниндәйҙер туристик база эшләр өсөн ерҙе (рекрацион зона) һатып йәки ҡуртымға алырға кәрәк. Әлбиттә, ер алыу, уны хосусилаштырыу, бөтә кәрәкле документтарҙы еренә еткереп эшләү өсөн күп ваҡыт талап ителә, байтаҡ ҡына аҡса ла түгелә - был процесс күптәрҙе ҡурҡыта, албырғыта. Тик киләсәктә ошо йүнәлештә ниндәйҙер эш алып барырға теләүсе аҫаба халыҡтың бөгөн үк үҙ еренә хужа булып ҡалырға тейешлеген аңлауы мөһим, сөнки нәҡ бөгөн ошо оло эште башҡарып ҡуймаһаҡ, ситтән килгәндәр быны тиҙ арала үҙ ҡулына аласаҡ, сөнки улар былың киләсәктә файҙалы һәм килемле эш булыуын яҡшы аңлай. Ә ситтәр ҡулына киткән ерҙәрҙе кире ҡайтарыу мөмкин түгел икәнен һәр кемгә аңлатырға кәрәкмәйҙер.

Дүртенсенән, туризм менән шөғөлләнеү - ул шул уҡ эшҡыуарлыҡ, ә бындай эште алып барыу йөҙ кешенең береһенә генә бирелгән талант. Ә беҙҙә иһә менталитет ҡамасаулай. Күп кеше тәбиғәт ҡосағында ял итеү - ул һуҙылып төшөп ятып ризыҡ ейеү, шешлек ҡурыу, тип аңлай. Күпмелер ваҡыттан һуң уның йә аҙығы кәмей, йә ниндәйҙер ғәҙәти булмаған аҙыҡ-түлек тәмләп ҡарағыһы килә башлай. Тап ошо ваҡытта уның палаткаһы янына барып, һөт-ҡаймаҡ, әсетеп бешерелгән, күпереп торған икмәк, талҡан, ҡымыҙ һәм башҡа аҙыҡ-түлек тәҡдим ит - ял итергә килеүселәр уларҙы тиҙ үк һатып алып бөтәсәк. Ләкин беҙҙәге халыҡ бындай баҙар ысулын өнәп етмәй. Хатта турист үҙе ауылға килеп, өйҙән-өйгә һөт-ҡаймаҡ эҙләп йөрөһә лә, һатыусыһы юҡ, беҙҙең халыҡ үҙе етештергәнде һатыуҙы кәмселеккә һанай. Тағы ла бер миҫалды ҡарайыҡ. Ҡала халҡына ауыл мунсаһында ҡойоноп сығыу үҙе бер мажара. Тик беҙҙә был хеҙмәтте һорап та алып булмай. "Ниңә мин әллә кемде мунсама индерәйем?" - тип кенә ебәрәсәктәр. Ә бер йәй эсендә ошо хеҙмәт ярҙамында тағы ла бер мунсалыҡ аҡса эшләү мөмкинлеген уйлап та ҡарамай улар.

Бишенсенән, кемдеңдер нимәлер эшләгәнен күрә алмаусылар байтаҡ арабыҙҙа. Мәҫәлән, Кинйә Арыҫланов исемендәге фонд Ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бейҙең ҡәберен матур итеп кәртәләп, эргәһендә өс ҡатлы музей төҙөй башлағайны. Шул йорт-музейҙы яндырҙылар! Бына бит ул нисек! Үҙҙәре лә эшләмәй, башҡаларға ла изге эште атҡарырға бирмәйҙәр. Тик быны ниндәйҙер төҙөлөш объектын түгел, ә үҙ тарихын яндырыу икәнлеген уйлап ҡаранымы икән ул ут төртөүсе кеше? Туристик йәһәттән шәп тарихи объект булып, әллә күпме кешегә эш урыны бирер ине ул.

Алтынсынан, юл яны сервисы хеҙмәте үҫешмәгән беҙҙә. Ҙур трассалар янында матур ауылдар урынлашҡан, көн дә эргәләренән йөҙәрләгән машина уҙа, ләкин туҡтап сәй эсеп, еңелсә ҡапҡылап китеү өсөн туҡталҡалар юҡ кимәлендә.



*Ял итеүсенең ниндәйҙер ғәҙәти булмаған мажара йә хеҙмәт төрө күрергә теләүе лә тәбиғи. Мәҫәлән, ниндәйҙер туҡталҡаға килеп төшөп, ашап-эсеп ял итеп алған турисҡа һыбай йөрөргә тәҡдим ит, башҡорт халҡының һоҡланғыс мәҙәниәте менән таныштыр, риүәйәттәргә бәйле урындарға алып бар - былар бөтәһе лә төбәктә туризмды үҫтереүгә ярҙам итерҙәй шарттар. Ғөмүмән, кеше риүәйәттәр ярата, уға ышана, шуға күрә туризм халыҡ ижады, йолалары, мәҙәниәте менән тығыҙ бәйләнештә үҫтерелгәндә, эштәр алға китәсәк, тип уйлайым. "Урал батыр" эпосында һүрәтләнгән ерҙәр буйлап туристик маршрут асыу ҙа күп туристарҙы йәлеп итеренә шикләнмәйем. Ғөмүмән әйткәндә, беҙҙең республика бөтә донъяға комфортлы хеҙмәтләндереүе менән түгел, ә экзотикалы булыуы менән ҡыҙыҡлы. Беҙгә үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, кейемдәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы бушҡа күрһәтеп йөрөүҙән туҡтап, был тамашаларҙан иҡтисади файҙа алырға өйрәнергә кәрәк.*

### Атҡараһы эштәр байтаҡ

Күпме ваҡыт буйы "Башҡортостанда "Алтын ҡулса" булдырабыҙ!" тип яр һалдылар, ә эш иһә Шүлгән мәмерйәһе янында ошо исем аҫтында ҡунаҡхана төҙөүҙән ары китмәне. Был ниәтте аҙағына тиклем алып барып еткереп ҡуйыу зарур. Шулай уҡ республика буйлап туристар өсөн ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс маршрут асыу ҙа тәүбурыстарҙың береһе. Мәҫәлән, планлаштырылған проект буйынса туристың юлы Өфөлә аҙна аҙағында башлана һәм бер аҙна эсендә бөтә Башҡортостанды урап сығырға тейеш. Шулай уҡ үтеләсәк маршрутта туристарҙы ҡабул итерлек заманса йыһазландырылған туристик объекттар булыуы ла мөһим. Һәм тағы... Ял итеүсенең ниндәйҙер ғәҙәти булмаған мажара йә хеҙмәт төрө күрергә теләүе лә тәбиғи. Мәҫәлән, ниндәйҙер туҡталҡаға килеп төшөп, ашап-эсеп ял итеп алған турисҡа һыбай йөрөргә тәҡдим ит, башҡорт халҡының һоҡланғыс мәҙәниәте менән таныштыр, риүәйәттәргә бәйле урындарға алып бар - былар бөтәһе лә төбәктә туризмды үҫтереүгә ярҙам итерҙәй шарттар. Ғөмүмән, кеше риүәйәттәр ярата, уға ышана, шуға күрә туризм халыҡ ижады, йолалары, мәҙәниәте менән тығыҙ бәйләнештә үҫтерелгәндә, эштәр алға китәсәк, тип уйлайым. "Урал батыр" эпосында һүрәтләнгән ерҙәр буйлап туристик маршрут асыу ҙа күп туристарҙы йәлеп итеренә шикләнмәйем. Ғөмүмән әйткәндә, беҙҙең республика бөтә донъяға комфортлы хеҙмәтләндереүе менән түгел, ә экзотикалы булыуы менән ҡыҙыҡлы. Беҙгә үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, кейемдәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы бушҡа күрһәтеп йөрөүҙән туҡтап, был тамашаларҙан иҡтисади файҙа алырға өйрәнергә кәрәк. Республикала туризм үҫеше башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, этнографияһына, ғөрөф-ғәҙәтенә туранан-тура бәйле, шуға күрә беҙҙә этнопарк асыу Рәсәйҙең генә түгел, ә бөтә донъя туристарын йәлеп итерлек сара булыр, тип уйлайым. Минеңсә, Өфөнән алыҫ булмаған ерҙә башҡорт йәйләүе төҙөп, туристы шунда бер нисә көн йәшәтеү уға ерле халыҡтың үҙенсәлеген тәрәнерәк тойорға булышлыҡ итәсәк. Бөгөнгө көндә ошондай этнопарк төҙөү буйынса икеөс проект йәшәй һәм оҙаҡламай уларҙың береһе булһа ла тормошҡа ашыр тип ышанам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, туризмды үҫтереү хаҡындағы һүҙҙәр һуңғы ваҡытта ҡуйырғандан-ҡуйыра бара. Электән үҙенең ҡунаҡсыллығы менән дан тотҡан башҡорт өсөн был ниндәйҙер ҙур яңылыҡ түгел кеүек, ләкин сикһеҙ ҡунаҡсыллыҡтан үҙебеҙгә лә ниндәйҙер файҙа алыу тураһындағы уйҙар әле булһа беҙгә ят. Ләкин юҡ-бар ғына әйберҙән дә аҡса эшләп, һуштар китерлек тәбиғәт киңлектәре булмаһа ла, уны туристарға файҙалы "һатыу"ҙы үҙләштергән төбәктәр һәм илдәр миҫалында йәшәргә өйрәнергә күптән ваҡыт еткән кеүек. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

*✓ Шундай кешең һәр саҡ янында булһа, был донъяла башҡа тағы ла ни кәрәк? Тик Шәүрә - кем уның өсөн? Шәүрә тураһында уйлап та бирмәйҙер әле. Әлбиттә, ҡартыраҡ ҡына булһа ла, уның тыу бейәләй уйнаҡлап торған бисәһе бар...*



Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Шәүрә

(Ҡисса)



* * *

– Сабылған бесән кипкәндер инде. Иртәгә күмәкләшеп барып йыйып килергә ине, еңгә, - тине бер нисә көндән Сабир. - Мин Сәбилә киленеңде лә алам. Рөхсәт итһәң ни, Шәүрә килен дә беҙҙең менән ҡырға барыр. Көндәр буйына өйҙә ултырғансы, әҙ булһа ла ҡырҙа йөрөп, күңеле асылып ҡайтыр. Сәбилә менән дуҫлашып та алғандар...

- Бармай ни, барһын, әлбиттә, - тине Мөслимә. - Йәш ваҡытта ни, мин дә бесәнгә йөрөй торғайным. Ҡырҙа күмәкләшеп йөрөү бигерәк тә күңелле була бит ул.

Был турала ишеткән Шәүрә эстән генә бик шатланды. Кисен аш-һыу тирәһендә лә бик ирәбе йөрөнө. Ҡомғандан һыу ҡойоп, ҡулын йыуҙырғанда, һәр саҡ яулығының тар ғына еге аша ҡарап йөрөгән Шәүрә, битен бер аҙ аса биреп, ергә эйелеп йыуынып торған Ғарифҡа тағы иғтибар итте. Ҡарағайҙай мыҡты кәүҙәле, һылыу йөҙлө ҡайынеҙнәһенең еңдәрен һыҙғанған көслө беләктәренә һәм уны тағы ла матурлап торған яурынтаҡ һынына бар донъяһын онотоп ҡарап торҙо.

- Атайым ҡулын йыуып бөттө бит, нишләп һаман һыуыңды ағыҙып тораһың? - тип, яҡында ҡарап торған Кәлимулланың ҡысҡырып ебәргәненә Шәүрә тертләп китте. Тиҙ генә ҡомғанын күтәреп, Ғарифтың ҡулына таҫтамал тотторҙо. Таҫтамалын алған арала Ғариф йөҙө яртылаш асылған йәш киленгә күтәрелеп ҡараны. Шәүрә оялышынан битен яңынан ҡаплап, өйгә йүгереп инеп китте.

Шәүрәнең ҡарашы менән Ғариф бары тик икенсе мәртәбә генә осрашты. Ошо минуттан ул инде гүйә бөтөнләйгә аҡылын юғалтты. Ошо көндән алып уның уйҙары аҡылына буйһонорға теләмәй, тик йөрәк ҡушыуы буйынса ғына йөрөнө. Ә йөрәге донъяла Шәүрәнән башҡа кешене бар тип тә белмәне...

Был төндө Шәүрә лә бик оҙаҡ йоҡлап китә алмай аҙапланды. Ҡайынеҙнәһе уның күҙ алдынан китмәне. Нисек кенә тырышһа ла, йәш ҡатын үҙенең йышйыш типкән йөрәген тынысландыра алмай, һаман ул-был яғына борғоланып ятты. Бығаса таныш булмаған ниндәйҙер рәхәт хистәр менән тулған күңеле шул уҡ ваҡытта тәрән ғазап кисерә һымаҡ ине. Ғәжәп. Уға шул тиклем рәхәт, әммә шул уҡ ваҡытта бик тә ҡыйын... Улай ҙа була икән... "Әстәғәфирулла, кит, кеше үҙенең ҡайынеҙнәһе тураһында шулай уйланалыр шул..." тип, үҙ-үҙенән оялып китте Шәүрә, тағы ла уң яғына әйләнеп, эстән генә доғалар уҡып ятты. Әммә беләктәрен һыҙғанып ҡул йыуып торған Ғариф барыбер уның күҙ алдында торҙо. Ул ошо мәлдә төпкө бүлмәлә, моғайын, үҙенең бисәһе менән ҡосаҡлашып рәхәтләнеп йоҡлайҙыр. Бер туҡтауһыҙ күңеленә килгән әллә ниндәй сыуалсыҡ уйҙарын ҡыуып ебәрергә тырышты. Йоҡлаһындар. Һәр кемдең үҙенең хәләл ефете менән йоҡларға хаҡы бар. Шәүрә ҡайынбикәләре йоҡлаған бүлмәнең ишегенә ҡараны. Уның күңелен әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан, бығаса һис бер ваҡытта тойғаны булмаған көнләшеү хистәре әкренләп баҫып бара ине. "Ни хаҡың бар һинең көнләшергә?" тине ул тағы үҙ-үҙенә. Әммә йөрәгенән яҙғы ташҡын кеүек урғылып сыҡҡан көслө хистәре бөтөнләйгә уға буйһонорға теләмәне...

Уҙған ғүмере Шәүрәнең күҙ алдынан үтте. Бала саҡтан уҡ ата-әсәһенән етем ҡалып, ағаһы менән еңгәһе ҡулында үҫте. Ул үҫеп етеүгә яҡын-тирәлә уның һылыулығына һоҡланмаған кеше ҡалманы. Үҙҙәренең ауылынан ғына түгел, күрше ауылдарҙан да һоратып яусылар килә башланы. Ләкин, ҡайһы берәүҙәрҙең әллә күпме мал бирергә вәғәҙә итеүенә лә ҡарамаҫтан, Шәүрәнең ағаһы уларҙың береһе менән дә ризалашманы. Һеңлеһен, үҙенсә, бик яҡшы кешегә бирергә хыяллана ине ул. Ваҡыт үтеү менән яҡшы кешеһе лә табылды. Ул - Байыҡ ауылынан Шәрифйән исемле йыуаш ҡына егет ине. Төҫкә-башҡа ла арыу ғына, тик үтә сибек был егет бик тә ярлы ине. Был турала һүҙ ҡуҙғатҡан күрше-күләнгә: "Ярар, сибеклеге - бөтөр, байлығы - табылыр", - тине Шәүрәнең ағаһы. Оҙаҡламай, үҙҙәренсә туй яһап, ҡыҙҙы Байыҡ ауылына оҙаттылар. Бергә йәшәгән дәүерҙә иренән һис бер ауыр һүҙ ишеткәне булманы Шәүрәнең. Шулай тыныс ҡына йәшәй бирҙеләр. Ваҡыт үтеү менән, ағаһы туйға бүләк иткән танаһы һыйыр булып китте. Әҙ булһа ла ваҡ малдары ла үрсей башланы. Тик Шәрифйән генә һауыға алманы, киреһенсә, көндән-көн насарая барҙы. Иренә ҡарата бер ҡасан да һөйөү тойғоһо булмауға ҡарамаҫтан, Шәүрә уға һәр саҡ ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте. Һуңғы минутҡа тиклем Шәрифйәненең янынан китмәне. Ире алдында ла, намыҫы алдында ла Шәүрәнең күңеле саф. Үҙенең ҡатынлыҡ бурысын тулыһынса үтәне. Выждансы ғазапламай уны. Ошо уйҙарҙан һуң Шәүрәгә бер аҙ еңел һымағыраҡ булып ҡалды.

...Ҡарашы тағы ла теге ишеккә төштө. Йөрәген өтөп барған көнсөллөк тойғолары таңға тиклем уны йоҡлатманы...

Был төндө Шәүрәнән башҡа тағы берәү йоҡоһоҙ үткәрҙе. Ул, көндәгесә, еңгәһенең тәненә яңылыш ҡына тейеп алыуҙан ҡурҡып, унан алыҫыраҡ ятырға тырышҡан Ғариф ине. Үҙен ситлеккә бикләнгән ҡош һымаҡ тойҙо ул. Кеше бәхетенә ҡапма-ҡаршы булған йолалар барлығына күңеле әрнене. Әй, Шәүрәкәй, нишләп кенә бынан бер-нисә йыл элек осраманың һин Ғарифҡа? Иҫ китерлек гүзәллегеңде ни өсөн ул - егет, ә һин ҡыҙ сағыңда күреп һоҡланырға яҙмаған уға?.. Ғүмер буйы тик һине генә уйлап, янып-көйөп йәшәргә яҙғанмы икән? Һинең күҙҙәреңә бер ҡарар өсөн генә бөтә байлығын бирер ине ул. Хәйер, нимә ул - байлыҡ? Әгәр байлыҡ бәхет килтерә торған булһа, бөтә бай кешеләр ҙә бәхетле булыр ине... Тормошта бер ҙә генә улай түгел шул. Бына Сабирйән менән Сәбилә, ярлы булыуҙарына ҡарамаҫтан, бәхетлеләр. Хоҙай уларҙы донъя малынан мәхрүм итһә лә, тиң мөхәббәт биргән. Бер иш аҡҡоштар кеүек, бер-береһе менән теләгәнсә һөйләшәләр, серләшәләр. Боронғо ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә улар араһында кәртә булып тормай. "Эй, атай, нишләттең һин мине? Ни өсөн үҙ ихтыярымдан тыш мине ҡарт еңгәмә хәләл ефет булырға мәжбүр иттең? Әгәр ғәзиз улың ошо донъяла бәхетле булһа, һиңә насар булыр инеме ни, атай? Өҫтәүенә, тормош юлыма Шәүрә - гүзәл зат осраны. Ул ғына ла түгел, йөрәгемде бөтөнләйгә яулап ала башланы. Уның өсөн йөрәгемдең буш урыны бар ине бит, атай. Мин буйҙаҡ инем. Еңгә ҡуйынына һалып, минең ҡул-аяҡтарымды бығауланың..." Атаһына рәнйеүе нисек кенә көслө булһа ла, үҙе лә ҡасандыр йәш сағында боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрҙең ҡорбаны булған атаһын йәлләп тә ҡуйҙы. Уйҙары тағы Шәүрәгә күсте. Шәүрә... Ғарифтың күҙ ҡараштарын һиҙҙеме икән? Хәйер, ни өсөн ул тиктомалдан буйҙаҡ булмаған ҡайынеҙнәһенә иғтибар итергә тейеш әле...

Таңға ҡәҙәр Ғарифты ла йоҡо алманы.

Кистән һарыҡтарын Хаммат байҙың көтөүсеһе Сөләймәнгә ваҡытлыса тапшырып ҡуйған Сабир таң менән тороп, ике арбаға аттар екте. Уның көтөүгә йөрөй торған ҡола бейәһе - ауыр йөк арбаһына, ә еңелерәк арбаға Ғарифтың туры айғыры егелде. Ғариф кистән үк: "Сабир, мин дә иртәгә һеҙҙең менән бесәнгә барырға булдым. Миңә лә егеүле ат әҙерләп ҡуй әле", - тип әйтеп ҡуйғайны.

Һәнәк, тырмаларҙы Сабир үҙенең арбаһына тейәне. Ә хужаһы арбаһының төбөнә йәш бесән йәйҙе. Барыһы ла әҙер булғас:

- Әйҙәгеҙ, ылауҙар әҙер, хәҙер юлға сыҡһаҡ та була, - тине.

Сабир менән Сәбилә йөк арбаһына ултырҙы. Улар менән бесәнгә барырға йыйынып, ҡайһы арбаға ултырырға икән, тип икеләнеберәк торған Шәүрәгә Ғариф:

- Килен, әйҙә, ултыр минең арбаға, урын етерлек бит, - тип көлдө.

Ғәҙәттәгесә, яулыҡ менән битен ҡаплап, Шәүрә ҡыйыуһыҙ ғына арба ситенә килеп ултырҙы.

- Төпкәрәк ултыр, килен, юғиһә, төшөп ҡалырһың. Аллам һаҡлаһын, унан ҡайынбикәң алдында яуаплы булып торормон. Киленемде ҡайҙа юғалтып ҡалдырҙың, тип башымды ашар, - тип шаяртты Ғариф. Шәүрә бер ни ҙә өндәшмәне, бер аҙ арба төбөнәрәк, Ғарифҡа яҡыныраҡ шылып ултырҙы.

Сыбыртҡы белмәгән шәп атты еңелсә генә юрттырып, бесәнлеккә ҡарай юл алдылар. Уларҙан бер аҙ алдараҡ ҡуҙғалған Сабирҙарҙың ылауы инде ауылдан сығып, үҙәк артына йәшерәнә лә башлағайны.

Ҡырҙағы матур тәбиғәткә һоҡланып, ҡоштар һайрауын тыңлай-тыңлай, Ғариф менән Шәүрә оҙаҡ ҡына бер ни ҙә һөйләшмәй барҙы. Улар икеһе лә ниндәйҙер аңлатып булмаҫлыҡ ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә ине буғай. Тауышланып әйткән берәй һүҙҙең ана шундай ләззәтле уйҙарын яңылыш ҡына емереп ҡуйыуынан ҡурҡҡан һымаҡ, өнһөҙ генә юлдарын дауам иттеләр.

Ғарифтың унда-бында яңылыш ҡына иңбашына ҡағылып алыуынан иңбашынан Шәүрәгә тылсымлы, рәхәт йылылыҡ килгән һымаҡ. Шундай йомшаҡ ҡына ҡағылыуҙан йәш ҡатындың тәндәре сымырҙап китә. Шәүрә бер аҙ тартынғандай, ситкәрәк шылып ултырған булды. Әммә үҙе Ғарифтың тән йылыһын тағы, тағы ла тойғоһо килә ине.

- Нишләп улай бик ситкә шылып киттең, килен? - тине Ғариф уға боролоп йылмайып ҡарап. - Әйттем бит, төшөп ҡалырһың, тип. Әллә тешләшер тип ҡурҡаһыңмы?

- Юҡсы, ҡурҡмайымсы... - тине Шәүрә йөҙөн йәшереп. Ҡайынеҙнәһе менән йәнәш ултырып барыуы шундай рәхәт! Унан бер генә һүҙ ишетеү ҙә Шәүрәнең бөтә донъяһын оноттора. Ниндәй яғымлы уның тауышы! Шундай кешең һәр саҡ янында булһа, был донъяла башҡа тағы ла ни кәрәк? Тик Шәүрә - кем уның өсөн? Шәүрә тураһында уйлап та бирмәйҙер әле. Әлбиттә, ҡартыраҡ ҡына булһа ла, уның тыу бейәләй уйнаҡлап торған бисәһе бар...

Шул саҡ арба келтерҙәгән тауышҡа ҡушылып, Ғариф бығаса таныш булмаған, әммә бик моңло көйлө йырҙы әкрен генә һуҙып ебәрҙе:

*Һауала ғына осҡан, ай, аҫыл ҡош*
*Ыласын ғына тиһәм дә биле ала.*
*Эскенәйем тулып, ай, ут яна.*
*Һүнһен дә тиһәм, бүтән ни ҡала?*

Был йырҙың көйө лә, һүҙҙәре лә әле генә барлыҡҡа килеп, Ғарифтың мөхәббәт хистәре менән тулған йөрәгенән үҙенән-үҙе ағылды. Тәрән, төҙәлмәҫлек яра һалып, был илаһи моң Шәүрәнең күңеленә, йәне-тәненә үтеп инә барҙы. Ә тауышы ла тауышы! Сихырланған кешеләй, күпмелер ваҡытҡа хатта Шәүрәнең тын алышы ла туҡталғандай булды. Ҡыҙ сағында Шәүрә лә бик матур йырлай торғайны. Ауылда уның матурлығы тураһында ғына түгел, сәсән һәм оҫта йырсы тигән даны ла таралғайны. Ғарифтың йыры шундуҡ отоп алынып, Шәүрәнең йөрәгенең иң түренә инеп урынлашты. "Уның эсендә лә ут яна... Тик кем өсөн генә яна икән, беләһе ине?.." тип уйланды Шәүрә.

Татлы хистәренә бирелгән Ғариф йырының көйөн һүҙһеҙ генә көйләүен дауам итте. Бар тирәләге тәбиғәт, бөтә донъя бөгөн уға ғәҙәттәгенән матур булып тойолдо. Сөнки ошо донъяға йәм өҫтәп, уның янында һылыуҙарҙан һылыу Шәүрә ултырып бара...

Бесән йыйып, күбә һалған саҡта ла Ғариф һәр ваҡыт Шәүрә янында булырға тырышты. Ә уның эре-эре күтәремләп бесән ташлауҙарына Шәүрә һоҡланып бөтә алманы. Янында шундай көслө ир барын тойоу Шәүрәгә рәхәт ине. Ҡайһы берҙә уларҙың ҡараштары осраша. Шул ваҡытта Шәүрә күҙҙәрен йәшерергә тырыша. Ә Ғариф, киреһенсә, Шәүрәнән күҙҙәрен алмай. Унан башҡа был яланда тағы бүтән кешеләр ҙә бар икәнен дә онота. Шулай, йәйге оҙайлы көндөң нисек үтеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдылар.

Бесәндән ҡайтҡан саҡта улар бер-береһенә булған иң яҡшы хистәренән эстән генә янып, бер-беренә һүҙ ҙә өндәшергә ҡыймай, юл буйы бер ни ҙә һөйләшмәнеләр. Ғәҙәттәгесә, алдағы ылауҙа барған Сабир ҡатынынан:

- Ғариф менән Шәүрә араһында бер ни ҙә һиҙмәнеңме, әсәһе? - тип һорап ҡуйҙы.

- Юҡсы... - тине Сәбилә.

- Бер-береһенә ғашиҡ булған һымаҡ тойолдолар улар миңә, - тине Сабир. - Ғариф Шәүрәгә шундай итеп, йоторҙай булып ҡарай. Шул уҡ ваҡытта, Шәүрәнең ҡарашында ла ниндәйҙер мәғәнә бар һымаҡ...

- Китсе, атаһы, Ғарифтың бисәһе бар бит. Өҫтәүенә, Шәүрә - килен кеше... Булмаҫ. Әллә үҙең дә Шәүрәнән күҙеңде ала алмай йөрөнөңмө? - тип көлдө Сәбилә.

- Әллә, әсәһе, үҙемдең һиҙемләүемде генә әйттем, - тине Сабир ҡатынының шаяртыу һүҙҙәренә иғтибар итмәй. Башҡаса был турала һөйләшмәнеләр.

**(Дауамы бар).**

✓ *Күпме зыялылар сыҡҡан ул тарафтарҙан. Бөгөн килеп, улар республиканан ситтә тороп ҡалды. Эйе, республикабыҙ Силәбелә башҡортлоҡто һаҡлап ҡалыуға ниндәйҙер көс һала кеүек. Ләкин башҡарылған эш юҡ кимәленә бәрәбәр.*

*СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫНДА*

**Силәбе өлкәһенең Сосновка районында башҡорт әҙәбиәте классигы Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған төбәк-ара ижади конференция булып үтте. Был ҙур һәм мөһим сара район хакимиәте һәм Аҡмулла исемендәге өлкә әҙәби берләшмә тарафынан ойошторолдо. Силәбе өлкәһендәге йәш һәм башлап яҙыусы башҡорт авторҙарының ижадын үҫтереү, Сосновка районы мәктәптәрендә республикабыҙҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының тәжрибә уртаҡлашыуына башланғыс һалыу конференцияның төп маҡсаттарының береһе булып торҙо. Сарала Башҡортостандан билдәле шағир һәм прозаик Мәүлит Ямалетдин, сәсәниә һәм фольклорсы Ғәрифә Кудрявая, Учалы районы мәктәптәре уҡытыусылары ҡатнашты.**

# ҮҘ ИЛЕНДӘ ЙӘШӘП...

## үҙ илен һағынып йәшәйҙәр

### Көнкүрештәре яҡшыраҡ та ул...

Оло Башҡортостандың бер өлөшө булған Силәбе ере милләттәштәребеҙҙең яҙмышы тураһында уйланған һәм борсолған һәр башҡорт өсөн ҡәҙерле һәм танһыҡ. Ул тарафтар һәр ваҡыт үҙенә тартып тора. Яҡлаусыһыҙ ҡалған балалай, беҙҙән ярҙам һорап саҡыра төҫлө Силәбе яҡтары. Хәйер, был тойғо Ырымбур, Пермь, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Татарстан тарафтарында айырылып ҡалған милләттәштәр тураһында уйланғанда ла тынғылыҡ бирмәй. Ирекһеҙҙән, Рәми Ғариповтың Башҡортостанды йөрәк менән сағыштырған шиғыры хәтергә төшә. Тик шағир телгә алған Башҡортостан - йөрәктең бер өлөшө генә. Ысынлап та, еребеҙ түгел, күкрәктә һуҡҡан йөрәк ите киҫеп-йолҡколап алынған төҫлө...

Эйе, уҙған быуаттың 30-сы йылдарында бик ҙур биләмәне үҙ эсенә алған Арғаяш, Ҡоншаҡ райондары Силәбе өлкәһенә бирелә (Шул иҫәптән Сосновка районы ла, ул элек Ҡоншаҡ биләмәһенә ҡараған). План буйынса, Учалы, Белорет райондары ла Силәбегә күсергә тейеш була. Әммә Әхмәтзәки Вәлиди арҡадаштарының береһе, Учалы районының Ҡотой ауылынан сыҡҡан билдәле сәйәси эшмәкәр Исмәғил Солтанов тырышлығы менән быға юл ҡуйылмай. Шулай уҡ иҡтисадты, сәнәғәтте үҫтереү һылтауы менән Арғаяш, Ҡоншаҡ башҡорттары ата-әсәһенә кәрәкмәгән балалай ситкә ырғытылып, етемһерәп тороп ҡала. Бөгөн беҙ был хаталы аҙымдың кире һөҙөмтәләрен бөтә тулылығында татыйбыҙ. Ата-әсәһеҙ үҫкән бала ниндәй була, унан нимә көтөргә? Дөрөҫ, бәғзе етем балалар, киреһенсә, тиҫтерҙәренән көслө ихтыярлы, үҙ аллы, ҡыйыу һәм тырыш булыуы менән айырылып тора. Силәбелә лә шундай милләттәштәребеҙ бар, улар хатта бөтөн донъяға билдәле. Ләкин етем балаға барыбер мөхәббәт, үҙ тамырын белеү етешмәй. Силәбегә барғанда, ундағы милләттәштәр менән күрешкәндә, ысынлап та, үҙеңде нисектер ғәйепле тояһың. Улар ҙа бит бер ере менән дә кәм булмаған ысын, саф башҡорттар. Тарихыбыҙға йәнә байҡау яһаһаҡ, тап Силәбе башҡорттары ата-бабаларының милләтебеҙҙе үҫтереүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Арғаяш, Ҡоншаҡ батырҙары ихтилалдарҙың төп көсөн тәшкил итеп торған. Ә күпме зыялылар, сәнғәт эшмәкәрҙәре, әҙәбиәтселәр сыҡҡан ул тарафтарҙан. Бөгөн килеп, улар республиканан ситтә тороп ҡалды. Эйе, республикабыҙ Силәбелә башҡортлоҡто һаҡлап ҡалыуға ниндәйҙер көс һала кеүек. Ләкин башҡарылған эш юҡ кимәленә бәрәбәр. Туғандарының мөхәббәте, аралашыуы етешмәй Силәбе башҡорттарына. Шуға күрә уларҙың йөрәк түрендә Башҡортостанға ҡарата хаҡлы рәүештә үпкә тойғолары ярала. Улар был турала асыҡ белдермәһә лә, күҙ ҡараштарынан үҙ-үҙҙәрен тотошонан, ишаралап әйтелгән һүҙҙәренән был һәр саҡ беленә. Әлбиттә, кемдер Башҡортостан менән Силәбе араһындағы сиктәр шартлы, тип әйтер. Дөрөҫ, күптәр Силәбе өлкәһендә эшләп йөрөй, унда йәшәй, ғаилә ҡора. Һәм, киреһенсә, Силәбе башҡорттары беҙҙең республиканы үҙ итә. Ләкин хаҡиҡәттән ҡасып булмай: Силәбе өлкәһендәге башҡорт ауылдары юҡҡа сыға, аҫаба халыҡ үҙ мәҙәниәтен, телен онота.

### Юлдарҙан да оҙон уйҙар

Силәбегә йыш ҡына күршеләрҙе нимәгәлер өйрәтергә, тип барабыҙ, әммә күпселек ваҡытта киреһенсә килеп сыға, үҙебеҙ уларҙан күп нәмәгә өйрәнеп ҡайтабыҙ. Силәбелә милләттәштәребеҙ матди йәһәттән беҙҙән, ысынлап та, бер ҙә кәм йәшәмәй. Тормош шарттары унда, бәлки, яҡшыраҡ та. Һуңғы йылдарҙа Силәбе өлкәһенең иҡтисади хәле яҡшырғандан яҡшыра. Халыҡты социаль яҡтан тәьмин итеү кимәле лә үҫешә. Беҙ йыш ҡына яҡшы юлдарыбыҙ, төҙөк йорттарыбыҙ, яҡты мәктәптәребеҙ, күркәм мәҙәниәт һарайҙарыбыҙ менән маҡтанырға яратабыҙ. Башҡа тарафтарҙы был йәһәттән яманлап ебәрәбеҙ хатта. Был бик үк дөрөҫлөккә тап килеп етмәй һымаҡ. Һәр хәлдә, Силәбе яҡтарына сығып йөрөгән яҡташтарыбыҙ нәҡ шулай тип әйтәсәк. Беренсенән, юлдар - ер менән күк араһы кеүек. Төбәк сиген үткәнендә шунан беләһең: юлдың тигеҙ икәнен тойҙоңмо, тимәк, һин - Силәбелә, соҡор-саҡыр башландымы - был Учалы районы. Икенсенән, Силәбе районларын күреү менән уларҙа ысын хужа етәкселек итеүенә төшөнәһең. Сосновка районының үҙәге - Долгодеревенское ауылына килеп төшөү менән ундағы мәҙәниәт йортона хайран ҡалдыҡ. Иркен, яҡты, иҙән-түшәме ялтырап торған бер һарай ул. 7 мең тирәһе халыҡ йәшәгән ауыл өсөн ысын мәғәнәһендә мәҙәни үҙәк. Уның янында 40 меңдән ашыу кеше йәшәгән Учалы ҡалаһының филармонияһы бер бәләкәй генә йорт булып күренәсәк. Ошо йортто ла бит әле бөгөн нисек кенә мәсхәрәләмәйҙәр. Филармония хәҙер төнгө клубтар, кафелар үҙәгенә әйләнеп бөтөп бара. Етмәһә, яҙ көнө иғлан ителгән ремонт һаман булһа башланмаған. Инде нисәмә ай ҡалала бер концерт та уҙғарылғаны юҡ. Уның ҡарауы, бинаның бер өлөшөн арендаға алған төнгө клубтар, кафелар гөрләп тора. Бына нисек тора Учалыла мәҙәни тормош хәлдәре.

Силәбе етәкселәренең һәм Учалы районы хакимиәтенең ижади сараларға ҡарата мөнәсәбәтен дә сағыштырыу мөмкинлеге булды был сәйәхәтебеҙҙә. Кисен Сосновкаға килеп төшөү менән беҙҙе район хакимиәте башлығы урынбаҫары ҡаршы алды һәм үҙе үк беҙҙе ҡунаҡханаға оҙатып ҡуйҙы. Иртәгәһен иһә сараларҙың башынан аҙағына тиклем ваҡиғалар уртаһында ҡайнап йөрөнө. Әйткәндәй, Арғаяш, Ҡоншаҡ районы етәкселеге лә шундай уҡ мөғәмәлә күрһәтә ҡунаҡтарға. Силәбенән, башҡа тарафтарҙан Учалыға ижади осрашыуҙарға килеп торалар. Әммә улар беҙҙең етәкселәр тарафынан, ҡыҙғаныска ҡаршы, бындай мөнәсәбәт тоймай...

### Сәләмдәр ни әйтер ине икән?

Сара яҙыусыларҙың ижади конференцияһынан торҙо. Унда дүрт авторҙың ҡулъяҙмаһы тикшерелде. Арғаяштан Сайма Фазылованың "Өләсәй" тип аталған повесы ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Повесть яҡшы мөхәррир ҡулы аша үтеп, киләсәктә әҙәбиәт һөйөүселәргә барып етер, тип ышанғы килә. Райхана Бикмөхәмәтова - башлап яҙыусыларҙың береһе, Сосновка районынан, ябай ауыл ҡатыны. Ижадын әҙиптәр хөкөмөнә тәүләп сығара. Бала саҡта, үҫкәндә башҡорт телен өйрәнергә мөмкинлек булманы, мәктәптә русса ғына уҡыныҡ, аралашыу ҙа рус телендә генә барҙы, атайым ғына көсләп тигәндәй башҡорт теленә өйрәтә торғайны, ти ул туған телен үҙләштереү кимәлен аңлатып. Был етешһеҙлек, әлбиттә, уның шиғырҙарында ла сағылыш таба. Шулай ҙа был ҡатындың башҡорт шиғриәтенә ынтылышы, үҙ теленең матурлығына төшөнөргә теләүе ихтирам, хөрмәт кенә уята. Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе ижадсыларҙың береһе Азамат Усманов сәнғәт һөйөүселәрҙең күбеһенә, моғайын, яҡшы таныш. Нәҡ уның һүҙҙәренә композитор Салауат Низаметдинов билдәле "Аҡтан-аҡ миҙгелдәр" йырын яҙған. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Азамат Усманов үҙе конференцияға килә алманы. Әммә ижады хаҡында фекер алышынды, ҡәләме өмөтлө булыуы билдәләнде. Магнитогорскиҙа йәшәүсе икенсе автор - Бибикамал Шәйҙуллина. Ул рус телендә ижад итә, әммә шиғырҙарында иман, милли рух тойғоһо сағылыш таба. Магнитогорск ҡалаһында ижад итеүсе башҡа милләттәштәребеҙ ҙә рух күтәренкелеге кисерә бөгөн. Бының үҙенә күрә аныҡ сәбәбе лә бар. Быйыл ул ҡалала "Аҡмулла" әҙәби берләшмәһе филиалы асылған. Магнитогорскиҙа башҡорт ижадсылары байтаҡ, әммә әҙәби берләшмәнең булмауы арҡаһында һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнап йәшәне. Бөгөн иһә ундағы яҙыусылар ойошоп, бер береһе менән тәжрибә уртаҡлашып ижад итә.

"Аҡмулла" өлкә әҙәби берләшмәһе Силәбе ерендә баһалап бөткөһөҙ ҙур эш башҡара. Төбәктә башҡорт телен, әҙәбиәтен һаҡлап алып ҡалыу - башлыса ошо ойошма иңендә. Магнитогорскиҙан тыш, берләшмәнең филиалдары Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондарында ла эшләп килә. "Аҡмулла" берләшмәһе үҙ сиратында формаль рәүештә Учалы яҙыусылар ойошмаһына беркетелгән. Ә ғәмәлдә берләшмә үҙ аллы эш алып бара, сөнки яҙыусылар ойошмаһының матди хәле лә, аралар йыраҡ булыуы ла тығыҙ бәйләнештә эшләргә мөмкинлек бирмәй. Шуға күрә бар ойоштороу мәсьәләләрен дә, финанс яғын да берләшмә үҙе хәл итергә мәжбүр. Тимәк, Учалылағы, Сибайҙағы, Стәрлетамаҡтағы кеүек Силәбелә лә айырым, үҙ аллы яҙыусылар ойошмаһы булдырыу - өлгөрөп еткән мәсьәлә. Силәбеләргә әлегә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идаралығы ыңғай яуап бирмәй. Аңлашыла, союзда ла матди хәл яҡшынан түгелдер. Ләкин ошо мәсьәлә урынынан ҡуҙғалһа, Силәбе башҡорттарының рухиәтен күтәреүгә ниндәй тос өлөш индерелер ине. Силәбе ерендә башҡорт теленең ниндәй ауыр хәлдә булыуын ижади конференция ла күрһәтте. Ҡулъяҙмаларҙың барыһында ла орфографик, стилистик хаталар күп. Әҫәрҙәр әҙәби телдә түгел, диалект телендә ҡағыҙға төшөрөлгән. Тел байлығы йәһәтенән дә авторҙарға дәғүәләр күп. Әлбиттә, ижадсыларҙың үҙҙәренә ғәйеп ташлауы урынһыҙ. Был тотош милләт проблемаһы.

Ижади осрашыуҙа Сосновка районынан йәш егет Марат Дауытов менән таныштыҡ. Туған телен насар белгәнгә күрә, шиғырҙарын рус телендә яҙа. Ләкин бөгөн ул башҡортса һөйләшергә өйрәнә. Мараттың үҙ телен өйрәнеүенә бер ваҡиға сәбәпсе була. Силәбе ҡалаһында ул "Бүреләр" башҡорт рок-төркөмөнөң концертына эләгә: "Мин рок-музыка тыңлап үҫтем. Әлбиттә, ул рус рогы ине - Цой, Шевчук... Шуға күрә, "Бүреләр"ҙе ишетеү мине хайран ҡалдырҙы. Көйҙәре яраҡкан йырсыларымдың рухына ауаздаш булыуы, өҫтәүенә, йырҙарынан милли колорит, милли рух аңҡып тороуы һоҡландырҙы, башҡорт рогына ғашиҡ иттерҙе. Башҡорт теленең көсөн, йәшәү ҡеүәтен аңланым шул саҡта. "Бүреләр"ҙә мин рухташтарымды таптым. Баҡтиһәң, милли рухҡа шул тиклем һыуһап йәшәгәнмен икән. Рухи көстө туплар өсөн хәҙер һәр ваҡыт уларҙың йырҙарын тыңлайым..."

### Урыҫлашҡан башҡорттар

Башҡорт теле дәрестәре Сосновка районының берҙән-бер мәктәбендә индерелгән. Сиреүсе (Табын) ауылы мәктәбе ул. Ошо уҡыу йортонда Учалы уҡытыусылары Зөлфиә Әминева, Сәлим Йәшелбаев, Фәнүр Шаһиев асыҡ дәрестәр күрһәтте. Асыҡ дәрестәрҙе Силәбе дәүләт университетының башҡорт бүлеге студенттары ла ҡарарға килгәйне. Дәрестәр балаларға ла, урындағы уҡытыусыларға ла бик оҡшаны. Бындай тәжрибә уртаҡлашыу бер тапҡыр ғына уҙғарыла торған сараға әйләнмәһен, конференцияларға бәйләп кенә үткәрелмәһен, уҡытыусылар үҙ-ара айырым һәм йышыраҡ осрашып торһон, тигән фекергә килде барыһы ла. Сиреүсе мәктәбендә йөҙҙән ашыу уҡыусы белем ала. Директор Әлфиә Ҡотлоғужина беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Башҡорттар бында 99 процент. Башҡорт теле дәрестәре беренсе кластан уҡытыла. 9 класҡа тиклем - аҙнаһына 3-әр сәғәт, өлкән кластарҙа икешәр сәғәт бүленгән. Дәрестәрҙе өс уҡытыусы алып бара. Быйыл үҙем дә сәғәттәр алдым. Райондың башҡа мәктәптәрендә лә башҡорт теле дәрестәрен индереү талап ителә, әлбиттә. 1962 йылға тиклем мәктәбебеҙҙә бөтә фәндәр ҙә башҡортса уҡытылған. 1989 йылға тиклем иһә башҡорт теле уҡытыу бөтөнләй бөтөрөлә. 1989 йылда туған телде өйрәнеү ҡабаттан индерелә. Шул осорҙа башҡа мәктәптәр ҙә был эшкә тотоноп ҡарағайны. Әммә быға, минеңсә, кадрҙар проблемаһы кәртә булып торҙо. Район етәкселеге, мәғариф бүлеге беҙгә ыңғай ҡараште, ярҙам итеп тора. Урыҫ халҡы ла, үҙеңде күрһәтә белһәң, тарта ул. Бары тик ялҡауланмаҫҡа кәрәк. Башҡа мәктәптәрҙә лә башҡорт телен тергеҙеп булыр ине. Тик кадрҙар булмауы һәм урыҫлашҡан башҡорттарҙың теләк белдермәүе ҡамасаулай. Әйткәндәй, Силәбе дәүләт университетының башҡорт бүлегенә бына инде өсөнсө йыл студенттар ҡабул ителмәй. Быйылғы уҡыу йылында һуңғы төркөм сығарыласаҡ. Тимәк, киләсәктә төбәктә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ҙур ҡытлыҡ кисереләсәк... Районда дүрт саф башҡорт ауылы бар. Мамай ауылы, Көҙөй-Шайтан (унда Салауат Юлаевтың яндырылған ауылынан күсенеп килгән башҡорттарҙың тоҡомо көн күрә), Әлиш һәм Табын ауылы. Әммә был ауылдарҙа өс тиҫтә йыл инде туған тел уҡытылмай. 60-80-се йылдарҙа өҙөлгән быуындар сылбырын яңынан тоташтырыуы бөгөн бик ҡыйын.

### Шағир шағирҙы алыштыра аламы?

Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, ҡанатлы шағир Ғәлимов Сәләмдең ижады, һис шикһеҙ, мәңгелек. 30-сы йылдарҙа ул башҡорт шиғриәтен үрелеп етмәҫлек бейеклеккә күтәрә. Туҡһанынсы йылдарҙа Тәгеш ауылында Сәләмдең тыуған йортона таҡтаташ ҡуйыла. Бөгөн ауыл урамы ла шағир исемен йөрөтә. Йорттоң нигеҙе ныҡ әле, ул Сәләмдең үлемһеҙ ижадын кәүҙәләндереп тора кеүек. Тыуған йортонда шағир 1930 йылға тиклем йәшәгән.

Сарала ҡатнашыусылар шағир ауылында булып, таҡтаташҡа сәскәләр һалды. Трубный ауылының мәҙәниәт йортонда хәтер кисәһе уҙҙы. Кисәгә күрше ауылдар халҡы ла саҡырылғайны. Залдың тулы булыуы бик һөйөндөрҙө. Кисәлә Сосновка районында Ғәлимов Сәләм исемендәге әҙәби премия булдырылыуы тураһында иғлан ителде. Шағирҙың исемен мәңгеләштереү, төбәктә рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлау йәһәтенән был бик мөһим, әлбиттә. Премияның тәүге лауреаттары ла билдәләнде. Юғары исемгә лайыҡлы рәүештә "Аҡмулла" әҙәби берләшмәһе етәксеһе Ҡамса Мортазин, Сосновка районының әҙәби берекмәһен ойоштороусы Урал Ҡолошев, публицист Арыҫлан Бикбулатов эйә булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт рухиәтен һаҡлау йәһәтенән иң күп проблемалар - Сосновка районында. Бында туған тел уҡытылмау арҡаһында башҡорт милләте юғала. Ғөмүмән, Башҡортостандан ситтә көн күргән аҫаба милләттәштәребеҙ ҙур һәм ауыр фажиғә кисерә. Ә ысынында был фажиғә тотош башҡорт халҡының афәте ул. Бөгөн республиканан ситтә милләтте күтәргән Сәләмдәр, Дәүләтшиналар, Юлтыйҙар, Агиштар, Бикбаевтарҙың үҫеп сығыуы мөмкин түгел. Ошонан да ҙурыраҡ фажиғә булыуы мөмкинме беҙҙең өсөн?**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

**Беҙҙең илдә теләһә ниндәй берәй мәсьәләне тотоп алып, аҡты ҡара итергә гәйәт оҫталар бар, ирек кенә бир. Бына шулай сиктән сиккә һуғылыу сире төптән уйлап тормаҫтан, дыуамалланып, аҡтан-аҡ, изгенән-изге, шифанан шифа милли эсемлегебеҙ булған, бөйөк рус яҙыусылары Пушкин, Толстой, Чехов данлаған ҡымыҙҙы ла дошман (алкоголле) эсемлектәр рәтенә индереп, уны етештереүҙе һәм һатыуҙы сикләү ихтималлығы килтереп тыуҙырғас, йәмәғәтселек бер килке шаңҡып, аптырап ҡалды. Ошондайын да мәғәнәһеҙлектән. Ә мәғәнәһеҙлек ниҙән килеп сыға һуң? Уйлап еткермәүҙән, белекһеҙлектән, наҙанлыҡтан... Ысынлап та, күптәребеҙ, ҡымыҙ - шифалы эсемлек, тиеүҙән ары китә алмайбыҙ, ахырыһы. Ҡымыҙҙы алкоголле эсемлеккә тиңләйҙәр икән, тигән хәбәр сыҡҡас, бер ҡайҙа ла ҡымыҙҙы төплө нигеҙләп яҡлаған һүҙ әйтелмәне, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында булған тапшырыу ҙа ҡоро һүҙ бутҡаһынан әйләнде. Ғөмүмән, нимә һуң ул - ҡымыҙ? Уның шифаһы нимәлә? Химик составы ниндәй уның? Ниндәй файҙалы мәтдәләр, ферменттар, витаминдар бар унда? Организмға тәьҫире ниндәй? Ошо һәм башҡа һорауҙарға бөгөн редакциябыҙ ҡунағы, ҡымыҙ һәм ҡымыҙ менән дауалау өлкәһендә ярты быуатҡа яҡын эш тәжрибәһе туплаған төплө белгес - медицина һәм иктисад фәндәре докторы, профессор, академик, РФ һәм БР-ҙың атҡаҙанған табибы Әмир Ғабдрахман улы ШАМАЕВ асыҡлыҡ индерә.**



# ҠЫМЫҘ - ӘСӘ ҺӨТӨНӘ ТИҢ,

## тигәнде борондан белгәндәр

### Уны бөйөктәр данлаған

Ҡымыҙ - бик боронғо эсемлек, уның хаҡында тәүләп боронғо грек тарихсыһы Геродот (б.э.т. 484-424 й.й.) яҙмаларында иҫкә алына. Скифтарҙың көнкүрешен һүрәтләп, ул бейә һөтөнән махсус ысул менән әҙерләнеүсе эсемлек хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт ҡалдырған. Уның яҙмаларындағы скифтарҙың яратҡан эсемлеге булған бейә һөтөнөң тәрән һауыттарҙа бешеү (һапырыу) юлы менән әҙерләнеүе хаҡындағы юлдар бында фәҡәт ҡымыҙ тураһында һүҙ алып барылыуына шик тыуҙырмай.

Ҡымыҙ әҙерләү ысулы башҡорттарҙа ла шундай уҡ, ә инде уның ҡайһы бер нескәлектәре борон-борондан сер итеп тотолған һәм быуындан-быуынға тапшырыла килгән. Ҡымыҙҙың һыуһынды ҡандырыусы эсемлек кенә түгел, ә шифалы дауалау сараһы икәнлеге лә элек-электән мәғлүм булған. Был хаҡта иһә яҙмалар Әбүғәлисина хеҙмәттәрендә теркәп ҡалдырылған. Бынан 1000 йыл элек әле уның һейҙек юлдарына таш ултырып яфаланған бер вәзирҙе ҡымыҙ менән дауалап аяҡҡа баҫтырыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Бөйөк рус ғалимдары һәм яҙыусылары ла был хаҡта ишетеп кенә белмәгән. Күптәренең (шул иҫәптән В.И.Даль, М.В.Авдеев, Ф.Д.Нефедов, Д.Н. Мамин-Сибиряк, Л.Н. Толстой, А.П. Чехов, С.Т. Аксаков һ.б.) бер нисә тапҡыр рәттән башҡорт иленә килеп, ҡымыҙ менән дауаланыуҙары хаҡында яҡшы беләбеҙ. Шулар араһынан айырыуса Лев Толстой ҡымыҙҙы ғына түгел, ә башҡорт илен юғары баһалаған, боҙоҡлоҡтоң ни икәнен белмәгән изгелекле, ябай күңелле башҡорттарҙы ихлас яратҡан. 1862 йылдың 27 мартында ул Ҡаралыҡ йылғаһы буйындағы башҡорт йәйләүендә ҡымыҙ менән дауаланһа, 1872 йылда Таналыҡ йылғаһы буйындағы хуторҙа оҙаҡ ҡына ял итә, унан 1875 йыл йәнә бөтөн ғаиләһе менән килһә, унан һуңғы 1881, 1883 йылдарҙа ла йәйге айҙарҙы "үҙенең башҡорттары янында" үткәрә. "Мине бында бөтә башҡорттар ҙа белә һәм бик хөрмәтләйҙәр", тип яҙа ул ғорурлыҡ менән.

Ә бына билдәле этнограф, лексикограф, рус теленең аңлатмалар һүҙлеге авторы Даль ҡымыҙҙы составы яғынан әсә һөтөнә тиңләштереп сағыштыра һәм уның сифаты хаҡында шулай тип яҙа: "Ҡымыҙға бер өйрәнһәң, уны башҡа төр эсемлектәр менән алыштырыуы мөмкин түгел. Ул һыуһынды ҡандырып ҡына ҡалмай, асығыуҙы ла баҫа, тик шул уҡ ваҡытта ҡымыҙ эсһәң, аҙаҡ күпме теләйһең, шунса ашарға ла була, ғөмүмән, ашамай ғына торорға ла мөмкин - асыҡтырмай. Бик үҙенсәлекле сифатҡа эйә ҡымыҙҙан ашҡаҙанға һис ауырлыҡ килмәй, киреһенсә, дәртләнеп һәм сафланып китҡәндәй булаһың... Ҡымыҙ эсеп иҫереү мөмкин түгел, тик ҡайһы саҡ, айырыуса көҙгө ҡымыҙҙан биттәр алһыулаһып, еңелсә күңелләнеп алырға мөмкин һәм был хәл шуның менән үтеп тә китә... Ҡымыҙҙы ифрат күп ҡуләмдә, хатта көнөнә бер биҙрә эсергә мөмкин - уның бер ниндәй ауырлығы ла, эҙемтәләре лә һиҙелмәй... Ашҡаҙан эшмәкәрлеген ул шундай дәрәжәлә яҡшы итеп көйләй: бик ашап өйрәнелмәгән майлы һарыҡ йә һыйыр ите еңел үҙләштерелә".

Йә булмаһа, Филипп Нефедовтың яҙмаларынан өҙөк килтерәйек: "Үҙем хаҡында шуны әйтә алам: ҡымыҙ минә иҫ киткес ғәжәп рәүештә тәьҫир итте: йүткәләүҙән туҡтаным, ҡайҙандыр минә рух күтәренкелеге, ғәҙәттән тыш көс өҫтәлде һәм эшмәкәрлеккә дәрт уянды. Бер минутҡа ла бүленмәй, мин өс-дүрт сәғәт буйы эшләп ултыра башланым; эшем тиҙ һәм еңел бирелде - ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әллә нисә көнлөк бурысты башҡарып өлгөрҙөм. Ҡымыҙҙы көнөнә 10-12-шәр шешә эсә инем һәм көндән-көн үҙемдә яңы көс өҫтәлгәнен тойҙом, йәшәүгә шатланыу хисе минең бөтә булмышымды биләп алды... "

Ҡымыҙ бына шулай кеше организмына күп яҡлап тәьҫир итә. Дарыу препараттарына ҡарағанда, ҡымыҙ күпкә тиҙерәк аш һеңдереү биҙҙәрен, ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеген көйләй ала, аппетитты һәм матдәләр алмашыныуын яҡшырта. Ҡымыҙҙың нервылар системаһына тәьҫире лә бик ыңғай. Ҡымыҙ менән дауаланыу тын алыу, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшен яҡшырта, организмдың һаҡланыу көсөн нығыта. Башҡорт далаларына килеп, ҡымыҙ менән дауаланыусыларҙың күплегенә ҡарамаҫтан, XIX быуаттың урталарына тиклем бер генә махсус шифахана ла асылмаған була әле. Ҡымыҙ менән дауалауҙың фәнни һәм ойоштороу нигеҙен һалыуға тәү башлап врач Нестор Постников тотона. Туберкулез менән сирле берәүгә ҡымыҙҙың һауыҡтырғыс мөғжизәһен үҙе күреп инанғас, ул әлеге Һамар (элек Ҡуйбышев) ҡалаһынан 6 саҡрым ерҙә туберкулез һәм башҡа сирҙәрҙән дауаланыу өсөн шифахана аса. Шунан һуң бер-бер артлы башҡа бик күп шифаханалар эшләй башлай. Башҡортостанда иһә тәүге ҡымыҙ шифаханаһын яҙыусы С.Т.Аксаковтың ейәнсәре О. Аксакова 1890 йылда Аксаков станцияһы янында асып ебәрә.

Әлеге көндә Башҡортостанда ҡымыҙ менән дауалаусы Шафран, Глуховская, С. Т. Аксаков исемендәге һәм Йоматау, Танып шифаханаларында эш заман талаптарына яраштлы юғары кимәлдә ойошторолған, унда илебеҙҙең төрлө тарафтарынан килеп ял итәләр, дауаланалар.

### Ҡымыҙҙа - бөтә Менделеев таблицаһы

Белгестәр ҡымыҙҙы хаҡлы рәүештә "тере эсемлек" рәтенә индерә. Был нимәне аңлата һуң? Яңы һауған бейә һөтө әсей башлағандан алып ҡымыҙ булып өлгөрөп еткәнгә тиклем биохимик составы һәм микробиологик төҙөлөшө яғынан ғына түгел, ә физик һәм химик үҙенсәлектәре йәһәтенән дә әллә күпме үҙгәрештәр кисерә.

Ҡымыҙҙың шифаһы һәм туҡлыҡлылығы һөт составына, сүпрәгә һәм уны яһау ысулына ныҡ бәйле. Һыйыр, кәзә һәм башҡа малдарҙың һөтөнән эшләнгән бер ниндәй ҡымыҙ ҙа бейә һөтөнән яһалған ҡымыҙҙы алыштыра алмай, шуға күрә улар ГОСТ талабы буйынса яһалма ҡымыҙ тип йөрөтөлә. Бейә һөтө һыйырҙыҡынан аҡһым һәм углевод составы буйынса ныҡ ҡына айырылып тора. Ошо ике компоненттың нисбәте яғынан бейә һөтө ҡатын-ҡыҙ - әсә һөтөнә яҡын тора. Әлеге көндә Ер шарында йәшәүсе халыҡтарҙың күп өлөшө аҡсым үҙләштереүҙә булышлыҡ итеүсе триптофан, лизин һәм метионин тигән өс төр аминокислотаға мохтажлыҡ кисерә. Ҡымыҙ тап бына ошо алыштырғыһыҙ аминокислоталарҙың ифрат бай сығанағы булып тора ла инде. Был иһә кеше организмында матдәләр алмашыныуын көйләп кенә ҡалмай, бәлки иммун аҡһымдарын "төҙөүҙә"лә ҡатнаша.

Ҡымыҙҙың состав өлөшөн һәр төрлө витаминдар һәм микроэлементтар тәшкил итә. Ғалимдар төрлө яҡлап тикшергәндән һуң был шифалы эсемлектә В1(тиамин), В2(рибофлавин), С(аскорбин кислотаһы) һәм башҡа витаминдар күп булыуын асыҡланы.

Химик составы яғынан тикшереүҙәр буйынса, 100 г (100 мл) ҡымыҙҙа һыу - 87,8 г, аҡһым - 1,5 г, майҙар - 1г, лактоза - 4,9 г, органик кислоталар - 1,4 г, минераль матдәләрҙән Na - 33 мг, K - 76 мг, Ca - 92 мг, Mg - 24 мг, P - 59 г, Fe - 0,1 мг һәм башҡа бик күп микроэлементтар бар.

Ҡымыҙ - тәбиғи антибиотик та. Был, әлбиттә, уға һалынған әсеткеләге микроорганизмдарға бәйле. Быңдай ҡымыҙ организмда бактериялар үрсеүен тоткарлау һәләтенә эйә. Уның тап ошо үҙенсәлеге туберкулезға һәм йоғошло эсәк таяҡсаларына ҡаршы уңышлы ҡулланыла ла инде.

Ҡымыҙҙың составы уны яһау ысулына ғына түгел, ә иң тәүҙә бейәләрҙең туҡланыуына бәйле. Һауҙыра торған бейә күпме теләһә, шунса ашарға тейеш. Яҡшы сифатлы ҡымыҙ эшләйем тиһәң, аттарға тәүлегенә яҡынса 10 кг ҡоро аҙыҡ: онталған һоло, арпа биреп тороу фарыҙ, шунһыҙ, әгәр ул тейешенсә ашамаһа, ҡымыҙы бөтөнләй икенсе була. Ҡымыҙҙың дауалау үҙенсәлектәре фәҡәт бейәнең туҡланыуына бәйле. Әйткәндәй, Өфө ат заводында хәҙер яңы директор, ул әле бына орлоҡ йүнләп алам да, ҡылған сәсәм, тип дәртләнә. Бик хуп, ҡаты аҙыҡ һөткә бик файҙалы.



## Күберәк етештерергә кәрәк!

Ҡымыҙ - Хоҙай Тәғәлә тарафынан бирелгән илаһи эсемлек, шифаһы буйынса бүтән бер генә эсемлек тә уға яҡын да тора алмай! Юҡҡа ғынамы ни уны тикшереүсе ғалимдар әсәнең күкрәк һөтөнә тиңләгән. Яңы тыуған сабыйға, ысынлап та, май түгел, ә тулыһынса үҙләштерелә торған аҡһым кәрәк. Ҡымыҙ тап ана шундай сифатҡа эйә лә инде.

Ошоға бәйле, һуңғы ваҡыт матбуғатта күҙгә салынып ҡалған бер хәбәргә ҡарата фекеремде белдереп киткем килә. Ҡымыҙҙы һыра, кеүәҫ, кефир кеүек составында спирт булған эсемлектәр рәтенә индереп, уны етештереү һәм һатыуҙы сикләү хаҡында ине ул мәғлүмәт, хәтерем яңылышмаһа. Бындай яҙыҡ хәбәрҙе ҡымыҙҙың ни икәнен белмәгән наҙандарҙың ғына һөйләүе ихтимал. Был эсемлектең шифаһы тураһында һүҙ алып барғанда беҙ бит уның дауалау үҙенсәлектәрен күҙҙә тотабыҙ. Ә дауалаусы ҡымыҙҙа, был өлкәлә 50 йылға яҡын эшләгән белгес булараҡ, рәсми рәүештә белдерә алам: бер ниндәй градус та, спирт та юҡ. Башҡортостанда бер ваҡытта ла градуслы ҡымыҙ яһаманылар.

Эйе, эшләйҙәр уны, мәҫәлән, Ҡаҙаҡтар яһай. Уның үҙенең технологияһы бар: бешекләп, өлгөргән ҡымыҙға яңынан һөт өҫтәп-өҫтәп торалар ҙа тағы бешекләгәндән һуң әсе, йәғни градуслы ҡымыҙ килеп сыға, унда алкоголь күләме 4-5 градусҡа тиклем еткерелә ала. Беҙҙә, ҡабатлап әйтәм, ҡымыҙ яңыау бындай технологияға көйләнмәгән. Яңы һауылған бейә һөтөнә сүпрә ҡушып болғатыла һәм ул 2 сәғәт эсендә өлгөрөп тә етә. Шунан ул һыуыткысҡа күсерелә һәм + 2, -3 градус температурала 7 көн буйы дауаланыуға яраҡлы була. Ҡымыҙҙа бик тырышып градус эҙләгән кешеләрҙе шулай тип кенә "йыуатырға" була: яраҡлылыҡ ваҡыты үткән йә тейешлесә һаҡланмаған эсемлектә спирт күләме ни бары 2 градустан да артмай, сөнки, әйтеүемсә, уның яһалыу технологияһы башҡаса.

Ҡымыҙ - бер кем өсөн зыяны булмаған уникаль эсемлек, уны балалар ҙа, өлкәндәр ҙә, сәләмәт булғандар ҙа, сирлеләр ҙә теләгәнсә күләмдә эсә ала. Ҡымыҙҙы мин тормош эликсиры, тип атар инем. 3-4 ай буйына көн дә ҡымыҙ эскән кеше телһә ниндәй сирҙән дауалана ала. Әйткәндәй, дауаланыуҙың беренсе уңыш билдәләре тәүге 1-2 айҙа уҡ һиҙелә башлай. Тик бер нәмәне иҫтә тоторға кәрәк: был осраҡта фәҡәт дауалау өсөн етештерелгән ҡымыҙҙы ҡулланыу фарыз, ә әсегәнде түгел. Ошо әйтелгәндән сығып, мин ҡымыҙ етештереүҙе сикләү йә тыйыу түгел, киреһенсә, уны кинерәк йәйелдереү кәрәк, тигән уйҙамын.

Был йәһәттән Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовҡа рәхмәт: иң тәүге бурыстар рәтендә ул республикабыҙҙа йылҡысылыҡты үҫтереү мәсьәләһен көн үҙәгенә ҡуйҙы. "Иҡтисади күҙлектән ҡарағанда, йылҡысылыҡ менән ҡымыҙ - әҙер милли бренд. Беҙгә яңынан бер ни ҙә булдырырға кәрәкмәй, ата-бабаларыбыҙ беҙҙең өсөн бөтәһен дә эшләгән. Күп йылдар буйы йылҡы үрсетеү беҙҙең халыҡта иҡтисадтың төп нигеҙе булған. Башҡорт ҡымыҙының иң яҡшыһы икәнлеге бөтә донъяға билдәле", - тине ул. Пландар, ниәттәр изге, әлбиттә. Өфө ат заводын, "Аҡбуҙат" ипподромын һәм Дәүләт ат һарайын берләштереү тураһында һүҙ бара. Был уй барып сыҡһа, берләшеп эшләү берәгәйле һөҙөмтәгә килтерер ине, бәлки. Юғиһә, ҡымыҙҙың тыуған илендә ҡымыҙға сарсап йәшәйбеҙ түгелме?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Фән аңыбыҙҙың ижади һәләтен асыҡлай аламы?

Был һорауға яуапты аң серҙәренә арналған ниндәйҙер симпозиумда табырға теләһәгеҙ, бушҡа аҡса ғына түгәсәкһегеҙ. Бығаса яҙып үткән ғәҙәти булмаған һәләттәр өлкәһендәге тикшеренеүҙәр тураһында бер ни ҙә билдәле түгел. Әммә ҡул һелтәргә ашыҡмағыҙ. Әле өмөт бар. Бер төркөм философик ҡарашлы ғалим аңды феноменология күҙлегенән өйрәнергә баҙнат итә һәм коллегаларының үҙгәрмәҫ фекеренә ҡаршы сыға, тикшеренеүҙәргә һәм профессиональ абруйға дотацияны юғалтыу хәүефе булһа ла, тәүәккәлләк күрһәтә. Был өлкәлә Айҙан ҡайтыу менән астронавт Эдгар Митчелл тарафынан нигеҙләнгән институт президенты Уиллис Хармондан да тәрәнгә төшөүсе юҡ. Мин үҙем китаптарымды ярты быуаттан ашыу яҙам, йәғни алғы рәттәрҙә барам һәм бында яңғыҙлыҡ ныҡ һиҙелә икәнлеген раҫларға әҙермен. Моғайын, Хармон да аңға бәйле әхлаҡи, этик һәм рухи мәсьәләләр буйынса ике аҙналыҡ конференцияла үҙен тап шулай тойғандыр.

Хәҙер ҙә аң мәсьәләләре буйынса бихисап конференциялар уҙғарыла. Уларҙа төрлө өлкә белгестәре ҡатнаша. Әммә улар тар урамдар буйлап йүнәлеш ала һәм көрсөккә барып терәлә. Яҡын арала ниндәйҙер иҫ китерлек һәм ғәмәли асышҡа юлыҡыуыбыҙ шикле. Аңды ысынлап өйрәнеүсе тикшеренеүселәрҙе бөгөнгө тормошта эҙләгеҙ: улар һеҙ һәм тормошон яҡшыртыу өсөн үҙ аңын файҙаланырға тырышҡан башҡа кешеләр.

Ә хәҙер киберфизиология тураһында. 1988 йылда йөҙҙәрсә ғалим йөрәктә электрон стимуллауҙы уйлап табыусы Эрл Баккен саҡырыуы буйынса Молокаи утрауына килә. Улар аңдың тәнгә йоғонтоһо өлкәһендәге асыштары менән бүлешергә йыйыла. Дөйөм һығымта шулай ышандырырлыҡ була, ғалимдар бер шикләнеүһеҙ яңы - әлегә аҙ билдәле күренеште аңлатыусы "киберфизиология" аңлатмаһын индерергә ҡарар итә. Ғалимдар электр энергияһының принцибын бигүк яҡшы аңламай, әммә был уларға уны файҙаланырға ҡамасауламай. Был беҙгә киберфизиология менән файҙаланырға бер кем дә ҡамасауламауын аңлата. Йомғаҡлап, шуны әйтергә мөмкин, аң менән тән араһындағы бәйләнеште именлегеңде, байлығыңды һаҡлау өсөн ҡулланырға мөмкин. Мин махсус рәүештә, һеҙ һуҡырҙарса әҙер һүҙҙәрҙе ҡабатламаһын өсөн, аныҡ уйҙағы образдар һәм күрһәтмәләр ҡулланманым. Бында спонтанлыҡ элементы бик мөһим. Әгәр ятлаған һүҙҙәрҙе ҡабатлаһаң, нимәлер юғала. Был мөхәббәт романындағы яратҡан фрагментты цитата итеп килтереү кеүек. Һүҙҙәр механик рәүештә әйтелә, уларҙа хистәр тәрәнлеге юҡ.

Киберфизиологияны дауаланғанда нисек итеп файҙаланырға? ● Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, тәнегеҙҙе яҙығыҙ, көсөргәнештән арындырығыҙ. ● Тәнегеҙҙең эсәнә үтеп инеп, аяғыҙҙың һынған урынын күреүегеҙҙе күҙаллағыҙ. ● Уйығыҙҙа ғына: "Минең ҡәҙерле аяғым, һындырғаным өсөн ғәфү ит. Минең һөйөүемде ҡабул ит һәм тиҙерәк төҙәл", - тип әйтегеҙ. ● Уйығыҙҙа ғына һынған урындың нисек итеп төҙәлеүен күрегеҙ, әйтерһең дә уңалыу тиҙләтелгән темпта бара. ● Уйығыҙҙа ғына: "Шулай тиҙ уңалғаның өсөн рәхмәт", - тип ҡабатлағыҙ. ● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Был күнекмәне тәнегеҙҙең теләһә ниндәй күҙәнәге, һөйәге йәки ниндәйҙер ағзаға ҡарата ғына түгел, ә башҡаларҙы, ара алыҫлығына ҡарамаҫтан, дауалау өсөн дә файҙаланырға була. Көсөргәнештән арыныу - тәрән, ә күреү образдарығыҙ дөрөҫ булырға тейеш. Күптән түгел табиптар доға уҡыу һауығыуҙы яҡынса 35 процентҡа тиҙләтә, тип раҫлаған. Тимәк, быны ла доға тип атарға мөмкин. Нисек кенә атаһаҡ та, был механизм эшләй.

**Роберт СТОУН.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Сеанстар тураһында

Ҡайһы бер пациенттар (әгәр көсөргәнештән арынып, тыныс тора һәм күҙҙәрен асмай икән) төрлө картиналар, образдар күрә, сәйәхәт ҡыла.

Шуныһы мөһим: осраҡлы бер нәмә лә булмай, бер ниндәй ҙә осраҡлы күренештәр күренмәй.

Мәҫәлән, үткәндәрҙә кем булыуығыҙ аша бөгөнгө проблемаларығыҙҙың сығанағын күреүегеҙ ҙә мөмкин (элек беҙ нисек булғанбыҙ, беҙгә тап шундай мөнәсәбәттәләр).

Бер пациенткаға үткәндә аферистка булыуын күрһәтәләр - ул алдап аҡса ала ла юғала. Ә был тормошта уның миллионлы байлығын бер нисә тапҡыр алдап алалар. Ул сеанс ваҡытында үҙенең хаталарын аңлап, илап ғәфү үтенеүҙәрен һораны. Һөҙөмтәлә уны ғәфү иттеләр: әгәр элек ул осраҡлы ғына килеп сыҡҡан эштәрҙә эшләһә, һуңынан абруйлы йорттан фатир һатып алды, әхирәттәренә унлыһуллы алтын биҙәүестәр бүләк итте - финанс бойондороҡһоҙға әйләнде.

Сеанс ваҡытында эргәгеҙҙә ҡасандыр һеҙҙе үпкәләткән, ҡыйырһытҡан, кәмһеткән кешеләрҙең барыһын да күрергә кәрәк. Ул ваҡытта карма төйөндәре сиселер. Осраҡлы бер нәмә лә булмай, бәлки, үткән тормошоғоҙҙа һеҙ уларҙы үпкәләткәнһегеҙҙер.

Бер пациенткаға уҡытыусыһы, ни тиклем генә әҙерләнһә лә, өстән юғары билдә ҡуймаған. Сеанс ваҡытында күҙ алдына килтергәндең икенсе көнөндә ул беренсе тапҡыр бишле ала.

Кем һеҙгә космоэнергетика сеанстарын тәҡдим иткән - мотлаҡ шул кешене эргәгеҙҙә тип хис итегеҙ - ул да дауаланасаҡ. Был бик мөһим - был һеҙҙең уның алдындағы бурысығыҙҙы ҡайтарыу булып тора (һауығыу - баһаһыҙ - һеҙ уға рәхмәтле булырға тейеш).

Үҙ сиратында, кемде саҡырһағыҙ, улар һеҙҙе күҙ алдына килтереп, һеҙ ҙә дауаланасаҡһығыҙ. Иң мөһиме - һеҙ күҙаллаған ваҡытта ул кеше яуаплы эш эшләмәһен. Мәҫәлән, әгәр ул хирург икән, операция яһамаған ваҡыт булһын.

Сеанс өсөн ара алыҫлығы мөһим түгел.

1. Ғәҙәттә, пациенттар бер нисә физик, эмоциональ, социаль һәм рухи киҫкенләшеү аша үтә.

Әгәр төбөнә бысраҡ ултырған стаканға таҙа һыу һалһаҡ, һыу тоноҡ булыр. Һеҙгә таҙа энергия биргәндә лә шундай уҡ күренеш күҙаллана: физик, эфир, астраль, менталь һәм каузаль тәндәрҙә төрлө киҫкенләшеүҙәр башлана.

10 сеанс үткән бер пациентка эш хаҡын ике тапҡырға кәметәләр, әлбиттә, ул кәмһенеп, эштән китә. "Мин сеанстарға йөрөйөм, аурам таҙара, ә яҙмышым насарая", - тип дәғүәләр менән килгән. Бер айҙан һуң, ул тынысланғас, уны икенсе фирмаға эшкә саҡыралар һәм эш хаҡын элеккеһенә ҡарағанда бер нисә тапҡырға күберәк тәҡдим итәләр. Был осраҡта, юғары көстәргә, уның яҙмышын үҙгәртер өсөн, элекке эш урынынан ебәрергә кәрәк булған.

Шуға күрә, сеанстарға йөрөй башлағас, тормошоғоҙҙа нимәләр үҙгәрһә, барыһын да рәхмәтле булып ҡабул итегеҙ.

Һеҙгә барыһы ла насар булып күренеүе мөмкин, ә ғәҙәттә барыһы ла яҡшы. Һәм төрлө тәҡдимдәргә, ишараларға, билдәләргә иғтибарлы булығыҙ. Моғайын, һеҙҙе өйрәнгән һаҙлығығыҙҙан тартып сығарырға, яҙмышығыҙҙы яҡшыртырға теләйҙәрҙер. Яңы кейем кейер алдынан, иҫкеһен сисеп ташларға кәрәк, иҫкегә йәбешеп ятмағыҙ.

2. Космоэнергетика мотлаҡ рәүештә пациенттың үҙенең рухи үҫеше буйынса үҙ аллы интенсив эшләүен күҙаллай.

Ауырыуҙар, уңышһыҙлыҡтар яза түгел, ә дөрөҫ булмаған, насар уйҙар, теләктәр, ғәмәлдәр хаҡында сигнал булып тора. Улар беҙгә үҙебеҙҙе тәрбиәләү, төҙәлеү һәм тормош һабаҡтарын үҙләштереү өсөн бирелә. Юҡҡа ғына: хәл-торошто үҙгәртә алмаһаң, үҙеңдең уға мөнәсәбәтеңде үҙгәрт, тимәйҙәр бит.

Шуға күрә космоэнергеттарға был турала онотторға ярамай һәм төҙәлергә теләмәгән кешене дауалауҙа уңыштарҙы ашыҡтырыу кәрәкмәй. Бындай кешеләргә ни өсөн яфаланғандарын аңлатырға, уйҙарын хис-тойғолары, ғәмәлдәре менән етди эшләргә кәрәклегенә йүнәлтеү зарур.

Әгәр кеше үҙгәрергә теләмәй икән, әрләшеүен, насар уйлауын дауам итә, ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә икән, ул ҡабат үҙенең аураһын бысрата, ҡабат үҙенең проблемаларын һәм ауырыуҙарын тартып ала, бындай дауаланыу нимә кәрәк?

Бәғзеләр үҙгәрергә, уҡырға теләмәй һәм яфаланыуын дауам итә - үҙҙәренең ҡараштарына, принциптарына һәм тәжрибәһенә ҡаршы тура килмәгән бөтөн нәмәне кире ҡаға. Һәр кемдең үҙ һайлауы. Ҡайһы бер ваҡыт ғазап сигергә лә кәрәк, Аллаһҡа ғазап аша киләләр.

Ә Аллаһҡа килеү менән һауығыу, тәү сиратта, рухи һауығыу тормошҡа аша.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**



## 10 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Охотники за бриллиантами", 5-я и 6-я серии. Сериал
22.35 "Мясоеды против травоядных"
23.30 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.45 "Форс-мажоры"
01.40, 03.05 "Собачья работа-2" (К-911). Комедия
03.00 Новости
03.20 "Мозг. Перезагрузка"
04.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 156-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 186-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 1-я и 2-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Доярка из Хацапетовки-3", 5-7-я серии. Сериал
23.15 "Тридцать лет с вождями. Виктор Суходрев". Док. фильм
00.25 "Вести+"
00.45 "Профилактика"
01.55 "Грязный Гарри". Боевик
04.00 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.55 "Мангуст". "Презумпция виновности". Детективный сериал
03.20 "Моя планета"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 00.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.15 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Итоги недели"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**17.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**20.40 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.30 "Любимые мелодии"**

## 11 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Охотники за бриллиантами". Сериал
22.30 "Наследник любой ценой"
23.10 Ночные новости
23.30 Футбол. Отборочный матч чемпионата Европы 2012. Сборная России - сборная Андорры
01.50 "TERRA NOVA", 4-я серия. Сериал
02.40, 03.05 "Генуя". Драма
03.00 Новости
04.30 "Американская семейка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 157-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 187-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 3-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Доярка из Хацапетовки-3", 8-10-я серии
23.10 "Тридцать лет с вождями. Виктор Суходрев"
00.20 "Вести+"
00.40 "Профилактика"
01.50 "Честный детектив"
02.20 "Воскресенье, половина седьмого"
03.55 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Война против своих. Игнатьев. Корнилов. Махров"
00.35 "Таинственная Россия: Ульяновская область. Земля мутантов?"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.30 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.50 "Мангуст". "Страсти по "Маркизу"

### БСТ

**07.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Люблю тебя, мой край родной". Концерт**
**08.00 "Телеканал RTG представляет…"**
**09.00 "Учим башкирский язык"**
**09.15 "Радуга дружбы"**
**10.00 "Не хочу расти одна"**
**10.30 "Бауырсак"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00, 11.45 "Наши годы"**
**11.30, 14.30 Новости**
**13.30 "Специальный репортаж с Собора русских Башкортостана"**
**14.00 "Соцветие танца"**
**14.15 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**15.00 "Тамле" (на башк. яз.)**
**15.30 "Еду я в деревню"**
**16.00 "Пчеловодство в Башкирии"**
**16.45 "Там, где начинается Россия". Сахалин и Курилы**
**17.15 "Автограф". К. Аралбаев**
**17.45 "Орнамент"**
**18.00 "Поступь края эрвел"**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Есть целый мир в душе твоей"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Замандаштар"**
**23.45 Художественный фильм**

## 12 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Охотники за бриллиантами", 7-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Убийство", 3-я серия
01.00, 03.05 "Китайский синдром". Триллер
03.00 "Новости"
03.25 "Хроники Риддика: темная ярость"
04.00 "Американская семейка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 158-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 4-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Доярка из Хацапетовки-3", 11-я и 12-я серии
22.40 "Исторический процесс"
00.15 "Вести+"
00.35 "Профилактика"
01.45 "Воскресенье, половина седьмого"
03.15 "Комната смеха"
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы"
21.30 "Глухарь. Возвращение"
23.15 "Сегодня"
23.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
00.15 "Живые легенды"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.15 "Один день. Новая версия"
02.55 "Город соблазнов"
04.50 "Мангуст". "Камень Рюрика"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 Художественный фильм**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "Этот волшебный мир". Концерт**

## 13 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Охотники за бриллиантами", 8-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя"
01.00, 03.05 "На грани". Боевик
03.00 Новости
03.15 "Обман"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 159-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 5-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Доярка из Хацапетовки-3", 13-я и 14-я серии
22.35 "Поединок"
23.35 "В космос из соцлагеря. Украденная слава"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
01.55 "Воскресенье, половина седьмого"
03.25 "Комната смеха"
04.20 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Судебный детектив"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы"
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
00.20 "Таинственная Россия: Карелия. Ворота в параллельный мир?"
01.20 "Дачный ответ"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов"
04.55 "Мангуст". "Восток - дело тонкое"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Йырлы караз"**
**16.15 "Борсак"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.25 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Авто" (Екатеринбург). Прямая трансляция**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**23.00 "Диспут-клуб "Пятый угол"**
**00.00 "Золотая осень-2011"**
**00.30 "Любимые мелодии"**

## 14 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "КВН". Высшая лига
23.55 "Закрытый показ". "Неадекватные люди". Комедия
03.00 "Пловец". Драма
04.50 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар. Даниил Страхов"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Евросинья. Продолжение". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 190-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 6-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Доярка из Хацапетовки-3", 15-я и 16-я серии
22.50 Юбилейный концерт Николая Баскова
00.25 "Два дня в Париже". Комедия
02.25 "Горячая десятка"
03.30 "Воскресенье, половина седьмого"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение"
23.30 "Казнокрады". "Торговая мафия". Док. цикл
00.40 "Смерч". Фильм-катастрофа
02.45 "Город соблазнов"
04.40 "Мангуст". "Вдова на выданье"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "СКА" (Санкт-Петербург). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.00 "Дарман"**
**00.45 "Муз-базар"**

## 15 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.25, 06.10 "Ханна Монтана: кино"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Вячеслав Бутусов. "Когда умолкнут все песни..." Док. фильм
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Укротительница тигров"
15.15 "Ирина Мирошниченко. Откровения"
16.20 "Новый "Ералаш"
17.00 Концерт к Дню работника сельского хозяйства
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.10 Концерт к Дню работника сельского хозяйства. Продолжение
18.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.30 "Большие гонки"
21.00 "Время"
21.15 "Призрак оперы"
22.45 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.30 "Господин Никто". Фантастика
03.05 "В поисках золотого руна"
05.05 "Американская семейка"

### РОССИЯ 1

04.50 "За витриной универмага"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Капитан своей судьбы"
12.25 "Подари себе жизнь"
12.55 "Доярка из Хацапетовки". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Доярка из Хацапетовки". Продолжение
17.00 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Понаехали тут". Мелодрама
00.35 "Девчата"
01.10 "Стая"
03.05 "Пурпурные сердца"

### НТВ

05.40 "Кримиальное видео-2". "Генеральная уборка"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.25 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Адвокат". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.50 "Нереальная политика"
00.30 "Страшные лейтенанты". Детектив
02.20 "Адвокат"
04.15 "Мангуст". "Чужая война"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 "Субботние встречи"**
**08.45 Мультфильм**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". А. Толстой "Касатка". Спектакль**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.30 Творческий вечер Н. Мусина**
**20.00 "Дарман"**
**20.45 "Башкорттар"**
**21.15 "Полезные новости"**
**22.00 "Золотая осень-2011"**
**22.30 "Башкорт йыры". Полуфинал**
**00.30 "Лесной микрофон"**

## 16 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Стамбульский транзит"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Пять шагов по облакам"
16.05 "Принц Персии: пески времени". Приключения
18.15 "Минута славы. Мечты сбываются!"
19.50 "Специальное задание"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.05 "Боже, какой пустяк!" Юбилейный концерт Александра Иванова и группы "Рондо"
00.55 "Обмани меня", 11-я серия

### РОССИЯ 1

05.25 "Ночное происшествие"
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал. Продолжение
15.45 "Смеяться разрешается"
18.00 "Тихий омут". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Пряники из картошки". Мелодрама
23.15 "Специальный корреспондент"
00.15 "Головокружение"
02.00 "Дублеры"
04.15 "Городок. Дайджест

### НТВ

06.00 "Криминальнре видео-2". "Генеральная уборка"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Адвокат". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Тайный шоу-бизнес: "Ласковый май". Загадка пропавшего миллиарда"
22.55 "НТВшники"
00.00 "Челюсти". Триллер
02.30 "Футбольная ночь"
03.05 "Адвокат"
05.00 "Алтарь Победы. Парад победы"

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!" Концерт**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Бауырхак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.30 "Семэр"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Мастерская на колесах"**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00, 17.00 "Дорога к храму**
**12.30 Новости**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**16.40 "Вестник ГазпромтрансгазУфа"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "ЦСКА" (Москва). Прямая трансляция**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 Новости**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРҘӘРЕ

# ЯҢЫЛЫҠТЫ ХУШҺЫНМАЙҘАР

**Карл Маркс урамында бер яҡлы хәрәкәт буласаҡмы?Был хаҡта уйҙар бар, тик әлегә аныҡ ҡарар ҡабул ителмәгән, тиҙәр Өфө ҡала округы хакимиәтендә.**

Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө көнгә булдырылған бер яҡлы хәрәкәт хаҡында ҡыҙыу фекер алышыуҙар әле булһа туҡтамай. Тик власть органдары белдереүенсә, коллапстың барлыҡҡа килеүе уйланылмаған схемаға түгел, ә автомобиль йөрөтөүселәрҙең үҙҙәренә бәйле, сөнки Ленин урамында бер яҡлы хәрәкәт эшләнгәндән һуң автомобилдәр урамдың ике яғына ла икешәр рәт итеп ҡуйыла. Ошо уҡ сәбәп Коммунистик һәм Революцион урамындағы хәрәкәткә лә ҡамасаулай. Ә шул уҡ ваҡытта Өфө дәүләт авиация техник университеты ҡаршыһындағы һәм Ҡунаҡхана йорто янындағы махсус машиналар ҡуйыу урыны тулыһынса тиерлек буш тора. Шулай итеп, тығынды автомобиль йөрөтөүселәр үҙҙәре барлыҡҡа килтерә һәм үҙҙәре үк ошоға зарлана.

Шулай ҙа бөгөнгө көндә Өфөнөң иң "ауыртҡан" урыны булып Карл Маркс урамы ҡала. Ике яҡтан да юлға ҡуйылған машиналар былай ҙа тар урамды үтмәҫлек хәлгә еткерә. Шулай уҡ машиналар урам сатына, йәйәүлеләр юлына, хатта йәмәғәт транспорты туҡталышында ла тора.

# БУРҘАР КҮҘЕНӘ НИ ЭЛӘГӘ?

**Өфөлә канализация люгы ҡапҡастары юғала. Өфөлә йыл башынан алып 300-ҙән ашыу канализация люгы ҡапҡастары юғалған. Шулай уҡ юлдағы һыуҙы ағыҙа торған рәшәткәләргә лә "айыу майы" һөртәләр.**

Суйындан эшләнгән һәр бер люктың ауырлығы 50 килограмм тирәһе тартыуын иҫәпкә алғанда, уғрыларға бик тырышырға тура киләләр. Юғалған ҡапҡастар ҡала округы хакимиәтенә ҙур бәләләр тыуҙыра, сөнки, бер яҡтан, бер люкты ҡуйыу 20 мең тирәһенә барып баҫһа, икенсенән, асыҡ люктар кеше ғүмере өсөн хәүефле.

Ҡапҡастарҙың юғалыуы хулигандарҙың шаярыуымы йәки дәүләт мөлкәтен урлап һатыусылар эшеме икәнлеге аңлашылмай. Төҫлө металл ҡабул итеү пункттары бындай металл ҡабул итмәүҙәре хаҡында белдерһә лә, бының тап киреһе эшләнгәнен барыһы ла аңлай. Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идараһында белдереүҙәренсә, бындай урлауҙар өсөн язаны ҡатыраҡ итеү һәм халыҡ араһында бының ниндәй хәүеф тыуҙырыуын аңыҡлаусы пропаганда алып барыу мөһим. Шул уҡ ваҡытта, әлегәсә бер кем дә тотолмаған һәм язаға тарттырылмаған.

# ТЫУЫМ КӘМЕРӘК

**Тыуған балалар һаны буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында, Удмуртия һәм Пермь крайынан ҡала, өсөнсө урында.**

Росстат хәбәр итеүенсә, ағымдағы йылдың ете айында республиканың 1000 кешеһенә 13,3 яңы тыуған бала тура килә. Удмуртияла иһә - 13,8 һәм Пермь крайында - 13,7 бала. Башҡортостан менән бер баҫҡысты Ырымбур өлкәһе биләй. Тәүге биш лидер иҫәбендә шулай уҡ Татарстан, Марий Эл һәм Сыуашстан тора.

Ете айҙа республикала бөтәһе 31373 бала донъяға килгән. Былтырғы менән сағыштырғанда был 1495 балаға кәмерәк. Тыуған балаларҙың 50 проценты - ғаиләлә тәүге бала. 35 проценттан ашыу ғаиләлә - икенсегә, 10 процентында өсөнсөгә атай-әсәй булыу бәхетенә өлгәшкәндәр. Тик 3 процент ғаиләләр генә - дүртенсе һәм 2 проценты - бишенсе бала табырға йөрьәт иткән.

# ЯҠШЫМЫ БЫЛ, НАСАРМЫ?

**Башҡортостанда интернет менән 33 процент халыҡ ҡуллана. Был һан республикаға Рәсәйҙә интернет селтәре менән әүҙем ҡулланыусы 10 төбәк исемлегенә инеүгә булышлыҡ итә.**

Бөгөнгө көндә компьютерһыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай кеүек. Ләкин республиканың 54 процент халҡына был еңел бирелә. Республикала интернет менән ҡулланыусылар өлөшө 33,4 процент тәшкил итә һәм был күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә 39-сы урынды биләй. Тәүге урында, әлбиттә, Мәскәү: бында 73 процент халыҡ интернет менән даими ҡуллана. Икенсе урында - Карелия, бында был һан 60 процент. Ә интернет менән ҡулланыусыларҙың иң әҙе Тывала - бары 8 процент.

Ләкин интернет-ҡулланыусыларҙың абсолют һаны буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә 10-сы урында: Бөтә донъя селтәрендә 1 миллион 380 мең кеше "йөрөй". Рейтинг һөҙөмтәләре буйынса република бер ғаиләгә уртаса 0,63 компьютер тура килә. Был күрһәткес бөтә Рәсәй күрһәткесенә тап килә. Рәсәйҙә барлығы 38 процент халыҡ интернет менән ҡуллана.

# ИҢ ТӨҘӨК АУЫЛ-ҠАЛАЛАР

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән иң төҙөк ҡала, ауыл биләмәһен асыҡлау буйынса уҙғарылған республика конкурсы еңеүселәре билдәләнде.**

Уларға БР Торлаҡ-коммуналь хужалығы бюджет-ара трансферттар өсөн 15,6 миллион һум аҡса бүләсәк. Бүленгән аҡсаның 90 проценты муниципаль берәмекте төҙөкләндереүгә йүнәлтелергә тейеш. Аҡсалата премиялар туғыҙ муниципаль берәмеккә категориялары буйынса түбәндәгесә биреләсәк:

Октябрьский ҡалаһы - 3,3 миллион һум.
Туймазы районы - 1,98 миллион һум.
Ишембай районы - 1,32 миллион һум.
Учалы районы - 2,5 миллион һум.
Яңауыл районы - 1,5 миллион һум.
Дүртөйлө районы - 1 миллион һум.
Федоровка районы - 2 миллион һум.
Йылайыр районы - 1,2 миллион һум.
Шаран районы - 800 мең һум.

Конкурс биш төркөм буйынса тиҫтәләгән күрһәткескә ярашлы үткәрелә. Критерийҙар араһында төҙөкләндереү буйынса программаны тормошҡа ашырыуға, территорияның санитар-эпидемиологик һәм экологик торошона, тарихи-мәҙәни һәм тәбиғи мираҫты һаҡлауға, халыҡтың айырым категорияһын транспорт хеҙмәтләндереүенә, прогрессив технологияләр индереүгә, энергияны һаҡлауҙы күтәреүгә һәм башҡаларға иғтибар бирелә.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!




# КИЛЕГЕҘ, КҮРЕГЕҘ - "Ашан" асылды

Һуңғы йылдарҙа Өфө-Аэропорт юлында ҙур-ҙур магазиндар ҡалҡып сыҡты. "Метро","Леруа Мерлен", "ИКЕА", "Касторама" бренды аҫтындағы бөтә донъяға билдәле магазиндар баш ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарға ҡулайлы хаҡҡа һәр төрлө сифатлы тауар тәҡдим итә. 4 октябрҙә улар рәтен "АШАН" гипермаркеты ла тулыландырҙы. Магазинды асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Әнүәр Мәхмүтов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, "АШАН"-Рәсәй директоры Жан-Пьер Жермен һәм башҡа рәсми вәкилдәр ҡатнашты.

- Республикаға "АШАН" селтәренең килеүе һатып алыусыларҙы сифатлы хеҙмәтләндереүҙең яңы стандартын булдырыуҙа ҙур роль уйнай, - тине Әнүәр Әнәс улы. - Был магазиндың асылыуы республика тауар етештереүселәренең үҫеүенә лә яңы импульс өҫтәйәсәк. Әлеге ваҡытта магазинда республиканың 40-тан ашыу етештереүсе предприятиеның тауары тәҡдим ителгән, уларҙың һаны артабан тағы ла артыр, тип уйлайым.

Павел Качкаев "АШАН"дың асылыуын Өфөлә генә түгел, ә тотош республика тормошонда әһәмиәтле ваҡиға тип билдәләне. Ҡала округы хакимиәте башлығы шулай уҡ декабрь айында "МЕГА" магазинының асыласағы хаҡында ла белдерҙе.

Бындай кимәлдәге магазиндың асылыуы республика бюджетына өҫтәмә һалымдар килтереү менән бер рәттән, яңы эш урындары ла булдырҙы. Бөгөнгө көндә, мәҫәлән, "АШАН" гипермаркетында бөтәһе 450 кеше эшләй, ә "МЕГА" төркөмөнә ингән бөтә магазиндар селтәре иһә республикала 3000 кешегә эш урыны бирә.

"АШАН"-Өфө тәҡдим иткән 46 мең тирәһе тауар ассортименты араһында урындағы предприятиеларҙың тауарына ла урын бирелгән. Магазин кәштәләрендә Дүртөйлө һөт комбинаты ризыҡтарын, шулай уҡ республикала етештерелгән һөт, һөт һәм кондитер аҙыҡтары бар. Шулай уҡ магазин тарафынан айырым иғтибар бирелгән "Хәләл" маркаһы аҫтында ла урында етештерелгән аҙыҡ-түлек һатыла. Бөгөнгө көнгә магазин 70-тән ашыу республика тауар етештереүселәре менән килешеү төҙөгән һәм был исемлек артабан арттырыласаҡ, ти гипермаркет директоры Татьяна Кордюкова. Иң күп тәҡдим ителгән тауарҙар рәтенә икмәк, балыҡ, өй өсөн тауарҙар, китап, һауыт-һабаны индерергә була. Шулай уҡ магазинда үлсәп һатыу тауарҙарына ҙур иғтибар бүленгән. "АШАН"-Өфө гипермаркеты көнөнә һигеҙ мендән ашыу һатып алыусыны хеҙмәтләндерәсәк, тип иҫәп тотола.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

ХОККЕЙ

# СӘМҺЕҘ УЙЫН - ЙӘМҺЕҘ УЙЫН

**Новокузнецкиҙың "Металлург" командаһынан үҙ майҙанында 2:3 иҫәбе менән еңелгәндән һуң, "Салауат Юлаев" уйынсылары Омскиҙа ҡунаҡта сәмле, ҡомарлы һәм матур уйын күрһәтер, тип көткән көйәрмәндәрҙең өмөтө аҡланманы. Юлаевсылар "Авангард"тан 4:2 иҫәбе менән еңелде.**

Майҙан хужалары тәүге минутта уҡ уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды һәм беренсе булып иҫәпте асты. Бер аҙҙан һуң юлаевсы Олег Сапрыкин хужаларға яуап шайбаһын индерһә, Денис Платоновтың шайбаһы "Авангард"ты йәнә алға сығарҙы. Беренсе осор 2:1 менән тамамланды. Икенсе осор башланыу менән хужалар Виталий Колесник ҡапҡаһына тағы бер шайба оҙатты, ә осор тамамланыуға иҫәп 4:1 булды. Тик өсөнсө осорҙа ғына юлаевсылар тағы бер шайба менән яуап бирә алды. Уйын 4:2 иҫәбенә "Авангард"тың ышаныслы еңеүе менән тамамланды.

Был еңелеү сәмһеҙ уйындың һөҙөмтәһе булды, тип әйтергә мөмкин. "Салауат Юлаев" командаһы тренерҙары һуңғы уйындарға төплө анализ эшләп, кәрәкле һығымта яһар һәм уйынсыларҙы еңеүле тулҡындарға көйләр, тип көтөргә генә ҡалды.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# ЮЛЫБЫҘ БЕҘҘЕҢ БЕРӘҮ,

## Илебеҙ беҙҙең берәү...

**Был юлы ҡоробоҙға ДАРМАН, БУҒА атлы сәсәндәр ҡушылды. Әйтергә кәрәк, ҡоробоҙ киңәйгән һайын, сәсәндәребеҙҙең зиһендәре үткерләнә, телдәре сарлана бара. Һәр ваҡыттағыса, әйтеште алдағы һандарҙағы һорауҙарға яуап биреүҙән башлайбыҙ.**



**ЭТҠОЛ:**
Уң ҡулы тотҡан ҡамсы,
Һулында сусҡа майы.
Күтәреп ҡуя ҡамсыһын,
Һуғырға сыҡһа яйы.
Уйнашҡа ышанған бисә
Ҡала тигәндәй ирһеҙ,-
Иманһыҙҙар түргә менһә,
Ҡалырбыҙ әле ерһеҙ.

**НУҒАЙ:**
Уралым, тип йырлаған
Батыр Салауат.
Салауаттан ерем беҙгә
Изге аманат.
Ерҙе һатып, ҡарҡ кикереү
Ул бит хыянат.
Ғәрлегенән Ағиҙелгә
Ҡолар Салауат.

**ДАРМАН:**
Завод, фабрик күптәнябыҡ,
Йылғырҙар ситкә һатты.
Баҫып алды олигархтар,
Илем көрсөккә батты.
Был күренеште атайбыҙ
Капитализм, тиеп.
Эш юҡ хәҙер, йәшәйбеҙ беҙ
Ерҙең елеген ейеп.
Урал бабамдың мөлкәтен
Һатып беҙ байыйбыҙмы?
Яттар байый, ә беҙ, халҡым,
Йоҡонан айнырбыҙмы?

**КӨФӨ:**
**Европалар - прагматиктар,**
**Азиялар - тойғоло.**
**Европаса йәшәһәк бит,**
**Хис-моңобоҙ юйылыр ҙа,**
**Рух-тойғобоҙ юғалыр.**
**Ризамын: артҡа ҡарап ҡына**
**Алға бара алмайбыҙ.**
**Артҡа ҡарамай ҙа булмай,**
**Тарихыбыҙ ҡандай бит.**
**Әйтегеҙсе, дуҫҡайҙарым,**
**Ҡайҙа беҙҙең юлыбыҙ?**
**Ҡайҙан китһәк, туңырбыҙ ҙа,**
**Ҡайҙан китһәк, уңырбыҙ?**

**БУҒА:**
Ата-баба тотҡан юл
Беҙгә ҡалған аманат.
Хаҡ Тәғәлә - тура юл
Тайпылмайыҡ, йәмәғәт!
Юлыбыҙ беҙҙең берәү,
Илебеҙ беҙҙең берәү.
Беҙгә уны һаҡларға,
Бирмәйенсә яттарға...

**АҠЫҠ:**
Америка ботон ашап,
Уйлап ултырам әле.
Үҙебеҙҙә үҫмәйме ни
Ҡаҙ-тауыҡ бөпкәләре?
Ҡуҙ ҡыҙамы, Европаға
Тиңләшергә тырышыу?
Азияһы ла кәрәкмәй -
Саманан тыш көнләшеү.
Әл дә үҙем рәсәйлемен
Башҡорт балаһымын мин.
Ғорурлығым артҡан һайын,
Иманым камил минең.

**БАТЫР:**
Ғәмһеҙ булма, йоҡлап ятма
Тиеп, Ырыҫ, хаҡ әйттең.
Тик ниҙәр эшләргә кәрәк,
Ниндәй һүҙәргә еттең?
Көнбайышса йәшәйекме,
Үҙебеҙ мөслим булып,
Бер кризистан - кризисҡаса
Ауропаса ауырып?
Халыҡ яҡшыға саҡырып,
Туҡтатмаһа яманлыҡ.
Аллаһ ул халыҡ өҫтөнән
Ҡуя икенсе халыҡ.
Шуға ла мин Ислам динен
Аңлатырға ашығам.
Халҡым, тик Раббына табын,
Саҡырам бит яҡшыға.

**ЭТҠОЛ:**
Азияла Будда шаман,
Европала - Ватикан.
Беҙгә көн дә килеп торһон
Ҡәғбәтулланан иман.
Азияла ҡояш ҡалҡа,
Европала ул байый.
Ике ҡитғала йәшәйем:
Бер Ҡояшым, бер айым.
Азия, тип уянабыҙ,
Европа, тип ятабыҙ.
Ике ҡитға араһында
Татыу йәшәп ятабыҙ.
Европалылар мәкерле
Азиялар - хәйләле.
Һоғондороп, тартып алыр
Ите епкә бәйләүле.
Азияға һоҡланабыҙ,
Европаға ла гелән.
Торнаға ҡарап ымһынма,
Йәшә турғайың менән.
Ҡуктәге ҡошҡа ынтылһаң,
Ҡулдағың китер осоп.
Һиңә тейеш һандуғасты
Ҡарғалар йөрөй ҡосоп.

Уралыбыҙ гөл-баҡса,
Бал ҡорто булһаҡ ине.
Нектар бирер сәскәләргә
Һағыҙаҡ ҡунған инде.

**ЫРЫҪ:**
Ҡәрҙәштәрем, күҙле булып,
Ҡыланмайыҡ һуҡырҙай.
Йөрөтөп тә ике ҡолаҡ,
Булмайыҡсы һаңғырау.
Хан заманы түгел хәҙер,
Донъя йылдам үҙгәрә.
Ә илебеҙ артта ҡалған
Илле йылға кәмендә.
Батыр ҡорҙаш, зыян юҡтыр
Яҡшы өлгө алыуҙан.
Ни мәғәнә - артта ҡалып,
АҠ(ы)Ш ҡарғап ятыуҙан?
Хаҡ әйтәһең, башҡорттоң да
Фарыз үҙ юлы булыу.
Тик кешелек өлгәшкәнен
Ахмаҡлыҡ - файҙаланмау.
Булмай ятып ҡуктән көтөп
Илебеҙ киләсәген.
Бәйғәмбәр рухты сикләмәй,
Ә баш - Алла бүләге.
Көфө туған, һиңә мәғлүм:
Бик күп милләттәшебеҙ
Рух-тойғоно, хис-моңдо ла
Юғалтҡан күптән инде.
Шуны һаҡлап ҡалыр өсөн
Хоҡуҡи дәүләт кәрәк!
Шунһыҙ дәүләт эшләй алмай
Кеше мәнфәғәтенә.
Ҡуҙ һалайыҡ яҙмаһына
Халыҡ ҡоролтайының -
Күрһәтелгән өҫтөнлөгә
Кеше хоҡуҡтарының.
Был яҙмаларҙың орлоғо
Көслө илдәрҙә тыуған:
Хоҡуҡи дәүләт - бына юл,
Күптән билдәле, туған!
Бөгөнгө көн тәртибендә
Тағы бер шәп юл тора:
Баулынан Бабай-городҡа
Өс йөҙ саҡрым туп-тура.

**КӨФӨ:**
**Йөрәгегеҙ янғаныңа**
**Шаһит булдым, дуҫҡайҙарым!**
**Мобил-донъя сымдарында**
**Саҡ-Суҡ булып ҡош һайраны.**
**Мин был остан тойоп торам**
**Йөрәгегеҙ тибештәрен.**
**Инде бына көҙ ҙә етте -**
**Һанар мәле себештәрҙе.**
**Ырыҫ туған, һүҙең дөрөҫ,**
**Беҙгә кәрәк шундай дәүләт.**
**Тик бирмәҫ бит ул хоҡуҡты**
**Кемдер беҙгә күктән, йәлләп.**
**Азатлыҡты килтермәйҙәр,**
**Уны кәрәк алыу даулап.**
**Тик барыбер бер һорауҙың**
**Яуаптарын тапмайым да:**
**Парижларҙы алған халҡым**
**Мохтаж закон яҡлауына.**
**Ошо һорау көнө-төнө**
**Телеп үтә мейеләрҙе.**
**Илем, тигән ирҙәр һирәк**
**Араһында тереләрҙең...**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**
**СМС аша сәсәндәр әйтешендә ҡатнашыусыларҙың күплеген һәм уларҙың әүҙемлеген күҙ уңында тотоп, "Киске Өфө" гәзите мөхәрририәте төп енеүсенән тыш, тағы ла ике авторҙы билдәләү һәм бүләкләү мәсьәләһен ҡараны. Сәсәндәр ҡорона яңы ҡушылыусылар өсөн телефоныбыҙ номеры:**
**8-917-477-09-74.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪҺЫҘҘЫҢ...

## йөҙө ҡаптай

Ысын дуҫ һәр нәмәлә беҙгә оҡшарға тырышмаясаҡ, һәр ҡылығыбыҙ өсөн маҡтарға ла атлығып тормаясаҡ, ул беҙҙәге иң яҡшыны ғына ҡабул итәсәк.

**(Плутарх).**

Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.

**(Будда).**

Хәҡиҡәткә ғашиҡ кешегә шағир булырға ла, бөйөк булырға ла тырышырға кәрәкмәй. Ул ысын мәғәнәһендә шағир һәм бөйөк.

**(Жюль Ренар).**

Йәшәү менән үлем йәнәш кенә йөрөй, әммә бер-береһе тураһында белмәйҙәр.

**(Эмиль Кроткий).**

Телмәренең торошона ҡарап был телдә һөйләшкән халыҡтың нисек йәшәүе тураһында фекер йөрөтөп була.

**(Хулио Кортасар).**

Сәсәндең теле уртаҡ, сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юлсы бер ауылдан икенсеһенә китеп бара, ти. Ярты юлды үткәс, бер аҙ ял итеп алырға була. Бәхетенә, юл ситендәге матур яланда ботаҡтарын киң йәйеп, манго ағасы үҫеп ултыра. Юлсы ошо ағасҡа һөйәлеп ултыра ла, юғарыға ҡарап, ағас ботаҡтарын, япраҡтарын, емештәрен күҙҙән үткәреп, уйға ҡала: "Ҡайһылай матур ботаҡтар! Ә емештәре һуң, емештәре! Эйе, уларҙы бар итеүсе ахмаҡ түгел..." Хәҙер инде юлсы һуҙылып төшөп ята ла, ағас төҙөлөшөн тағы күҙҙән үткәрә: "Ә шулай ҙа был ағасты бар итеүҙе миңә ҡушһалар, мин башҡа төрлө эшләр инем. Шундай ҙур ағас, ә емештәре бәләкәй генә. Алма саҡлы ғына. Эйе, һиҙелеп тора, был ағасты булдырыусы нимәнелер уйлап еткермәгән. Бына пальманы алайыҡ: үҙе манго ағасынан бәләкәйерәк, ә емештәре ҙурыраҡ. Ҡабаҡты алайыҡ: үҙе өй саҡлым, ә һабағы нәҙек кенә. Ни тиһәң дә, барлыҡҡа килтереүсе улай уҡ аҡыллы түгел ахыры..." Шундай һығымтаға килә юлсы. Тәбиғәттән ниндәйҙер етешһеҙлек табыуына ҡәнәғәтләнеп ята торғас, йоҡлап та китә.**

**Бер саҡ юлсының башына нимәлер килеп төшә һәм ул ҡурҡып уянып, урынынан ырғып тора. Тирә-яғын байҡап, үҙен ҡурҡытыусыны эҙләй. Әммә ул ятҡан урында манго емешенән башҡа бер нәмә лә булмай. Юлсы, ауыртҡан ерен тырнап, манго емешен ҡулына ала һәм уға рәхмәтле ҡиәфәт менән ҡарап тора: "Әлдә генә манго шундай бәләкәй булған. Ҙурыраҡ булһа, ошонда тәбиғәткә һоҡланып ултыра ла алмаҫ инем! Юҡ, ни тиһәң дә, тәбиғәт үҙ эшен белә икән!" - тигән һығымтаға килә ул".**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 3967